ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

12-18 ноябрь (ҡырпаҒай) 2016

№46 (724)

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Ерен һатҡан...**

балаларының киләсәген һатҡан



3

**Мәргән уҡсылар...**

тағы майҙан тотто



6

**Сәхнәлә лә, тормошта ла...**

мин башҡаса була белмәйем



8-9

**Ҡараңғылыҡты әрләгәнсе...**

үҙең бәләкәй генә булһа ла бер шәм тоҡандыр!



12-13

**ТВ-программа** 14

*Тормош ҡануны шулай: бер ишек ябыла икән, икенсеһе асыла. Ләкин бөтөн бәлә шунда: беҙ ябылған ишеккә ҡарап тороп, асылғанына иғтибар итмәйбеҙ.*

*(А. Жид).*

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## РФ Хеҙмәт һәм социаль яҡлау министрлығында эшләмәүсе граждандарҙан йылына 20 мең һум күләмендә һалым түләтеү тураһында һүҙ ҡуҙғатыла. Ошо хаҡта ни әйтерһегеҙ?

**Фәнис ИСХАКОВ, иҡтисад фәндәре кандидаты, Башҡортостандың атҡаҙанған төҙөүсеһе:** Бындай һалым хаҡында тәүгә генә һүҙ ҡуҙғатылмай, бынан элегерәк тә Санкт-Петербург депутаттары башланғысы менән ҡыҙыу ғына бәхәстәр булып алғайны. Тик ул саҡ халыҡ хупламаны бындай закон проектын. Рәсәйҙәрҙең 64 проценты уға ҡәтғи ҡаршы булды, бары тик 23 процент ҡына ыңғай тауыш бирҙе. Әле лә халыҡ был идеяны ҡуш ҡуллап ҡаршылар, тип уйламайым, сөнки Хөкүмәт көрсөктән сығыу, ҡаҙнаны тулыландырыуҙың башҡа юлдарын эҙләү урынына ауыр хәлдән фәҡәт "һалымға йәбешеп" кенә сыҡмаҡсы. Һалым мәсьәләһе көн тәртибенә ҡуйылғас, уны ябай халыҡ, бигерәк тә эшһеҙҙәргә генә түгел, бай ҡатлам вәкилдәренә ҡарата ла ҡулланырға кәрәк, юғиһә, социаль ғәҙеллек тигән нәмәне бөтөнләй онотоп киттеләр. Элита байлығын ҡайҙа илтергә белмәй, шәхси яхталар, самолеттар, спорт клубтары һатып ала, килемдәрен сит илгә сығарып йәшерә. Ә бына уларҙың табышына прогрессив һалым хаҡында - ләм-мим. Эшләмәгән граждандар араһында ла төрлө категория бар, әлбиттә, ләкин таяҡтың ауыр башы һаман да шул фәҡир башына төшәсәге ап-асыҡ. Хөкүмәт халыҡҡа эш урындары булдырыу хаҡында ла ҡайғыртырға тейеш, әгәр инде кеше шул хәлдә лә эштән баш тарта икән, ул саҡта, әлбиттә, "әрәмтамаҡҡа һалым" сараһын ҡулланыу урынлы булыр.

**Әминә ЯХИНА, яҙыусы:** Эшләмәгән граждандарға һалым системаһын ҡабул итерҙән алда белгестәр һәм эксперттар башта йәмәғәтселек фекеренә лә ҡолаҡ һалырға бурыслы, тип уйлайым, сөнки был мәсьәлә бөгөн-иртәгә генә тотоп бойомға ашырыла торған эш түгел. Закон ҡабул ителә ҡалһа, ул бер нисә этаптан торорға, әкренләп кенә тормошҡа ашырыла башларға тейештер. Дөйөм бер һүҙ - эшһеҙҙәр тигән төшөнсәне хасил иткән ҡатламдарҙы өйрәнеү, төркөмдәргә бүлеү үҙе генә лә әллә күпме ваҡытты алыуы ихтимал, сөнки был төркөм ярайһы ҡатмарлашты бөгөн, ул бик күп төрлө социаль ҡатламдарҙы үҙ эсенә ала. Кемдер, мәҫәлән, торлаҡ милкен ҡуртымға биреп, шуның иҫәбенә, ә берәүҙәр, айырыуса ауыл халҡы, мал аҫырап, картуф-йәшелсә үҫтереп, үҙ көсөнә йәшәй. Эшләмәгәндәр араһында ауырыу, инвалидтарҙы ҡараусы кешеләр ҙә байтаҡ. Ҡайҙалыр эшләп йөрөп тә, эш хаҡын конвертта алыусылар хаҡында ла күп һөйләйҙәр. Бындай төркөмдәр бөтәһе лә иҫәпкә алынып, мәғлүмәт базаһына һалынырға тейеш бит. Әгәр инде һалым йыйыу үҙмаҡсат итеп ҡуйылмай, ә Хөкүмәт ысынлап та халыҡтың мәшғүллеген ҡайғырта икән, эш урындары менән тәьмин итһен, был бигерәк тә яҡшы булыр. Табышын йәшереү ниәтендә яллanып эшләүсегә хеҙмәт хаҡын рәсми рәүештә бирмәгән эшҡыуарҙарға ҡарата ла сараһы табылыр ине ул саҡта, юғиһә, был хаҡта ла бик күптән һүҙ бара, ә аныҡ ҡына киҫәтеү сараһы юҡ.

(Дауамы 2-се биттә).

"КИСКЕ ӨФӨ"НӨ УҠЫЙБЫҘ...

# ЫҢҒАЙ ТУЛҠЫНҒА КӨЙЛӘЙ

**Әле генә Өфөлә Ә. Вәлиди исемендәге Милли китапхана БР Мәҙәниәт министрлығы, БР Матбуғат һәм киң мәғлүмәт коммуникациялары агентлығы, БР Мәғариф министрлығы ярҙамында "Китап форум"ы уҙғарҙы. Уның төп маҡсаты - республикабыҙҙа әҙәбиәтте, уҡыу мәҙәниәтен популярлаштырыу ине.**

Был сарала тап ошо һорауға яуаптар эҙләнде. Беҙ, китапханасылар ҙа, йәштәр уҡыуға ылыҡһын өсөн төрлө ысулдар ҡулланып эшләйбеҙ бөгөн. Китаптарҙың хәҙер электрон версияһын интернет киңлектәренән табып уҡырға була, китапхана видеороликтар төшөрөү маһирлығына ла өйрәнә. Башҡорт телендәге "Әҙәби кәрәҙ" видеопроекты ҙур һорау менән файҙаланыла, унда беҙҙең хеҙмәткәрҙәр башҡорт яҙыусылары, шағирҙары менән күрешеп, улар менән әңгәмәләшә. Әммә интернет тормошобоҙҙа ҙур роль уйнаһа ла, шәхес менән шәхсән осрашып, уның менән күҙгә-күҙ ҡарашып ултырып аралашыуға бер ни етмәй, быны милли әҙәбиәт һәм тыуған яҡты өйрәнеү бүлегендә ойошторолған осрашыуҙар раҫлай. Китапты ла интернеттан уҡыуы ҡыҙыҡ түгел кеүек. Быны шуға әйтәм - һуңғы мәлдә гәзит-журналдарҙы ла электрон форматҡа ҡалдырыу ихтималлығы хаҡында һүҙ күп йөрөй. Оҙаҡ йылдар милли баҫмалар бүлегендә эшләйем һәм ололар ҙа, студенттар ҙа, зыялыларыбыҙ ҙа яратҡан "Киске Өфө"нө, мәҫәлән, компьютерға текәлеп уҡып ултырыуҙы бер нисек тә күҙ алдына килтерә алмай икәнен беләм. Ә әҙәбиәтте, уҡыу мәҙәниәтен тап ошондай - ҡулға тотоп уҡый торған баҫмалар, китаптар күтәрәлер барыбер. Шулай уҡ баҫманың популярлығы уның эстәлегенән дә тора, тип иҫәпләйем.

"Киске Өфө" минең дә көтөп алған гәзитем. Яңылыҡтар менән тап уның аша танышырға тырышам, сөнки унда мәсьәләгә тапҡыр һәм дөрөҫ баһа бирелә. Минең өсөн мәғлүмәт сығанағының кире ҡараштар, тормошондо ҡараңғылатып ебәргән кире фекерҙәр менән тултырылмаған булыуы бик мөһим. Ҡайҙандыр яманлыҡ көтөп йәшәгәнсе, йәмғиәттәге матур күренештәргә лә иғтибар итергә, яҡшы йәштәрҙең күркәм эштәренә һоҡланырға, ғөмүмән, үҙеңде ыңғай тулҡынға көйләргә, яманлашмаҫҡа, асыуланмаҫҡа өйрәнергә мөмкин бит! Ошо юҫыҡта эшмәкәрлек алып барыуы менән "Киске Өфө" күптәргә оҡшай.

**Айгөл БУРАНҒОЛОВА,**
**Ә. Вәлиди исемендәге Милли китапхананың бүлек мөдире.**



12+

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# БУЛҒАНДЫ ҺАҠЛАЙ БЕЛӘЙЕК!

***Әлфиә ЗӘБДИНОВА, Өфө ҡалаһының 18-се мәктәбе уҡытыусыһы:*** Башҡорттарыма, туған телебеҙгә иғтибарлыраҡ булайыҡ, тип әйткем килә. Сөнки кешенең үҙ теленә мөнәсәбәте уның мәҙәнилеген сағылдыра. Икенсе телдә һөйләшеп йөрөгән "эре" кеше үҙен әллә кемгә ҡуйһа ла, интеллектуаль кимәле түбән була. Иң мөһиме, балаларҙа туған телебеҙгә ҡарата һөйөү тәрбиәләргә, уларҙың ниндәй хоҡуҡтары һәм бурыстары барлығын аңлатып үҫтерергә кәрәк. Сөнки балалар кеше елкәһендә йәшәү, үҙ ихтыяжын ғына ҡәнәғәтләндереү тураһында ҡайғырта хәҙер. Бөтә нәмә уларға буш бирелергә, бер ниндәй ҙә яуаплылыҡ талап ителмәҫкә тейеш. Мәктәп уҡыусылары менән һөйләшкәндә үҙҙәре "Һеҙҙең хаҡығыҙ юҡ", тип ҡаршы төшөргә белә, ә бурыстары тураһында һораһаң, яуап табылмай. Тимәк, ата-әсәһе уларға хоҡуҡтарын аңлатып үҫтерә, башҡалар уларға ҡарата нимә эшләргә тейешле булыуын беләләр. Ә бына яуап итеп, үҙҙәре тирә-яҡтағыларға ниндәй мөнәсәбәт күрһәтергә тейешлеген, тырышлыҡ һәм әҙәплелек тураһында онотоп китә.

Һәр кем иленә, халҡына, йәмғиәткә, ғаиләһенә файҙа килтерергә, бурыс ҡайтарырға тейеш бит. Балаларҙың бурысы тәү сиратта ата-әсәһенә ихтирам күрһәтеү, шунан инде халҡының мәнфәғәтен ҡайғыртыу, йәмғиәткә кәрәкле шәхес булыу. Быны бары тик үҙ көсө менән бейеклектәр яулаған, тормошто белгән кешеләр генә эшләй ала. Сөнки үҙ ихтыяжын ғына ҡәнәғәтләндереү тураһында уйлаған кешенең башҡа берәүгә яҡшылыҡ эшләү тигән нәмә төшөнә лә инеп сыҡмай. Бөгөн халҡыбыҙға файҙа килтерергә теләһәк, тәбиғәттән килгән һәләттәрҙе, мөмкинлектәрҙе тулыһынса ҡулланып өйрәнәйек, балаларға ла шуны өйрәтәйек.

Башҡорттар башлы бит ул, тик күп саҡта дөрөҫ ҡуллана ғына белмәйбеҙ белемебеҙҙе. Бөгөнгө заманда уңыш ҡаҙаныу, юғары вазифалар биләү өсөн һәр яҡлап та белемле булырға, үҙеңде дөрөҫ итеп кеше араһында тота белергә кәрәк. Донъяла шундай кешеләр була: берәүҙәр барҙы юҡ итергә тора, икенселәр юҡтан бар эшләй. Башҡорт халҡының барыһы ла бар: тыуған ере, туған теле, рухи байлығы, тарихы һ.б. Әммә бына ошо бөтә байлыҡты әрәм-шәрәм итеп бөтмәҫ өсөн йәш быуынды тырыш итеп тәрбиәләйек. Булған нәмәне ҡәҙер итһен, үҙе башҡарырға тейеш эште башҡаларға һылтап, ҡыл да ҡыбырлатмай йәшәргә күнекмәһен.

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## РФ Хеҙмәт һәм социаль яҡлау министрлығында эшләмәүсе граждандарҙан йылына 20 мең һум күләмендә һалым түләтеү тураһында һүҙ ҡуҙғатыла. Ошо хаҡта ни әйтерһегеҙ?

**(Башы 1-се биттә).**

***Камил ФӘРРӘХОВ, тарих уҡытыусыһы, Өфө ҡалаһы:*** Һуңғы ваҡыт ил Хөкүмәте ябай халыҡ күңеленә ятып бөтмәгән ҡарарҙар һәм саралар менән көрсөктән сығырға итә, ахыры. Миңә ҡайһы саҡ Хөкүмәт структуралары халыҡ кеҫәһенә тығылыуҙан ары китә алмай, бар эштәре шул ғына һымаҡ тойолоп китә. Әлбиттә, һәр бер башланғыс төрлө яҡлап өйрәнелә, тикшерелә торғандыр. Рәсәй Хөкүмәте башлығы Д. Медведев был ҡатмарлы мәсьәләне "хәл итеүҙең" тағы бер юлын әйтеп бирҙе бит яңыраҡ: "Был бер ниндәй ҙә һалым түгел, уны улай атамау яҡшыраҡ..." Тик бына уны икенсе төрлө - "Социаль хеҙмәттәргә түләүҙәр" тип атауҙан да бер ни үҙгәрмәй бит, мәсьәлә асыҡ ҡала. Премьер урынбаҫары О. Голодец әйтмешләй, Рәсәй закондары эшләмәгән өсөн кешене ихтыярһыҙлай, яза бирә алмай, һүҙ социаль фондтар керемменә, шул иҫәптән бушлай медицина хеҙмәттәре менән файҙаланған өсөн бер тин дә түләмәүселәр хаҡында бара. Ә бит уларҙың барыһы ла бот күтәреп эшләмәй ятыусылар түгел, күптәре эш урынында рәсми теркәлгән хәлдә лә, эш хаҡын конвертта алыусылар, әйтәйек. Был осраҡта ла улар үҙ ихтыяры менән шундай аҙымға бармай, уны эш биреүсе хәл итә. Бынан тыш, үҙ ҡарамағында, үҙ хужалығында, йәғни үҙ шөғөлө менән мәшғүлдәр һәм ниндәйҙер килем алыусылар күп. Уларҙы ла бит әрәмтамаҡ тип әйтеп булмай. Шуға күрә, эшләмәүселәргә һалым тигән был яңылыҡты, закон проекты булараҡ, уның атамаһын-йөкмәткеһен, ысынлап та, ныҡлабыраҡ тикшерергә һәм шунан һуң ғына ҡабул итергә кәрәктер, тип уйлайым. Юғиһә, эйе, эшләмәй ятыусылар "синыфы" ла байтаҡҡа артты һуңғы 20-30 йыл эсендә. Һәм улар, бер ни булмағандай, кәрәк саҡта дауаханаға ла барып ята, поликлиника юлын да тапай, һәм бушлай. Ә бит улар иҫәбенән, әгәр эшкә һәләтле йәштәге кешеләр икән, социаль хеҙмәттәр өсөн түләүҙәр системаһына ниндәйҙер күләмдә иғәнә күсерелергә тейеш, тип аңлайым мин.

***Йәмилә КОЛМӨХӘМӘТОВА, хеҙмәт ветераны, Баймаҡ районы:*** Ошо хаҡта ишеткәс, колхозда эшләгән йылдарым иҫкә килеп төштө. Эш ауыр булһа ла, аҡсаһы әллә ни теймәһә лә, риза булып, тырышып, дәртләнеп эшләй инек. Әллә заманына күрә эш кешеһен дәртләндерә, күңелен үҫтерә белделәрме - совет осоронда эшләмәгән кеше булманы бит. Һәр хәлдә, ауыл ерендә. Ҡалаларҙа булһа, булғандыр ундайҙар, тик улар ҙа эшләмәй ятмағандыр. Алыпһатарлыҡ менән шөғөлләнгән бер-ике ҡатынды белә инем, гел район баҙарында осрай торғайнылар. Эшләмәгәндәргә закон да ҡаты булды шул. Әле лә шулай кәрәк тә бит, тик Хөкүмәтебеҙ халыҡты йүнле эш менән тәьмин итә алмағас, өндәшмәүҙе хуп күрәлер инде. Эш булһа, башы, аяҡ-ҡулы һау кеше нишләп эшләмәй ятһын инде? Әле бына балалар юғары уҡыу йортонда уҡыуҙы тамамлай ҙа, эш таба алмай интегә. Бер танышымдың Өфөлә йәшәгән ҡыҙы юғары белемле иҡтисадсы, тик һөнәре буйынса эш урыны булмағанлыҡтан, сауҙа үҙәгенә ябай һатыусы булып урынлашты. Икенсе берәүҙәрҙең инженерға уҡып сыҡҡан улдары Себер яғына китеп, ябай эшсе булып йөрөй. Ярай, аҡса эшләй, исмаһам. Дәүләтебеҙ иң тәүҙә илдә етештереүҙе юлға һалһын, эш урындары булдырһын. Халыҡ ҡыуанып эшкә инер ине. Ә былай тота килеп, эшләмәй ята, тип, былай ҙа фәҡир эшһеҙҙең елкәһенә түләү һалыу - кешелекһеҙлек, уйланып етмәгән, сейле-бешле план ул. Йәнәһе лә, социаль фондтарға түләмәһә лә, медицина хеҙмәттәре менән файҙалана, имеш. Ә һеҙ барып ҡарағыҙ әле бөгөн поликлиникаға - барыбер түләүлегә әйләнеп бөттө бит медицина. Бушлай ЭКГ ла, кесе ярау анализы ғына тороп ҡалды...

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**2017 йылдың тәүге яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылыу дауам итә. 50665 индекслы гәзитебеҙгә - 485 һум 40 тингә, 50673 индекслыһына (предприятиелар һәм ойошмалар өсөн) 515 һум 40 тингә яҙыла алаһығыҙ.**




Белеүегеҙсә, гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакциябыҙға ебәргән уҡыусыларыбыҙ даими рәүештә беҙҙең бүләктәргә лайыҡ була килә. Ноябрҙә 2017 йылдың тәүге яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәрҙән бер кеше **"Антология поэзии Башкортостана"**, 2 кеше **Рәшит Назаровтың "Ер һәм Йыһан йыры"**, 1 кеше **Ноғман Мусиндың "Алдар батыр"**, 2 кеше **Әхмәр Үтәбайҙың "Сәхрә"**, 2 кеше **Рәйес Түләктең "Мең дә икенсе кис..."**, 3 кеше **"Бураҡаевтар ижады"**, 10 кеше **2017 йылға "Башҡортса дини календарь"**, 10 кеше **"Шайтан хәйләләре"** китаптарына лайыҡ буласаҡ.

• Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Беҙҙең электрон почта: **info@kiskeufa.ru**. Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитовтың Указы менән Заниль Ғәлләмов республиканың Юстиция эштәре буйынса дәүләт комитеты рәйесе вазифаһын башҡарыусы итеп тәғәйенләнде. Икенсе Указ менән Наилә Ғәлиева, хаҡлы ялға сығыуы сәбәпле, үҙ теләге менән Башҡортостандың Юстиция эштәре буйынса дәүләт комитеты рәйесе вазифаһынан бушатылды.

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитовтың 2016 йылдың 7 ноябрендәге Указы менән Тимур Ҡасимов Башҡортостандың Йәмәғәт палатаһы аппараты етәксеһе итеп тәғәйенләнде. Тимур Салауат улы Ҡасимов 1990 йылда Башҡорт дәүләт университетын тамамлаған. Башҡорт дәүләт университетының Хоҡуҡ институтындағы дәүләт һәм хоҡуҡ теорияһы һәм тарихы кафедраһы доценты.

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов төбәктә коррупцияға ҡаршы эш итеү буйынса эште координациялау буйынса комиссия ултырышын үткәрҙе. Билдәләнеүенсә, быйыл туғыҙ айҙа дәүләт хеҙмәткәрҙәренән 126 кеше дисциплинар яуаплылыҡҡа тарттырылған, өсәүһе эштән бушатылған. Ултырышта йәмғиәттә коррупцияға ҡарата түҙеп торғоһоҙ мөнәсәбәт булдырыу, республика дәүләт власы органдарының, урындағы үҙидараның норматив-хоҡуҡи акттарына коррупцияға ҡаршы экспертиза үткәреү кеүек мәсьәләләр тикшерелде.

✓Златоуст ҡалаһында 1812 йылғы Ватан һуғышында һәм 1813-1814 йылдарҙа рус армияһының сит ил походтарында ҡатнашҡан 18-се Башҡорт атлы полкы яугирҙарына арналған һәйкәл асыла. Һәйкәл төҙөү идеяһын Силәбе өлкәһендәге "Башҡорт ҡоролтайы" йәмәғәт ойошмаһының Златоуст бүлексәһе рәйесе, Ветерандарҙың ҡала советы ағзаһы Данис Хужин тәҡдим иткән. Златоуст депутаттары йыйылышы һәйкәлдең проектын әҙерләргә һәм уны ҡуйыу өсөн урын билдәләргә тигән ҡарар сығарған.

✓31 октябрҙә Рәсәй Президенты Владимир Путин полиция генерал-лейтенанты Михаил Закомалдинды Башҡортостан буйынса эске эштәр министры вазифаһынан бушатҡайны. Әле уның урынына министр вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы тәғәйенләнде. Ул - юстиция генерал-майоры Виктор Михайлов.

*✓ Тәбиғәтебеҙгә, тыуған еребеҙгә, йылға-күлдәребеҙгә ҡарата һаҡсыл ҡарашта, аяулы, уяу булайыҡ. Ситтәр беҙгә килеп эш таба бит, беҙҙең ир-егеттәребеҙ ҙә үҙ ерендә эшен дә, шөғөлөн дә тапһын.*



УЙЛЫҒА -УЙ

# ЕРЕН ҺАТҠАН...

## балаларының киләсәген һатҡан

**Күптән түгел генә тележурналист Андрей Кондрашовтың һыу тураһында ике сериялы тапшырыуын ҡарарға тура килгәйне. Автор тапшырыуҙы әҙерләгәндә эсәр һыуға мохтажлыҡ кисергән бик күп илдәрҙә булып, планетабыҙ кимәлендә һыу ҡытлығы проблемаһын күтәрә.**



Тапшырыуҙы ҡарағанда, үҙебеҙҙең тыуған еребеҙҙе башҡа илдәр менән сағыштырып, беҙ ниндәй бай, матур илдә йәшәйбеҙ, Аллаһҡа шөкөр, эсер һыуҙарыбыҙ таҙа, мул, балыҡҡа бай саф һыулы йылғаларыбыҙ, күҙгә күгек ялтырап ятҡан күлдәребеҙ, сылтырап аҡҡан гәлсәр шишмәләребеҙ бар, тип уйлап ултырҙым.

Андрей Кондрашовтың: "Киләсәктә таҙа һыу иң ҙур байлыҡ булып иҫәпләнәсәк. Өсөнсө Бөтә донъя һуғышы нефть, алтын өсөн дә түгел, ә таҙа һыу өсөн буласаҡ. 2030 йылдарҙан таҙа һыу запасы ныҡ кәмей, ә 2050 йылдарҙан эсәр һыуға ҙур ҡытлыҡ буласаҡ. Ҡайһы ил һыуға бай, шул ил иҡтисади яҡтан да, сәйәси яҡтан да көслөләрҙән һаналасаҡ", - тип әйткән һүҙҙәре тәрән уйға һалды. Хафаланырлыҡ та шул: йыл һайын тиҫтә меңәрләп гектар ерҙәребеҙҙә планетабыҙҙың үпкәһе - урмандар яна, күпмеһе ҡырағайҙарса ҡырҡыла. Күп кенә ваҡ шишмәләр ҡороғанлыҡтан, оло йылғалар, тулыланмай, тауыҡ кисеп сығырлыҡ ҡына булып ҡалды...

Бала саҡта ололарҙың: "Һыуҙың гонаһы ҙур, бушҡа түгеп, әрәм-шәрәм итмәгеҙ. Ахырызаман етһә, кешеләр алтындарын тоҡлап күтәреп, өй беренсә йөрөп, эсәр һыу эҙләр - таба алмаҫтар. Һыу икән, тип ялтырап ятҡан алтындарға барып сығырҙар ҙа, эх, түгел икән шул, тип, уны типкеләп китерҙәр", - тип һөйләгәне иҫкә төшә. Боронғоларҙың һүҙе - быуаттар буйына тупланып килгән тәжрибәнең, аҡылдың үҙе шул. "Һыуһағанға һыу бир. Тар табында сәй эскәнсе, киң табында һыу эс. Һыу - һыйған ярында, ир - тыуған яғында. Һыуы менән ер ҡәҙерле, иле менән ир ҡәҙерле. Һыуһыҙ ергә өй ҡорма, утһыҙ ергә ил ҡорма ("утһыҙ" тигәне "үләнһеҙ" тигәнде аңлата) һ.б. мәҡәлдәрҙе өләсәй-олатайҙарҙан йыш ишетергә тура килә ине. Хәҙистәр китабында ла: "Иң яҡшы саҙаҡа - һыу менән һуғарыу. Аллаһы Тәғәлә ҡиәмәт көндө сүллектә һыуы күп булып та юлаусыны һыуҙан мәхрүм итеүселәр менән һөйләшмәҫ", - тигән юлдар бар. Халҡымдың шул тиклем тәрән аҡыллы, зирәк, тапҡыр һүҙлелеге, буласаҡ хәл-ваҡиғаларҙы алдан күрә белеп, быуаттар буйына әллә нисәмә быуындарҙы иҫкәртә барыуы хайран ҡалдыра. Әкиәт батырҙарыбыҙ ҙа ниндәй бит әле! Береһе лә мөғжизә көтөп, мейес башында ятмаған. Ай үҫәһен көн үҫеп, йыл үҫәһен ай үҫеп, ерен-һыуын һаҡларға, туған халҡының азатлығы, бәхете өсөн ҡулына ҡорал алып, тиҙерәк көрәшкә күтәрелгән. Халҡыбыҙ хуш еҫле сәскәле яландарын, ҡуйы урмандарын, балдай татлы һыуҙарын, сал бөркөттәр төйәге текә ҡаялы ғорур тауҙарын өҙөлөп һөйгән башҡорт батырҙарына Урал батыр, Аҡъял батыр, Ҡамыр батыр, Тау батыр, Урман батыр, Күлуртлар батыр, Йүгерек батыр кеүек исемдәрен биргән. Батырҙарҙың һәр ҡайһыһы үҙенә тәғәйен шөғөлдө намыҫ менән башҡарған: Тау батыр бейек-бейек тауҙар теҙгән, Урман батыр еребеҙҙе ҡуйы урмандары менән биҙәгән, Күлуртлар батыр йылға-күлдәр һағында торған. Ә Урал батыр бар халыҡ алдында баш эйеп:

- Мин - бер кеше, һеҙ - күп кеше; мин түгел, ә ер-һыу үлемһеҙ булһын; ерҙә кешеләр шат, рәхәт йәшәһен! - тип, Тереһыуҙың бер тамсыһын да йотмай, бер алдына, бер артына әйләнеп, бер уңға, бер һулға ҡарап - бөтә тирә-яҡҡа бөркөп ебәргән...

Ш. Бабич әйткәнсә, "аҫты алтын, өҫтө шиғыр, үҙе нур" ерҙәребеҙ сит-яттарҙың күҙҙәрен ҡыҙҙыра шул. Бөгөнгө көндә иң борсолдорғаны - эшһеҙлек бит инде. Һарыҡ тиреһе ябынған әҙәм йораттары, халыҡтың эс-бауырына кергән булып, эш асабыҙ, инфраструктурағыҙҙы яҡшыртабыҙ, тип, алдап-йолдап ерҙәребеҙҙе алмаҫтар, тимә. "Әйҙәгеҙ, ағай-эне, был кеше, эш асам, ти бит, еребеҙҙе бирергә риза булайыҡ та ҡуяйыҡ", - тип, халыҡты йәүкәләп йөрөгән ярамһаҡ, ҡуштан әпкәләйҙәре лә табылыр. Һуңынан беҙ бала саҡта йотлоғоп уҡыған "Аҡъял батыр" әкиәтендәге үҙе бер ҡарыш, һаҡалы мең ҡарыш ҡарт кеүек, яйлап-яйлап эсәр һыуҙарыбыҙға ла хужа булырҙар. "Аҡъял батыр" әкиәте ҡарап тороуға ябай ғына әҫәр булып күренһә лә, һыу проблемаһының ни хәтлем киҫкен икәнлеген күрһәтә, килер быуындарға иҫкәртеү булып яңғырай. Ерен һатҡан эсәр һыуын да, тыуасаҡ ейән-ейәнсәрҙәренең киләсәген дә һатҡан булыр.

Мин был мәҡәләмде, кешеләрҙең йөрәгенә шом һалайым әле, тип яҙманым. Бөтмәй торған байлыҡ булмай ул, йәмәғәт. Боронғоларҙың һүҙҙәренә ҡолаҡ һалһаҡ ине. Килер быуын үҙ тыуған еребеҙҙә етем бала хәлендә эсәр һыуҙарыбыҙға ла мохтажланып, сит-яттар алдында баш эйеп, һыу һатып алып эсеп ултырмаһын, тиһәк, тәбиғәтебеҙгә, тыуған еребеҙгә, йылға-күлдәребеҙгә ҡарата һаҡсыл ҡарашта, аяулы, уяу булайыҡ. Ситтәр беҙгә килеп эш таба бит, беҙҙең ир-егеттәребеҙ ҙә үҙ ерендә эшен дә, шөғөлөн дә тапһын.

**Шәһүрә ӘХМӘҘИЕВА.**
**Учалы районы**
**Ҡәйепҡол ауылы.**

КИЛЕШМӘЙЕМ!

# КИНОТЕАТР...

## мәҙәниәт үҙәге түгелме ни?

**"Киске Өфө"нөң 41-се һанында Лена Хәйруллинаның "Әҙәп хаҡында һүҙ" тигән мәҡәләһен уҡығас, шундай әҙәпһеҙлектең башҡа өлкәләрҙә лә йыш күҙәтелеүе хаҡында һүҙҙе дауам итмәксемен.**

Бер ял көндө баш ҡаланың "Родина" кинотеатрына иртәнге сеансҡа сәйәхәт яһаныҡ балалар менән. Унда күргән мәҙәниәтһеҙлектән бөтөнләй кәйефем төшөп ҡайттым. Байрам көнө булһа ла, фильм яңы булғанғамы, фойе йәштәр, бала-саға менән тулы ине. Һәр береһенең ҡулында - ошонда уҡ һатылған чипсы, поп-корн, һыу. Залға инеп ултырыу менән ашаныу башланды: шаптыр-шоптор, керт-керт килгән тауыштарҙан кинолағы ҡайһы бер һүҙҙәр ишетелмәй ҡалды хатта. Эргә-тирәмә күҙ һалам: балалар ғына түгел, ололар ҙа шул уҡ ашаныу менән мәшғүл. "Моғайын, бөтмәй торған түгелдер", - тип уйлап, был мәхшәрҙең тамамланырын көтәм. Тик артҡы рәттә, ҡолаҡ төбөндә ултырыусылар, ҡаптарын бушатҡас, малайҙарын тағы ла чипсы артынан ебәрҙе. Былар яңы шыптырҙаҡтарын аса башлағас, боролоп, шаяртып ҡуйҙым: "Бәлки, һеҙгә ашханаға барырғалыр?" Теге ғаилә шаяртыуҙы ҡабул итте, көлөшөп алды, әммә ашауҙан туҡтаманы. Башҡаларға көс етмәгәс, хәлемдән килгәнен генә эшләнем: "Күрәһегеҙме, ҡалай йәмһеҙ, ошолайтып ҡыланаһы булмағыҙ", - тип, балаларымды тәрбиәләп алдым.

Студент саҡта ошо "Родина"ға киноға йыш йөрөнөк, һуңлап инеү тыйыла, һөйләшһәң, шундуҡ шелтә яһайҙар ине. Бында ла театрға барғандай, кейенеп-яһанып, хистойғо, эмоциялар менән байыуға өмөтләнеп киленә ине. Ә ауылдарҙа киноға айырыуса хөрмәт менән ҡаранылар. Клуб шып-шым булыр ине. Тышта аяҡ кейемдәрен ҡат-ҡат таҙалап, бысраҡ ваҡыттарҙа йыуып инерҙәр ине, һағыҙ сәйнәп ултырыу ҙа әҙәпһеҙлеккә һаналды. Ҡараған киноларыбыҙҙа сит ил халҡының кинозалдарҙа, телевизор алдында ашанып ултырғанын күреп, аптырай торғайныҡ. Хәҙер үҙебеҙ әллә кемдәрҙе аптыратырлыҡбыҙ.

Гардероб эшләмәгәс, бар халыҡ өҫ кейемдәрендә ултыра. Кейемен һалыусылар ҙа уны тотоп ултырып, йә алғы рәттәге креслоға элеп, ҡамасаулыҡ тыуҙыра. Креслоларында һуҙылып төшөп ятып, һыра эсеүселәр ҙә булды ул көндө. Эсемлектең еҫе бөтөн залға таралып китте. Ҡайһы бер үҫмерҙәр үҙҙәренән алғы рәттә ултырған ҡыҙ-ҡыҙҡынды кәзәкләп ҡаҡшатты. Улары быларға боролоп, екереп, сай-сой килеп һүгенешеп, талашып алдылар. Ундабында телефондар шылтырай, уларына бер тартыныуһыҙ яуап бирәләр. Залға инеп ҡараған, тыйған кеше юҡ. Балаларым: "Иғтибар итмә", - тигән булһа ла, был мәхшәрҙә ял итә лә, ҡараған фильмымды яҡшылап аңлай ҙа алманым.

Ә инде ут янғас, залда күргән әшәке күренештән сәстәр үрә торорлоҡ ине. Ҡайҙа ҡарама - һыу, һыра шешәләре, ялтыр ҡаптар, поп-корн биҙрәләре аунашып ята. Артҡы рәттәге ашамһаҡ ғаиләнең балалары өҫ-башын ҡаға, ауыҙ-моронон таҙалап ала алмай. Чипсыға "ҡойоноп" ултырғандар, күрәһең.

Шулай итеп, кинотеатр мәҙәниәт үҙәге булыуҙан туҡтаған икән хәҙер, тигән фекер менән сыҡтым кинонан. Залда ашанып ултырыуҙы, бер-береңә ҡамасаулауҙы улар үҙҙәре үк хуплай була бит инде. Буфеттары тик шул аҙыҡ тип аталған сүп-сар һәм һыра менән генә сауҙа итә. Программалары тәрбиәгә түгел, ә аҡса эшләүгә ҡоролған. Яҡшыға үҙгәртеп була торған хәлме икән был?..

**Әлиә ИСМӘҒИЛЕВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Республиканың ике юғары уҡыу йорто - Башҡорт дәүләт университеты һәм Өфө дәүләт авиация техник университеты - Рәсәйҙең иң яҡшы 60-тан ашыу вузы исемлегенә инде. "Рәсәй бөгөн" халыҡ-ара мультимедиялы матбуғат үҙәге үткәргән тикшереү мәғлүмәттәре буйынса, 503 университет баһаланған. Бөтә мәғлүмәттәрҙе иҫәпкә алып, вуздың интеграль күрһәткесе булдырылған. Башҡорт дәүләт университетында ул - 81,85, Өфө дәүләт авиация техник университетында 81,02 тәшкил иткән.

✓Өфөлә "XXI быуаттың мәғариф киңлегендә ислам идеалдары һәм ҡиммәттәре" тигән IX халыҡ-ара ғилми-ғәмәли конференция булды. Быйылғы форум "Ғәлиә" мәҙрәсәһенең 110 йыллығына арналды. Баш ҡалаға илдең төрлө төбәктәренән, шулай уҡ Марокко, Берләшкән Ғәрәп Әмирлектәре, Мысыр, Малайзия, Ираҡ, Иордания, Тунис һәм Төркиәнән 150-нән ашыу ҡунаҡ килде.

✓Башҡортостанда мохтаждарҙы торлаҡ менән тәьмин итеү буйынса программаның проекты әҙерләнгән. Программа сиктәрендә 2017-2025 йылдарҙа эконом класлы торлаҡ төҙөргә тәҡдим ителә. Шулай уҡ шәхси йорт төҙөгәндә граждандарға ярҙам кире ҡайтарыу нигеҙендә тормошҡа ашырыла. Башҡортостандың Төҙөлөш һәм архитектура буйынса дәүләт комитеты рәйесе Хәлит Мәхмүтов әйтеүенсә, программаға аҙ килем алған граждандар арзан хаҡҡа фатир һатып алһын өсөн ярҙам итеү механизмдарын индереү ҡаралған.

✓Өфөлә, "Китап" нәшриәтендә, күренекле башҡорт композиторы Заһир Исмәғилевтың әҫәрҙәр йыйынтығының һигеҙенсе томы баҫылып сыҡты. Уға Лев Степанов менән бергә ижад иткән "Сыңрау торна" балетының клавиры ингән. Беренсе томда "Салауат Юлаев", икенсеһендә - "Аҡмулла", өсөнсөһөндә - "Урал илселәре", дүртенсеһендә - "Шәүрә", бишенсеһендә - "Ҡаһым түрә", алтынсыһында - "Ағиҙел тулҡындары" опералары, етенсеһендә "Ҡоҙаса" музыкаль комедияһы баҫылған.

✓Республика Хөкүмәте 2017 йылға тиклем Башҡортостан сода компанияһы акцияларының дәүләт пакетын хосусилаштырырға ниәтләй. Төбәк компания акцияларының 38,27 процентына эйә. Предприятие Башҡортостандың дәүләт милкендә булған һәм 2016-2017 йылдарҙа акцияларын хосусилаштырыу планлаштырылған акционер йәмғиәттәре исемлегенә индерелгән.

**“Башинформ”дан.**

✓ *Мәктәпкәсә ойошмаларҙа бешерелгән аҙыкта гигиеник нормативтар һәм санитар-химик күрһәткестәр буйынса етешһеҙлектәр табылған. Дөйөм белем биреү учреждениеларында ла туҡланыу нормативтарға ярашлы ойошторолмаған.*



*ТӨРЛӨҺӨНӘН*



# ЯҢЫ БИСҠТӘНӘН ФАТИР АЛ!

✓ **Башҡортостанда эш сәфәре менән Италияның MiRare һәм GEA spa компаниялары вәкилдәре булып китте. Улар, урындағы сеймалды ҡулланып, Италия сырҙарын етештереү буйынса проектты тормошҡа ашырыуҙы тикшерҙе.** Делегация ағзалары Илеш һәм Бакалы райондары предприятиеларында булды, уларҙың етештереү базаһы менән танышты. Италия белгестәре фекеренсә, республикала һөттөң сифаты бик юғары. Был уны эшкәртеү буйынса ҙур производство булдырыу өсөн ныҡлы база булыуы ихтимал. Әлеге ваҡытта Бәләбәй һөт комбинаты ай һайын мең тоннанан ашыу сыр етештерә. Әммә республикаға ошо күләм генә етмәй. Шуға күрә осрашыуҙа ҡатнашыусылар бөтә варианттарҙы ҡарағандан һуң был темалы ентеклерәк тикшерергә һөйләште.

✓ **Өфөләге тимер юл вокзалы ҡаршыһында яңы бисҫтә төҙөләсәк. Иҫке шәхси йорттар урынында 8-25 ҡатлы тығыҙ бина төҙөү күҙ уңында тотола.** Ошо көндәрҙә Өфөнөң Совет районы хакимиәтендә К. Маркс урамы, Ибраһимов бульвары һәм проектланған Көнбайыш шоссеһы магистрале менән сикләнгән биләмәнең планын төҙөү проекты буйынса асыҡ тыңлауҙар үтте. Биләмәнең дөйөм майҙаны - алты гектар самаһы. Шуның биш гектары күп ҡатлы торлаҡ өсөн бүленгән. Документацияға ярашлы, һалынған йорттарҙа фатирҙар һаны мең ярымдан ашыу тәшкил итәсәк. Шулай уҡ бында 100 урынлыҡ балалар баҡсаһы, дөйөм туҡланыу һәм көнкүреш хеҙмәтләндереү предприятиелары, спорт залы буласаҡ. Трансформатор подстанцияларын, меңдән ашыу автомобилгә иҫәпләнгән паркингтар төҙөү ҡарала.

✓ **"Роспотребнадзор"ҙың Башҡортостан идаралығы төбәктең 77 мәктәпкәсә һәм дөйөм белем биреү ойошмаларында туҡланыуҙы ойоштороуҙы тикшерҙе.** Белгестәр микробиологик күрһәткестәр буйынса 500-ҙән ашыу һәм санитар-химик күрһәткестәр буйынса 419 әҙер аҙыкты тикшергән. Мәктәпкәсә ойошмаларҙа бешерелгән аҙыкта гигиеник нормативтар (1,7 процент) һәм санитар-химик күрһәткестәр (11,1 процент) буйынса етешһеҙлектәр табылған. Дөйөм белем биреү учреждениеларында ла туҡланыу санитар-химик нормативтарға ярашлы ойошторолмаған (4,7 процент). Файҙаланылған продукттарҙың сифатын тикшереү һөҙөмтәһендә техник регламенттарҙың микробиологик һәм санитар-химик күрһәткестәр буйынса талаптарға тап килмәүе асыҡланған. Асыҡланған ҡағиҙә боҙоуҙар өсөн 282 мең һумдан ашыу суммаға штрафтар һалынған.

*БАШ ҠАЛАМ*

# ӨФӨ ХАЛҠЫ ҮҘЕ ЛӘ...

## Өфөбөҙҙө һаҡларға өйрәнһен




**Минең яратҡан Өфөм үҙенсәлекле архитектура өлгөләренә эйә, әллә күпме милләтте үҙенә туплаусы, үткәнгә лә, бөгөнгөгә лә берҙәй иғтибарлы, әүҙем үҫеүсе ҡала.**

Өфөлә ҡаланың тышҡы йөҙөнә ҡарата илке-һалҡылыҡ юҡлығын билдәләп үткем килә. Урамдарҙы төҙөкләндереүҙәр, ҡаланы таҙа тоторға, тәртип һаҡларға тырышыу - барыһы ла ошо хаҡта һөйләй. Бындай мөнәсәбәттең ҡала округы хакимиәте ағынан ғына түгел, ә тотош Өфө халҡы тарафынан күҙәтелеүе шатландыра. Шәхсән үҙем ҡала урамдарында сүп ташлап йәки башҡа төрлө бысратып йөрөүсе кешеләрҙе һирәк осратам. Өфө "Таҙартҡан түгел, ә ҡыйламаған урын таҙа", тигән принцип менән йәшәй, тип билдәләр инем.

Өфөлә барыһы ла ихласлыҡҡа ҡоролған, кешеләрҙә ҡырыҫлыҡ юҡ. Урамда һис тә ҡыйынһынмай һорауға яуап бирәләр, белгәндәрен өйрәтәләр, хатта кәрәкле урынға оҙатып уҡ ҡуйырға мөмкиндәр. Ә һеҙ тағы ҡайһы ҡалала маршрут автобустарында юл хаҡын сығыр сакта түләгәндәрен күргәнегеҙ бар? Бөтә ерҙә лә аҡса водителгә алдан түләнә. Ошо ябай ғына күренеш тә ҡала халҡының бер-берегенә ышанысы, кешелеклек сифаттары өҫтөнлөгө тураһында һөйләмәйме ни?

Баш ҡалала күҙгә ташланып торған тағы ла бер үҙенсәлек - урыҫ телле халыҡтың һөйләшендә башҡорт теле интонацияһының сағылышы. Был урындағыларға һиҙелмәһә лә, илдең башҡа төбәктәренән килгән урыҫ телләләр быны шунда уҡ билдәләй. "Урындағы"лар ерле халыҡ кеүек һөйләмде һуҙынҡырап тамамлап ҡуя. Хәйер, республикала йәшәүсе башҡа милләттәрҙә башҡорт менталитеты сағылышын телдә генә түгел, төрлө ғөрөф-ғәҙәттәрҙә, иң мөһиме, ҡунаҡсыллыҡта ла күҙәтергә мөмкин бит ул. Тимәк, ғәҙәттәрҙең яманлары ғына түгел, яҡшылары ла "йоға" бер-беренә...

Бөгөнгө Өфө шул тиклем күп ҡырлы, уның тураһындағы тәьҫораттарҙы берҙәм образға йыйып ҡына тасуирлап булмай. Әлбиттә, баш ҡалаға килгән һәр кем күрмәй китмәгән Салауат Юлаев, "Ете ҡыҙ" һәйкәлдәре тураһында әйтеп торорға ла түгел. Шулай ҙа баш ҡаланың йөҙөн һынландырыу өсөн бал ҡорто сәскәлеге, күренекле дәүләт эшмәкәре Шәһит Хоҙайбирҙиндың селтәр семәрле йорт-музейы, төнгө Өфөнө йәнләндереүсе уттар, театрҙар, "Аксаков" паркындағы аҡҡоштар, урам һепереүсегә, "Ваҡыт машинаһы", "Билдәһеҙ һалдатҡа" һәйкәлдәре һәм башҡа ошондай иҫтәлекле урындарҙы ла билдәләп үтмәй мөмкин түгел.

Беҙҙең ҡала Рәсәйҙең иң йәшел ҡалаларының береһе икәне рәсми раҫланған. Ошо йәшеллекте юғалтыуға юл ҡуймайыҡ. Өфөбөҙҙөң киләсәге ҡала халҡы ҡулында. Үҙ иңебеҙҙә баш ҡалабыҙ өсөн яуаплылыҡ ятыуын онотмай көн итәйек.

**Урал НӘҘЕРШИН.**

*ЙӨҘ ЙЫЛЛЫҠҠА - ЙӨҘ ОБЪЕКТ*

# МӘҘӘНИӘТ ЙОРТО -

## ауыл ҡото



**Башҡортостан автономиялы республикаһы ойоштороулоға 100 йыл тулыу уңайынан 100 объект төҙөү тураһындағы шәп идеяны хуплап, мин дә үҙемдең фекерҙәремде еткермәксе булдым. Сөнки республикабыҙ бик ҙур һәм ҡайҙа нимә кәрәклеген уның һәр төбәгендә йәшәгән халыҡтан да яҡшыраҡ белеүсе юҡтыр, моғайын.**

Мәҫәлән, һуңғы йылдарҙа оптималләштереү һылтауы менән беҙҙең Салауат районында барлыҡ мөһим предприятие-учреждениелар Мәсәғүт ауылына күсерелде, ҡалғандары ла яйлап бөтөү алдында. Ауылдар ҙа әкренләп "үлеп бара". Заманында республикаға башҡорттарҙан беренсе опера йырсыһы Хәбир Ғәлимовты биргән, үҙенең йырлы-моңло кешеләре менән дан тотҡан Лағыр ауылында революциянан һуң мәсетте клуб итеп һалғандан һуң бер мәҙәниәт йорто ла сафҡа индерелмәне. Бөгөн ул авария хәлендә. Ауыл халҡы бер төптән булып мәсет бинаһын төҙөй башлап, быйыл, Аллаға шөкөр, ул ишектәрен асты. Ләкин клубты ла халыҡ елкәһенә һалып ҡуйып булмай бит.

Ошо акция сиктәрендә беҙҙең Лағыр ауылында ла, ҡайһы бер район үҙәктәрендә, районыбыҙҙың Арҡауыл ауылындағы кеүек, бассейны, спорт залы, медпункты, мәҙәниәт йорто бер ҡыйыҡ аҫтында булған мәҙәни-спорт комплексы төҙөлһә, мәктәп бинаһында урынлашҡан крайҙы өйрәнеү һәм Хәбир Ғәлимов музейҙарын да шунда күсереү мөмкин булыр ине. Әйтеп китеүемсә, халыҡ беҙҙә йыр-моңға ла маһир, спортта ла һынатмай. Быны район ғына түгел, республика кимәлендәге бәйгеләрҙә яуланған еңеүҙәр ҙә раҫлай. Ҡыҫҡаһы, ҡеүәт ҙур, уға дөрөҫ йүнәлеш биреп, файҙалы юлға йүнәлтергә генә кәрәк.

**Фәнүзә ЯНОВА.**
**Салауат районы Лағыр ауылы.**

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Башҡортостанда федераль юлдарҙа (М-5, М-7, Р-240) 98 машина тәүлек әйләнәһенә эшләй, тип хәбәр иттеләр Федераль юл агентлығының Башҡортостан идаралығында. Юлдарға 2,5 мең тонна самаһы боҙлауыҡҡа ҡаршы реагент һибелгән, эвакуациялау техникаһының дежурлығы ойошторолған.

✓26 декабрҙә "ВДНХ-Экспо" майҙансығында өсөнсө тапҡыр "Изге шыршы-2017" тип аталған инклюзив фестиваль уҙғарыла. Быйыл социаль проектта ҡатнашырға теләүселәрҙән ғаризалар lider2602@mail.ru электрон адресына ҡабул ителә. Хаттың темаһында "Изге шыршыла ҡатнашырға теләйбеҙ" тип яҙырға һәм ойошманың исемен күрһәтергә кәрәк.

✓"Йәнле таҫма" кинокомпанияһы Мәҙәниәт министрлығы ярҙамында "Наган" исемле яңы кинокомедияны прокатҡа сығара. Рәсәй киноһы йылында Башҡортостанда төшөрөлгән берҙәнбер тулы метражлы фильм 1-14 декабрҙә республика ҡалаларында күрһәтелә.

✓17 ноябрҙә Өфөлә "Үҙебеҙҙекен бел: Башҡортостан" тигән тәүге туристик онлайн-күргәҙмә үтә. Күргәҙмә тура эфирҙа бара. Сараны Рәсәйҙең һәм Бойондороҡһоҙ Дәүләттәр Берләшмәһе илдәренең туризм тармағы белгестәре лә күрә ала. Эшлекле программа сиктәрендә Башҡортостандың туристик эшҡыуарлыҡ вәкилдәре иң яҡшы тәкдимдәре менән таныштыра.

✓Ял көндәрендә Өфөлә сираттағы ауыл хужалығы йәрминкәләре уҙғарыла. Шәмбе һәм йәкшәмбе Ленин районында, "Тулҡын" скверы алдындағы майҙанда йәшелсә, бал һәм ит һатыу ойоштороla. Ошо көндәрҙә Орджоникидзе районында, С. Орджоникидзе исемендәге майҙанда ла ауыл хужалығы продукцияһын һатып алырға мөмкин. 13 ноябрҙә Спорт һарайы алдында, шулай уҡ Рыльский урамындағы аллеяла йәрминкә була

✓Башҡортостан СПИД-ты һәм гепатитты иҫкәртеү, дауалау өсөн вирусҡа ҡаршы препараттар һатып алыуға федераль ҡаҙнанан 52 миллион һумдан ашыу аҡса аласаҡ. Тейешле бойороҡҡа Рәсәй Хөкүмәте Рәйесе Дмитрий Медведев ҡул ҡуйған. Федераль бюджетта был аҡсалар 2016 йылға ҡаралған булған. Ҡул ҡуйылған документ менән Рәсәй Һаулыҡ һаҡлау министрлығына ошо һатып алыуҙарҙы финанслауға төбәктәргә бюджет-ара трансферт биреү өсөн 2,28 миллиард һум күләмендәге бюджет ассигнованиелары йүнәлтелә.

✓ *Башҡортостанда йәшәгән 53 кеше алкоголь менән ағыуланыуҙан, 914-е - суицид, 176-һы - үлтереү, 301-е - юл-транспорт ваҡиғаһы, 10-һы ағыуланыу һөҙөмтәһендә үлгән. 20 207 пар никахҡа ингән, 11 662 ғаилә тарҡалған.*



*АЛДАНМА!*

**Торлаҡ төҙөү күләме буйынса уңышлы 10 төбәк иҫәбенә ингән эре ҡалалар өсөн "алданған өлөшсөләр" проблемаһы бөгөн дә көнүҙәк булып ҡала. Төҙөлөп ятҡан йортта фатир алырға ниәт итеп, мутлашыусылар ҡулына эләкмәҫ һәм алданыусылар исемлеген тулыландырмаҫ өсөн нимә белергә кәрәк?**

# ТӨҘӨҮСЕ ЛӘ МУТЛАША -

## фатирһыҙ ҡалма



Граждандарҙың аҡсаларын төҙөлөштә өлөшсө булараҡ килешеү нигеҙендә йәлеп иткән ойошмалар менән мөнәсәбәте 214-се Федераль закон ("Өлөшсө булараҡ төҙөлөштә ҡатнашыу тураһында..."), шулай уҡ "Ҡулланыусылар хоҡуғын яҡлау тураһында" закон нигеҙендә көйләнә. **Тәү сиратта төҙөүсе тураһындағы мәғлүмәтте анализларға кәрәк: компания төҙөлөш баҙарында нисә йыл эшләй, ниндәй объекттарҙы төҙөгән һәм ниндәй уңышҡа өлгәшкән.** Был мәғлүмәттәр асыҡ сығанаҡтарҙа бар, шунда уҡ башҡаларҙың баһаламаһын да уҡырға мөмкин. Мотлаҡ рәүештә БР Арбитраж судының рәсми сайтына инегеҙ, унда аныҡ төҙөлөш компанияһы теге йәки был суд процесында ҡатнашамы-юҡмы, процестың характеры, уның банкротлығы тормошҡа ашырылмаймы икәнлеге тураһында мәғлүмәт алырға мөмкин. Аҡсаны төҙөлөштөң нуленсе циклында индерергә теләп, торлаҡты түбән хаҡҡа алыу мөмкинлеге тураһындағы ымһындырғыс рекламаға ышанмағыҙ.

**Артабан төҙөлөш компанияһының аҡса йәлеп итеүҙең ниндәй ысулын һайлауына иғтибар итергә кәрәк.** 214-се Федераль закондың 1-се статьяһына ярашлы, түбәндәге ысулдар билдәләнгән: өлөшсө булып ҡатнашыу тураһындағы килешеү нигеҙендә; торлаҡ сертификаттары эмитенты сығарыу юлы менән; был эш менән шөғөлләнеүсе кооперативтарҙың эшен көйләүсе федераль закондарға ярашлы, торлаҡ-төҙөлөшө һәм торлаҡ туплау кооперативтары аша. Башҡа ысулдарҙы закон тыя.

Әгәр һеҙгә инвестиция килешеүе төҙөргә тәҡдим итәләр икән, был һеҙҙе уйланырға мәжбүр итергә тейеш. Сөнки төҙөүсе ошо юл менән төҙөлгән килешеүгә закон талаптарын ҡағылдырмаҫҡа тырышыуы бик ихтимал. Былдай килешеү төҙөһәгеҙ, атап үтелгән Федераль закон буйынса гарантияларға (төҙөүсе килешеү шарттарын боҙған осраҡта, гражданға юғалтыуҙы кире ҡайтарыу буйынса махсус гарантиялар; боҙолған хоҡуҡтар һәм законлы ихтыяжды ҡәнәғәтләндереү өсөн законда ҡаралған ысулдарҙы тулыһынса файҙаланыу; властың вәкәләтле органдары тарафынан һөҙөмтәле ярҙам алыу) эйә булмайһығыҙ.

214-се Федераль закондың 4-се статьяһының 4-се өлөшөнә ярашлы, төҙөлөштә өлөшсө булып ҡатнашыу килешеүендә биш мотлаҡ пункт булырға тейеш. **Беренсенән,** унда төҙөүсе проект документацияһына ярашлы күп фатирлы йортто йәки күсемһеҙ милектең башҡа объектын сафҡа индереүгә рөхсәт алғандан һуң өлөшсөгә биреләсәк аныҡ объекттың билдәләмәһе яҙылырға тейеш. **Икенсенән**, документта төҙөүсенең төҙөлөштә ҡатнашыусы өлөшсөгә тейешле өлөштө тапшырыу ваҡыты тураһында мәғлүмәт булырға тейеш. **Өсөнсөнән,** килешеү хаҡы, уны түләү тәртибе һәм ваҡыты. **Дүртенсенән,** төҙөлөштәге өлөш объектына гарантия ваҡыты күрһәтелергә тейеш. **Бишенсе пункт** - төҙөүсенең килешеү буйынса ҡаралған бурыстарын үтәүҙе тәьмин итеү ысулдары. Ошо пункттарҙың береһе генә булмағанда ла килешеү төҙөлмәгән тип һанала. Бынан тыш, килешеүҙең Росреестрҙа теркәлеүе мотлаҡ.

**Килешеү төҙөгәнгә тиклем төҙөүсенән төҙөлөшкә рөхсәт ҡағыҙын, шулай уҡ күп фатирлы йорт төҙөү өсөн алынған ер участкаһына милек йәки ҡуртым хоҡуғын раҫлаусы дәүләт теркәүе тураһында документ талап итергә, уның проект декларацияһы ҡайҙа баҫылып сығыуын белешергә кәрәк.** Проект декларацияһы менән танышып сыҡҡандан һуң, объектты тулыһынса күҙаллай алаһығыҙ. Әгәр был документтар булмаһа, төҙөүсенең төҙөлөш өсөн аҡса йәлеп итергә хоҡуғы юҡ.

Быларҙан тыш, ул танышыу өсөн ойоштороу документтарын, дәүләт теркәүе тураһында танытма, һалым органында иҫәпкә ҡуйылыуы тураһында танытма, финанс-хужалыҡ эшмәкәрлеге тураһында отчет, раҫланған йыллыҡ отчет, бухгалтер балансы, аудитор һығымталары менән таныштырырға бурыслы. Был документтар менән танышыу уның финанс хәлен һәм уның менән килешеү төҙөү ярайлы, юҡмы икәнен асыҡларға ярҙам итә.

Бары тик ошо нормалар үтәлгәндә генә һалынған аҡсаларығыҙ юғалмаҫына, ә инде төҙөлөш тамамланғандан һуң яңы фатирҙа өй туйлай алыуығыҙға гарантия буласаҡ. Әгәр төҙөлөштә өлөшсө булараҡ ҡатнашыуға бәйле һорауҙарығыҙ булһа, Өфө ҡала хакимиәтенең Ҡулланыусылар хоҡуғын яҡлау буйынса бүлек белгестәренән (347) 235-99-45, 237-23-04, 263-01-26 телефондары буйынса йәки үҙегеҙ йәшәгән урында ҡабул итеүгә яҙылып, консультация ала алаһығыҙ.

**Әйткәндәй, Өфөлә ышанысһы төҙөлөштәрҙең сайт-картаһы төҙөлдө. Стройкиуфы.рф порталында баш ҡалала төҙөлгән йорттар, шулай уҡ социаль һәм коммерция объекттары тураһында мәғлүмәттәр бар һәм улар даими яңыртыла. Унда заказсы, төҙөүсе һәм рөхсәт документтары булыуы хаҡында мәғлүмәттәр күрһәтелгән.**

**Өфө ҡала хакимиәтенең матбуғат хеҙмәте.**

*ТӨРЛӨҺӨНӘН*



# БУШЛАЙ ЕР БИРЕЛМӘЙМЕ?

✓Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы депутаттары ҡайһы бер сәбәптәр буйынса күп балалы һәм аҙ тәьмин ителгән ғаиләләргә бушлай ер участкаларын бүлеүҙе тыйған закон проектын ҡараны. Мәҫәлән, әгәр ғаиләнең баҡсаһы бар икән, ул бушлай ер алыуға дәғүә итә алмай. Законға үҙгәрештәр 27 октябрҙә республика парламентының пленар ултырышында тәүге уҡыуҙа ҡабул ителде. Башҡортостан ер һәм мөлкәт мөнәсәбәттәре министрының беренсе урынбаҫары Альмир Ғәзизов әйтеүенсә, "ғәмәлдәге ҡануниәт инвалид бала тәрбиәләгән, аҙ тәьмин ителгән, йәш һәм күп балалы ғаиләләргә йорт төҙөү өсөн бушлай ер алыуға хоҡуҡ бирә". Ағымдағы йылдың 1 октябренә бирелгән мәғлүмәттәр буйынса, республикалағы 78 меңдән ашыу ғаилә участка алыу өсөн мөрәжәғәт иткән. Уларҙың 42 меңдән ашыуы - күп балалы. Яртыһынан ашыуы ерле булған. Тағы ла 37 мең мохтаж ғаилә сиратта тора.

✓Рәсәй Хеҙмәт һәм социаль яҡлау министрлығы әсәлек капиталын алыу ҡағиҙәләрен ябайлаштырҙы. 4 ноябрҙән, Хеҙмәт министрлығының бойороғо көсөнә ингәс, ҡатын-ҡыҙҙарға сертификат юллау өсөн аҙыраҡ белешмәләр йыйырға кәрәк. Хәҙер әсәнең торған урыны һәм гражданлығы тураһында мәғлүмәт Эске эштәр министрлығынан Рәсәй Пенсия фондына туранан-тура килә. Ғаризаны Пенсия фондында, күп функциялы үҙәктәр, почта аша йәки интернет ярҙамында бирергә мөмкин. Бөгөн электрон сервистар - дәүләт хеҙмәттәре сайты һәм Пенсия фонды порталында шәхси кабинет ғаризалар ҡабул итә. Әгәр әсәнең электрон ҡултамғаһы бар икән, ул сертификат алыу өсөн ебәрелгән документтарҙы шуның менән нығыта ала. Булмаһа, фондҡа йәки күп функциялы үҙәккә барырға кәрәк. Әсәлек капиталы суммаһынан 25 мең һумды алыуға ғариза биреү өсөн ошо учреждениеларға барыу талап ителмәй. Уны интернет аша ла ебәрергә мөмкин. Былдай ғаризалар 30 ноябргә тиклем ҡабул ителә.

✓Дәүләт статистикаһы федераль хеҙмәте мәғлүмәттәре буйынса, Башҡортостанда тыуым һәм үлем кәмегән, кешеләр шулай уҡ аҙыраҡ өйләнешә һәм айырылыша башлаған. Быйыл туғыҙ айҙа республикала 42 580 сабый донъяға килгән, был 2015 йылдың ошо уҡ осоро менән сағыштырғанда 1460-ҡа кәмерәк. 39 577 кеше (-1634) вафат булған. 5009 кеше (+339) - онкология, 15 809-ы (+146) - ҡан әйләнеше, 2045-е (-273) - тын алыу ағзалары, 1713-ө (-241) аш һеңдереү сирҙәренән яҡты донъя менән хушлашҡан. Башҡортостанда йәшәгән 53 кеше алкоголь менән ағыуланыуҙан, 914-е (-55) - суицид, 176-һы (-48) - үлтереү, 301-е (-145) - юл-транспорт ваҡиғаһы, 10-һы (-13) ағыуланыу һөҙөмтәһендә үлгән. Йыл башынан 218 кеше һыуға батҡан. Ағымдағы йылдың туғыҙ айында Башҡортостанда 20 207 пар (3583-кә кәм) никахҡа ингән, 11 662 ғаилә (184-кә кәм) тарҡалған.

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Тынысланыу өсөн..

❖ Күңел тыныслығын ҡайтарыу өсөн үләндәр эсеп алыу ҙа файҙалы. 50-шәр грамм бәйғәмбәр тырнағы сәскәһе менән мәтрүшкә, 30 грамм еҙтөймә (пижма) үләнен бергә ҡушып болғатығыҙ. 1 ҡалаҡ үлән ҡатнашмаһына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға һәм 2-3 ай дауамында көнөнә 3 тапҡыр (ашар алдынан) яртышар стакан эсергә.

### Йүткереү

❖ Йүткереүҙе баҫыу, бронхит, трахеитты дауалау өсөн айва ҡулланығыҙ. Ярты литр йылымыс һыуға 5-10 грамм айва орлоғон һалып, масса ҡуйыра башлағансы һелкетергә. 30 минут төнәткәс, тәменсә бал өҫтәргә һәм сәй итеп эсергә. Көнөнә 3-4 тапҡыр, ашар алдынан хәлегеҙ яҡшырғансы эсегеҙ. Йүткереүҙе банан дауалай. 2 ныҡ бешкән бананды эмаль һауытта иҙеп, 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, болғатырға һәм бер аҙ талғын утҡа ҡуйып йылытырға. Бал өҫтәргә һәм йотомлап эсергә.

### Быуындар һыҙлағанда

❖ Был шифалы майҙы артрит, артроз, шулай уҡ быуындар һыҙлағанда, арҡала ауыртыу барлыҡҡа килгәндә һөртөргә. 300 мл медицина һәм 10 мл камфара спирты, 10 төймә анальгин дарыуы, 10 мл йодты яҡшылап болғатырға ла, 21 көн ҡараңғы урында тоторға. Ҡулланыр алдынан болғатырға.

### Йоҡлай алмаһағыҙ...

❖ 3 өлөш ҡомалаҡ тубырсыҡтары, 2 өлөш ҡаҙаяҡ (папоротник), 1 өлөш лавр япрағын марлянан тегелгән мендәргә тултырығыҙ һәм йоҡлаған урынығыҙҙа баш осона элеп ҡуйығыҙ.

❖ Тигеҙ өлөштә ҡара сәй менән аҡ сәскә үләнен болғатығыҙ. Йоҡлар алдынан 1 ҡалаҡ аҡ сәскәле сәйгә 1 стакан ҡайнар һыу өҫтәп, 5 минуттан эсергә.

### Үпкәләр һәм бөйөрҙәр сиренән

❖ 10 грамм ваҡланған ҡарағай тубырсыҡтарына бер стакан ҡайнар һыу ҡойорға ла, 4 сәғәт төнәтергә. Һәр 2-3 сәғәт һайын 1-әр ҡалаҡ эсергә.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

ЙОЛАЛАРЫБЫҘ

# ХАЛЫҠ МЕДИЦИНАҺЫ

Яңы тыуған баланың донъяға килеүенә 1-2 сәғәт уҙғас, уны имеҙергә рөхсәт ителгән. Беренсе тапҡыр имеҙер алдынан сабыйға киләсәге бәхетле булһын өсөн бер балғалаҡ бал йәки һары (йәки күбек) май ҡаптырғандар. Имеҙеү осоро 1 - 1,5, ҡайһы ваҡыт 3-4 йәшкә тиклем һуҙылған. Имеҙгәндә ваҡыт билдәләнмәгән - бала, туйып, үҙе туктағансы имгән. Имергә теләге тыуа икән, йәнә имеҙгәндәр. Йәй көнө имсәк ташлатмағандар.

Имеҙеүгә өҫтәп ашатыу 4-6 айҙан башланған. Тәүҙә һыйыр һөтө, һуңынан, иҙеп, ғаилә ашаған бөтә төр ашамлыҡ бирелгән. Имеҙлек ҡулланылмаған. 3-4 йәштән алып, яҙғы-йәйге ваҡытта балаға ашатыу өсөн ҡыр йәшелсәһе, ләк-емеше киң ҡулланылған. Йыуа, ҡуҙғалаҡ, ҡаҡы һымаҡ үҫемлектәр эсәктәрҙәге паразит селәүсен-ҡорттарҙан ҡотолорға ярҙам иткән, зәңге ауырыуынан һаҡлаған.

Баланы беренсе тапҡыр йыуындырғанда һыуға бер семтем тоҙ һалғандар. Боронғолар әйтеүенсә, тоҙло һыуҙа сабыйҙың тиреһе "нығый" һәм тире ауырыуҙарына, боҙолоуға тиҙ бирешеп бармай. Яңы тыуған баланың сәсен ҡырғандар. Был сара сәс үҫеүҙе яҡшырта, сәс ҡуйыраҡ булып үҫә, тип иҫәпләгәндәр. Өҫтәүенә, сәсте ҡырыу баланың башын ҡаплаған ҡауаҡтың тиҙ бөтөүенә булышлыҡ иткән.

Башҡорт ғаиләһендә имсәк баланы мотлаҡ рәүештә биләгәндәр. Боронғолар фекеренсә, биләү баланың аяҡтарын кәкерәйеүҙән һаҡлай. Бала йоҡлағанда тулай, тибенә, йүргәгә асылып китеп, һыуыҡ тейеүе бар, биләү ниндәйҙер кимәлдә ошонан да һаҡлай. Баланың тәне сейләнмәһен тип, йүргәк аҫтына ҡоро сөрөк онтағы һалғандар.

Балаларҙы эшһөйәр итеп тәрбиәләргә тырышҡандар. 3-4 йәшкә тиклем бала ғәҙәттә әсәһе янында булған. Аҙаҡ ҡыҙ бала әсәһе янында йөрөп, ҡатын-ҡыҙҙарға хас булған төрлө хужалыҡ эшенә, ә малайҙар атаһы эргәһендә йөрөп, мал ҡарарға, сәсеү эшенә һ.б. өйрәтелгән. Атай кеше йыш ҡына 4-5 йәшлек улын атҡа мендергән. Шуға ла инде башҡорттар оҫта һыбайлы булыуы менән дан тотҡан.

Баланы эшһөйәр итеп тәрбиәләүҙә иң элек ата-әсәнең өлгөһө мөһим роль уйнаған. Эшкә өйрәткәндә баланың көс-хәле лә иҫәпкә алынған. Мәҫәлән, 12 йәше тулмаған ҡыҙ балаға һыу ташырға рөхсәт ителмәгән. Ул һыу килтерә икән, уны эсеү гонаһ тип һаналған. 12 йәше тулмайынса ҡыҙҙарға үҙ аллы ашһыу әҙерләү рөхсәт ителмәгән.

Балалар тормошона физик культура һәм спорт иртә ингән. Хәрәкәткә ҡоролған төрлө уйындар, ярыштар йәш быуынға физик үҫеш, сынығыуҙан тыш, мораль-психик һәм эстетик тәрбиә лә биргән.

Балаларҙы физик язалау һирәк ҡулланылған, ул да булһа, бик тә тыңламаған баланың ултырышына сәпәүҙән йәки семтеп алыуҙан торған. Башҡа, билгә хатта еңелсә һуғыу ҡәтғи рәүештә тыйылған, халыҡ тарафынан ғәйепләнгән.

Баланы һаулыҡ һаҡлауға иртә өйрәткәндәр. Ашыҡмайынса, ныҡ сәйнәп ашарға, көсөнән килмәгән эшкә тотонмаҫҡа, тәртип-таҙалыҡ һаҡларға, эңер мәлендә сүп түгелгән ерҙә уйнамаҫҡа, һалҡын ергә ултырмаҫҡа һ.б. Баласағаның һаулығын нығытыуға тағы ла бер ғәҙәт ярҙам иткән. Хатта етеш йәшәгән ғаиләләрҙә лә 3-4 йәше тулған балалар йәй буйына ялан аяҡ йөрөгән. Фән иҫбатлауынса, табандарҙы сыныҡтырыу бигерәк тә һыуыҡ тейеүҙән һаҡланыу йәһәтенән файҙалы.

**Варис ҒҮМӘРОВ.**
**"Башҡорт халыҡ медицинаһы".**
**(Дауамы бар).**

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# МӘРГӘН УҠСЫЛАР...

## тағы майҙан тотто

**Үткән аҙнала Өфө ҡалаһының Мостай Кәрим исемендәге 158-се башҡорт гимназияһында Күсәрбай Аҡсулпанов исемендәге республика уҡсылар турниры үтте. Башҡорт уҡ-һаҙағын, традицион уҡтан атыусылар мәктәбен популярлаштырыу, милли кейемдәрҙе тергеҙеүҙе маҡсат иткән был сара "Мәргән уҡсы" фестивале сиктәрендә Башҡортостан йыйылма командаһын туплау маҡсатында ойошторолған ярыштарҙың береһе.**

### Башҡорт батыры Күсәрбай кем?

Ҡатнашыусылар менән танышыуҙан алда, һүҙҙе "Кем ул әлеге ярышҡа исем биргән Күсәрбай Аҡсулпанов?" тигән һорауҙан башлайыҡ.

- Күсәрбай Аҡсулпанов - юрматы ырыуы башҡорто, - тине уйынды ойоштороусы Юлай Ғәлиуллин. - Ул 1788-1790 йылдарҙағы рус-швед һуғышында ҡатнашҡан 3-сө башҡорт полкы старшинаһы. "Тыныслыҡ тураһында" килешеүгә ҡул ҡуйылғас, Күсәрбай Аҡсулпанов 1790 йылда швед короле Густав 3-гә уҡ атыу оҫталығын күрһәтә. Был ваҡиға тураһында шул дәүер дәүләт эшмәкәре, тарихсы Алексей Николаевич Оленин үҙенең "Археологические труды" хеҙмәтенең икенсе томында (81-83 бб.) яҙып ҡалдырған. Хеҙмәт Санкт-Петербургта һаҡлана. Текста былай тиелә: "...Күсәрбай, атта сабып килгән килеш, юғарыға йомортҡа ырғытты һәм, уның артынса, йәшен тиҙлегендә бер уҡ осороп, ергә төшөп барған йомортҡаны селпәрәмә килтерҙе. Унан, һаҙағынан иҫке уғын тартып сығарып, ергә ырғытты ла, ат өҫтөндә сабып килеп, уҡты әйләп алып, уны ла һауаға ырғытты. Шул ыңғайҙан яңы уғын алып, йомортҡа ише, һауаға ташлаған уғын да яра атты..."

Күсәрбай Аҡсулпанов - Әбей батша ҡулынан тархانлыҡ грамотаһы алған билдәле шәхес. Уның улы Аралбай ҙа атаһы менән рус-швед һуғышында ҡатнаша, 1812 йылғы Ватан һуғышында "төньяҡ амурҙары" сафында Парижға са барып етә. Йәй көнө "Мәргән уҡсы" фестиваленә әҙерләнеп йөрөгән сағыбыҙҙа Аҡсулпановтар варисҭары беҙҙең менән бәйләнешкә инеп, фестивалде ҡартаталары исеме менән атауыбыҙҙы үтенгәйне. Беҙ был тәҡдимде ҡабул итеп, бына ошо турнирҙы - Күсәрбай Аҡсулпанов кубогын айырым үткәрергә ҡарар иткәйнек...

### Ҡыҙҙар ҙа, малайҙар ҙа...

Шулай итеп, турнирҙа утыҙ уҡсы көс һынашты. Араларында балалар ҙа, ҡатын-ҡыҙҙар ҙа бар ине. Ҡырғыҙстанда үткән Икенсе Бөтә донъя күсмә халыҡтары уйындарында ҡатнашыусы Гөлгөнә Баймырҙина, "Мәргән уҡсы" традицион уҡ атыусылар фестивалендә үҙ көсөн һынарға өлгөргән "Башҡортостан" гәзите журналисы Розалия Зарипова һәм Ғафури районынан Элина Сөләймәновалар яуҙа ир-егеттәргә тәрәк булыр сая ҡатын-ҡыҙҙар образын һынландырҙы. Әйткәндәй, турнир һөҙөмтәләре буйынса Розалия һиреҙенсе баҫҡысты биләп, иң көслө ун мәргән исемлегенә инде. Ярышта ҡатнашыусылар араһынан иң йәш мәргән - Өфөнөң Ф.Мостафина исемендәге ҡала башҡорт гимназияһы 6-сы синыф уҡыусыһы Йәдкәр Ҡунафин да иң көслөләр араһына инде - унынсы һөҙөмтә күрһәтте. Уны майҙанға атаһы -"Шоңҡар" журналының баш мөхәррире Мөнир Ҡунафин алып килгәйне. Мөнир Сәхиулла улы әйтеүенсә, Йәдкәрҙә уҡ атыу теләге "Мәргән уҡсы" фестивален ҡарағанда тоҡанған. Ул атаһынан Ғәлинур Зарипов тигән оҫтанан ян, уҡһаҙаҡ һатып алдырған, буш ваҡытында көн һайын үҙҙәренең шәхси йорт ихатаһында уҡ атыу серҙәрен өйрәнгән. "2-3-әр сәғәтләп шөғөлләнә торғас, уҡ атыу буйынса атайҙы ла үтеп киттем", - тип маһайҙы Йәдкәр. Уның һүҙҙәрен атаһы йөпләп, улы өсөн ҡыуанысын йәшермәне.

Сибай интернат-гимназияһы уҡыусыһы, Йәдкәрҙән ике йәшкә өлкәнерәк Шәйнур Баймырҙин да мәрәйҙәр һаны буйынса 11-се баҫҡысты биләне. Шәйнурҙы Ғафури районында үткән "Мәргән уҡсы" фестивалендә 2-се урын яулаусы мәргән тип танылған Хөрмәт Зөбәйер улы Таһиров әҙерләп алып килгән (алдағы һандарҙа уның менән әңгәмә баҫылаcаҡ әле).

### Уғым, сәпкә тей!

Әлеге турнирҙы ойоштороусыларҙың береһе - "Киске Өфө" гәзите хеҙмәткәре Артур Батыршиндан бәйгеләге һынауҙар, сәптәр тураһында һөйләүен үтендек.

- Был юлы ҡатнашыусылар өс һынау алдына ҡуйылды. Тәүгеһе - өс дуңгәләкле сәпкә атыу булһа, икенсе һынау - биш дағаға атыу. Һәр дағаға бер уҡ тейҙереү ҡаралғайны. Ике уғың бер дағаға эләккән хәлдә, береһе генә иҫәпкә алына. Өсөнсө һынау - ҡәлгә башындағы тар уйымдарҙан уҡ яуҙырыуҙы ҡабатлау. Тар ғына ярыҡ формаһындағы ҡулайлама эргәһенә тубыҡланып ултырып, "тәре йөрөтөүселәр" ҡалҡаны рәүешендәге ике сәпкә тейҙереү ҡаралды. Һәр кешегә был сәптәрҙең береһенә атыу уңайлы булһа ла, икенсеһенә атыу, барыбер ҙә, уңайһыҙ булыуын иҫәпкә алғанда, тап ошо һынауҙа иң мәргәндәр асыҡланды ла инде, - тине Артур Батыршин.

Һәр башланғыстың үҙ башланғысы була торғандыр. Бер ни ҙә юҡтан ғына бар булмай, тимәксебеҙ. Бөләкәй генә энәнә бар итеү өсөн генә лә кешегә әллә күпме эҙләнеүҙәр, үҫеш юлы үтергә тура килгәндер. Бөгөн беҙ уҡ атыусыларҙың ярыштарын ҡыҙыҡһынып күҙәттек. Ул уҡ-һаҙаҡты ла беҙҙең ата-бабалар бихисап яуҙарҙа алған тәжрибәләренән сығып яҡшыртҡан, йышҡан, шәбәйткән. Артур Батыршин ошо сараға әҙерлек барышында бер ҡыҙыҡлы фактҡа юлығыуы тураһында һөйләгәйне. Баҡтиһәң, һәр яугирҙың уғының керешкә эләктерә торған киртекле аса башы алынмалы булған, ә уғының киҙеүе булмаған. Уҡ алынмалы киҙеүгә кейҙерелә һәм атылған саҡта әлеге киҙеү уҡсы ҡулында ҡала. Йәғни, дошмандарға атылған киҙеүҙәр уҡтарҙы улар кире файҙалана алмаған булып сыға. Бына бит ниндәй аҡыл ята ата-бабаларыбыҙҙың был оҫталығында!

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Турнир һөҙөмтәләре буйынса иң мәргән өс уҡсы исемлеген "Мәргән уҡсы" фестивалендә лә өсөнсө һөҙөмтә күрһәткән Өфө районы егете Рушан Хәсәнов йомғаҡланы. Өфө районынан Роберт Хәмиҙуллин икенсе урынды ҡулдан ысҡындырманы, ә беренсе урынды, Күсәрбай Аҡсулпанов исемендәге кубокты, Учалы районынан килгән Рөстәм Фазлетдинов яуланы. Тәүге өс урын яулаусыларҙы "Домофон" ЯСЙ-һы Салауат Ғәниев дизайны буйынса эшләнгән скифтар замана ҡалъяны менән бүләкләне.**

**Ойоштороусылар тағы бер нисә ошондай этап уйындарын вәғәҙә итә. Эштәре уң булһын инде, тип теләге килә. Ошо сараны тамаша ҡылған бер ағинәйебеҙ һүҙҙәре менән әйткәндә, ошо хәрәкәт үҙебеҙҙең һөнәрселәрҙе үҫтереүгә лә булышлыҡ итһен ине. "Уҡ-ян эшләһендәр, милли кейем текһендәр, тире эшкәртеп, ҡалъян яһаһындар егеттәр", - тине ағинәй. Уйланырға ла, эш ҡоралдарын үткерләй башларға ла сәбәп был алтын ҡуллы ағай-эне өсөн.**

**Турнирҙы Илгиз ИШБУЛАТОВ күҙәтте.**



*Эдуард Дилмөхәмәтов фотоһы.*

✓ ***Урал тибына ҡараусы ҡыҙ-ҡатындарҙың, ирҙәрҙең сәләмәтлегә лә ныҡ була. Хәҙерге заманда ирҙәр араһында тәбиғи һайланмыш күренеше бара: тәбиғәт уларҙың көсһөҙөн юҡ итеп, көслөләрен генә ҡалдыра.***



*ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ*

**Ошо көндәрҙә Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының этнология бүлеге мөдире, танылған ғалим-антрополог Ринат Мөхәмәт улы ЙОСОПОВҠА 65 йәш тулған булыр ине. Әммә бынан биш йыл элек яуыз сир уны беҙҙең арабыҙҙан алып китте. Бөгөн беҙ уның тураһында яҡты иҫтәлектәр һаҡлайбыҙ, гәзитебеҙҙең яҡын дуҫы булыуы, үҙенең яңы фәнни асыштары хаҡында иң тәүҙә беҙҙең уҡыусыларыбыҙға еткерергә ашығыуы тураһында хөрмәт менән иҫкә алабыҙ.**

**Ринат Мөхәмәт улы шул тиклем ябай, инсафлы, ипле, баҫалҡы тәбиғәтле ине. Үҙенә күрә бер нәзәкәтлек менән уңайһыҙлана, тартына, ояла белеүе лә уның киң күңелле, ололарға - ололоҡло, кеселәргә кеселекле булыуы хаҡында һөйләй ине. Әммә үҙ фәнни дәлиленә, тарихи фактҡа бәйле бәхәстәрҙә ғалим ҡапыл икенсе кешегә әүерелгәндәй була ине. Был тәңгәлдә ул һис ҡасан да сигенә белмәне, тарихи ысынбарлыҡҡа бәйле үҙенең принципиаль ҡарашында ныҡ торҙо. Был осраҡта ла оппонентының күңелен уйлап, үҙ фекерен ипле генә аңлата белде. Уның тарих фәненә, антропологияға медицина институты аша килеүе лә үҙенә күрә бер мөғжизә, шуға күрәлер ҙә, уның кеше һөлдәләренә, баш һөйәктәренә бәйле ғилми аңлатмалары, дәлилдәре ерлекле, төплө, ышандырырлыҡ һәм кире ҡаҡҡыһыҙ. "Баш һөйәгенең теле булмай, әммә күп кенә ғилми асыштар яһарлыҡ, сер ишектәрен асырлыҡ тел асҡыстары була", тигәйне ул беҙҙең гәзиттә яһаған бер сығышында. Ғалим Ринат Йосопов ана шундай "сер ишектәрен асырлыҡ тел асҡыстарын" ҡалдырҙы беҙгә. Уның гәзитебеҙҙә баҫылған ҡайһы бер яҙмаларынан өҙөктәр тәҡдим итәбеҙ.**



# ҺӨЛДӘЛӘРҘЕҢ ТЕЛЕ БУЛМАҺА ЛА...

## тарихҡа тел асҡысы улар

### Баш һөйәге табылды...

Тарих фәндәре кандидаты, палеолит дәүерен өйрәнеүсе археолог Вячеслав Котов ун биш йылдан ашыу көньяҡ Уралдағы мәмерйәләрҙе тикшерә. Уның 40-100 мең йыл элек йәшәгән кешеләрҙең хеҙмәт һәм һунар ҡоралдарын тапҡаны бар. Былтыр ул Шүлгәнташ мәмерйәһендә тәүге тапҡыр әҙәм баш һөйәгенә юлыҡты. Ғалим тапҡан баш һөйәген быға тиклем 2008 йылда ғалимә О.Я. Червяцова күргән булған, тик иғтибарға ғына алмаған. В.Г. Котов баш һөйәген Өфөгә алып ҡайтып, минә күрһәтте. Ул тәүҙән үк хәҙерге заманда йәшәгән кешенең баш һөйәгенә тартым булыуы менән иғтибарҙы йәлеп итте. Тикшереүҙәр шуны күрһәтте: баш һөйәге һуңғы ике мең йыл эсендә йәшәгән 17-19 йәшлек ҡыҙ баланыҡы. Маңлайының бер ситендә яра эҙе лә бар. Был яра ҡыҙҙың төрлө сәбәптәр арҡаһында үлтерелеүе йә ниндәйҙер йола менән ҡорбан ителеүе хаҡында һөйләй. Баш һөйәге Бөрйән төбәгендә борон-борондан йәшәгән кешеләрҙең Урал тибына-расаһына ҡарай. Был тип башҡорт халҡы араһында иң боронғо антропологик тип иҫәпләнә. Урал тибы бигерәк тә башҡорт ҡыҙ-ҡатындары араһында киң таралған. Был факт ҡыҙҙың ситтән килгән ҡәбилә йә ырыу вәкиле булыуын тулыһынса инҡар итә. Әле минең уҡыусым, антрополог А. Нечвалода менән баш һөйәгенең график формаһын эшләп, гипстан скульптураһын әүәләү өҫтөндәбеҙ. Әҙер булғас, беҙ уны матбуғатҡа бирә алырбыҙ, тип уйлайым.

Әлегә шуны ғына әйтеп булалыр: был ҡыҙ мәмерйә эсендә йәшәмәгән, сөнки унда ул заманға бәйле торлаҡ эҙҙәре юҡ. Шүлгәнташ стенаһындағы һүрәттәрҙең йәше лә ҡыҙ йәшәгән дәүергә тура килмәй. Һүрәттәр бынан 14-15 мең йыл элек төшөрөлгән. Беҙҙә ул дәүергә ҡараған антропологик материал бөтөнләй юҡ. Иң боронғоһо - Дәүләкән районы территорияһында Отто Николаевич Бадер тапҡан әҙәм һөлдәһе. Һөлдә усаҡ яҡҡан ерҙең аҫтында табылды. Ул мезолит һәм неолит дәүере араһында йәшәгән кешенең һөлдәһе, йәғни бынан 6-7 мең элекке дәүер. Шуныһы характерлы: Шүлгәнташ мәмерйәһендәге һүрәттәр Франция мәмерйәләрендәге һүрәттәргә ныҡ оҡшаған. Икенсенән, Дәүләкәндә табылған һөлдәгә ҡарап, көньяҡ сығанаҡты билдәләп була.

**Былар барыһы ла Уралдың төп халҡы булған башҡорттарҙың этногенез мәсьәләһенең ике тарафына бәйле үҙенсәлеген билдәләй. Башҡорттарҙың бер үк ваҡытта европеоид та, азиат та булыуы, әлбиттә, уларҙың барлыҡҡа килеүендәге төрлө тарафтар үҙенсәлеге берҙәмлеге хаҡында ла һөйләй.**

Франциялағы һәм Шүлгәнташтағы мәмерйәләрҙәге һүрәттәрҙе бер үк кешеләр төшөргән, тик ошоға бәйле тарихи ваҡиғалар ниндәй ағыш алған? Әллә мезолит дәүере һуңында Уралтауҙа боҙлоҡ ирей башлағас, көнбайыш кешеләре был яҡҡа килеп, кире киткәнме, йә булмаһа, киреһенсә булғанмы? Был мәсьәлә тарихсылар өсөн асыҡ килеш ҡала.

### Тәбиғи һайланмыш ҡануны

Боронғо Урал тибы күберәген беҙҙең ҡыҙ-ҡатындарҙа һаҡланып ҡалған. Популяцион генетика күҙлегенән ҡарағанда, беҙҙең ҡыҙ-ҡатындар милләттең иң боронғо генетик мәғлүмәтен үҙендә йөрөтә. Милли сифаттар ҙа балаларға ҡыҙ-ҡатын аша күсә. Көньяҡ Урал климатында яралған һәм шуға ҡулайлашҡан был мәғлүмәтте йөрөтөүсе ҡыҙ-ҡатындарҙың генетик үҙенсәлеге улдарына һәм ҡыҙҙарына тыумыштан уҡ күсә. Башҡорт ирҙәренең бер өлөшө лә Урал тибына ҡарай, әммә улар бик аҙ ғына. Урал тибына ҡараусы ҡыҙ-ҡатындарҙың, ирҙәрҙең сәләмәтлегә лә ныҡ була. Улар ауырыуҙарға бирешеп бармай һәм оҙағыраҡ йәшәй. Төрлө көтөлмәгән тәбиғи һәләкәттәр, катаклизмдар, эпидемиялар ваҡытында, аслыҡ кисергәндә күбеһенсә ирҙәрҙең үлеүе лә ошо фактҡа бәйле. Хәҙерге заманда ирҙәр араһында тәбиғи һайланмыш күренеше бара: тәбиғәт уларҙың көсһөҙөн юҡ итеп, көслөләрен генә ҡалдыра. Хәл аңлашыла - балалар көслөләрҙән генә тыуырға тейеш.

Тәбиғәттең үҙендә, хайуандар, йәнлектәр араһында тәбиғи һайланмыш ҡануны тулыһынса тиерлек үтәлә. Әйтәйек, ҡасыу мәле еткән һыйыр, хужаһынан, көтөүҙән ҡасып китеп булһа ла, көслө үгеҙ янына бара. Йә булмаһа, йылҡы өйөрөн генә алайыҡ. Унда бер нисә айғыр өйөр айғыры булырға дәғүә итеп алыша. Был алышта иң көслөһө еңеп сыға һәм бейәләр уның ихтыярына буйһона башлай. Ситкә тибелгән айғырҙы көйҙөрәләр ҙә, ҡәҙимге ат итеп, егә-менә башлайҙар. Йә булмаһа, бал ҡорто иләүендә инә ҡорттоң нисек итеп аталаныуы миҫалын ғына алайыҡ. Мөҙҙәте еткәс, инә ҡорт оянан осоп сыға һәм бик юғарыға, һауаға күтәрелеп, шәп тиҙлектә оса. Уның артынан ҡыуа төшкән ата ҡорттарҙың иң көслөһө, иң ҡеүәтлеһе генә уны ҡыуып етә һәм аталандыра, үҙе шунда уҡ һәләк тә була. Иғтибар итегеҙ: тәбиғәт уны тағы ла тоҡом ҡалдырыу хоҡуғынан мәхрүм иткән, йәғни был юл менән яҡын ҡандарҙың ҡатнашыу ихтималлығын юҡҡа сығарған.

**Ҡалған ата ҡорттарҙың йәғни көсһөҙҙәрҙең дә иләүгә әйләнеп ҡайтырға хоҡуғы юҡ, ҡайтҡан хәлдә лә уларҙы кире индермәйҙәр. Тәбиғәттә һайланмыш ҡануны бына шулай бик аяуһыҙ, әммә ғәҙел итеп ҡуйылған. Кешелектә лә матриархат дәүерендә ошоға оҡшаш йолалар булған, йәғни тыуасаҡ балаһының атаһын ҡыҙ үҙе һайлап алған.**

Батшалар, хандарҙың ҡыҙҙарына кейәүҙәр һайлағанда уларҙы төрлөсө көс һынаштырып ҡарау йолаһы ла "бала көслө атанан тыуырға тейеш", тигән принципҡа таянғаны көн кеүек асыҡ.

Патриархат дәүерендә инде төрлө ырыуҙарҙан бер нисә ҡатын алған ир был юл менән үҙенең ырыуын көсәйткән. Революцияға тиклем башҡорттарҙа ла өс ҡатын алыу рөхсәт ителгән. Өстән артыҡ ҡатынға өйләнеү инде ир-аттың хәленә ҡарап башҡарылған. Беҙҙең халыҡта киленден алыҫтан төшөүенә ҙур әһәмиәт биргәндәр, алыҫтанырак төшкәне ҡәҙерлерәк тә булған. Был да юҡҡа ғына түгел. Аралар алыҫайған һайын ҡан яҡынлығы ла алыҫлаша.

**Ринат ЙОСОПОВ,**
**тарих фәндәре кандидаты.**
**(Дауамы бар).**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Йәдкәр БӘШИРОВ*

## БӨЙӨК БАШҠОРТ ИЛЕ

### Башҡорт этносының барлыҡҡа килеүе тураһында

М. Өмөтбаев үҙенең "Йәдкәр" китабында: "Боронғо Европа тарихсылары "Көнсығыш Урал, Иртыш буйы башҡорттарын баскатир тип атаған", - тип яҙа. Ул башҡорттар һәм уларҙың составы хаҡында Ибн Халдундың мәғлүмәттәрен килтерә: "Был халыҡ эсендә алан, бөрйән, ҡаңлы, ҡыпсаҡ, бәшәнәк, дыуан, әйле, табын һ.б. ырыуҙар бар. Улар барыһы бергә басжарт тип аталған". Бынан тыш, ул үҙенең хеҙмәтендә башҡорттарҙың үҙҙәрен уңғар тип атауҙары хаҡында яҙа. Тарихсы А.Е. Алекторов XIX быуат аҙағында Урал тауҙарының ике яғында күп һанлы югор (уғыр) ҡәбиләләренең йәшәүе, тик һуңынан башҡорттар барлыҡҡа килеүе, башҡорттарҙың боронғо уғыр халҡы икәнлектәрен раҫлай. Ҡайһы бер авторҙар башҡорттар тарихының боронғо осорҙары ысынлап та аҙ өйрәнелеүе хаҡында белдерә. Мәҫәлән, XVIII-XIX быуат тарихсылары Д. Европеус, И. Фишер, А. Шлецер, шулай уҡ совет осоро профессоры С.А. Токарев һәм башҡалар башҡорттарҙы көслө төркиләшеү һөҙөмтәһе булараҡ, фин-уғыр телдәре төркөмөнә индергән. С.И. Руденко фәҡәт төньяҡ башҡорт ырыуҙары араһында ғына уғыр компоненты барлығы хаҡында белдерә. Этник яҡтан ул башҡорттарҙы Башҡортостандың төньяҡ-көнбайышында Геродот тиссагеттары менән генә бәйләргә мөмкин тип иҫәпләй. Бынан ике-өс тиҫтә йыл элек кенә Рәсәй һәм совет ғалимдары башҡорт халҡының боронғо тарихи тамырҙары барлығын танырға теләмәне. Әйтергә кәрәк, Евразия йүнәлешендәге тарихсылар был хаҡта бик күп һәм мауыҡтырғыс итеп яҙҙы. Уларҙың фекерҙәре бик күп уҡыусылар тарафынан кире ҡағылды. Н.С. Трубецкой яҙыуынса, көнбайыш Европала йәшәүсе һәр кемдең йәшерен теләге - Ер шарының барлыҡ халыҡтарының милли йөҙөн, уларҙың үҙенсәлекле мәҙәниәтен юҡҡа сығарыу, дөйөм кешелек мәҙәниәте итеп Европаныҡын ғына ҡалдырыу, ҡалған барлыҡ мәҙәниәттәрҙе икенсе сортлы итеү.

Ғәрәп һәм Азия ғалимдарының халыҡтар тарихына ҡарашы бөтөнләй икенсе булған. Мәҫәлән, ғәрәп сығанаҡтарында әйтелешендә күп кенә тайпылыштар булһа ла, "башҡорт" этнонимы хаҡында беҙ бик күп мәғлүмәт таба алабыҙ. Ғәрәп ғалимы Әбү Зәйет әл Балхи (943 йылдар тирәһе) бер урында Урал һәм Европа ҡәбиләләрен "Баджгардъ" тип атаһа, икенсе урында "Башджарт" тип әйтә. Әл Балхиның ҡульяҙмаларын файҙаланып, фарсы яҙыусылары "Баш харт" тигән атама ҡуллана. Ибн Сәйет (XIII быуат) "Башкерть" тип яҙа. Казвини (XIII быуат уртаһы) көнсығыш һәм көнбайыш башҡорттарын "Башгарть" тип атай. Димешки (XIV быуат башы) көнсығыш башҡорттарын "Басхарт", Европа башҡорттарын "Башкард", "Маджар" һәм "Хункар" тип таный. Әбделфиҙа (1320 йылдар тирәһе) төрлө сығанаҡтарҙа "Басджарт", "Башкерд", "Хункар" һәм "Әл Маджария" тигән атамалар таба. Димешки менән Әбделфиҙа бөтөнләй башҡа халыҡтарҙы башҡорттар тип атаған.

**(Дауамы бар).**

*✓ Әлбиттә, иң ҙур уңыуым - атай-әсәйҙән булған. Йылдар үткән һайын, атай менән әсәйемдең ни тиклем оло йөрәкле һәм шул уҡ ваҡытта ябай кешеләр булыуына хайран ҡалам.*



**Был талант эйәһен башҡорт театрына тоғро, ихлас шәхес итеп беләбеҙ. Үткән быуатта уҡ ижад юлына баҫҡан, тап шул осорҙа тамашасы һөйөүен яулаған, сағыу ролдәре өсөн төрлө дәүләт наградаларына лайыҡ булған был ир уҙаманының хәҙерге заман театрында ла режиссерлыҡ идеялары, актерлыҡ оҫталығы ла ҙур һорау менән файҙаланыла, тамашасыһы ла тоғро уға һаман. Ҡыҫҡаһы, башҡорт театрын - унһыҙ, уны башҡорт театрынан тыш күҙ алдына ла килтереүе ҡыйын. М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрының художество етәксеһе, Башҡортостандың халыҡ, Рәсәйҙең атҡаҙанған артисы Олег ХАНОВ тураһында ине һүҙебеҙ. Ошо көндәрҙә 65 йәшлек юбилейын билдәләгән Олег Закир улының тағы бер үҙенсәлекле сифаты - уның менән төрлө темаларға оҙон-оҙаҡ итеп һөйләшергә була. Әммә был юлы беҙ уның менән уға тәғәйен ғүмер йомғағын һүтергә тырышып ҡараныҡ.**

# Сәхнәлә лә, мин башҡаса

### ОЛЕГ ХАНОВ:

*Әсәйем: "Ниңә, балам, шул тиклем йөрәгеңдә бөтөрөп уйнайһың, былай үҙеңдә туҙҙыраһың бит, улай эшләргә ярамай..." - тине. "Ә мин башҡаса уйнай белмәйем, миңә шулай уйнауы ҡыҙыҡ", - тип яуапланым.*



**▶ Шағир әйтмешләй, тағы ла бер ят түбәгә ҡунған мәлегеҙҙә ниммәләрҙән уңдым тип әйтер инегеҙ?**

- Мин үҙ ғүмеремдә "Тормоштан уңдым", тип, бик йыш һәм күп әйтә килдем. М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрынан уңдым, 1973 йылда театрға эшкә килгәндән алып төрлө ролдәр башҡарырға мөмкинлек булды. Ғаиләмдән уңдым, ир кеше өсөн быныһы бигерәк тә мөһим. Режиссерҙарҙан уңдым. Мәшһүр шәхестәрҙән уңдым, улар менән осрашып, аралашып, эшләп, ижад итеп уңдым. Хәҙер артҡа әйләнеп ҡарайым да, ижад тормошом Башҡортостандың шундай арҙаҡлы шәхестәре араһында башланған икән, тип ҡыуанып уйланам.

Әлбиттә, иң ҙур уңыуым - атай-әсәйҙән булған. Йылдар үткән, уларҙың ғүмере теге донъяла оҙайған, минеке был ерҙә ҡыҫҡарған һайын, атай менән әсәйемдең ни тиклем оло йөрәкле һәм шул уҡ ваҡытта ябай кешеләр булыуына хайран ҡалам. Уларҙы Ҡыйғы театры осраштыра. Атай армияға тиклем Мәсәғүт педучилищеһында уҡыһа ла, һуғыштан йөрөп ҡайтҡас, уҡырға кире барып тормай. Тыуған ауылы - Салауат районының Лағыр ауылына театр гастролдәр менән килә лә, атайымды үҙҙәре менән алып китә. Уның актерлыҡ өлкәһендә махсус белеме булманы, әлбиттә, шуға ҡарамаҫтан, Башҡортостандың халыҡ артисы тигән исемгә тиклем үҫте, һәр ваҡыт төп ролдәрҙә башҡара торғайны. Ә әсәйем Өфөгә бухгалтер һөнәренә уҡырға киткән еренән академия театры эргәһендәге театр-студияға инеп, актриса булып китә. Үҙе был ваҡиғаларҙы күңелле итеп һөйләй торғайны. Һынауҙарҙың тәүге турынан уҡ уны уҡырға алалар, комиссияла Арыҫлан Мөбәрәков, Вәлиәхмәт Ғәлимов, Ғәлләм Саттаров кеүек шәхестәр була. Мандолиналa уйнай, этюд эшләтеп ҡарайҙар. Сәс толомо билдән түбән төшөп торған ҡыҙ була ул. Уҡырға инеү ҡыуанысынан ҡалаға әсәһе тотторол ебәргән өс йомарлам майҙы һатҡан аҡсаға парикмахерскийға инеп, сәсен ҡырҡтырып, бөҙрәләтеп сыға. Уҡырға килһә, быны танымайҙар икән. "Сәсең ҡайҙа?" - тип һорайҙар тәүҙә. Уҡырға ҡабул итеүселәрҙең иғтибарын иң тәүҙә уның оҙон сәстәре йәлеп итеүен белмәгән бит инде әсәйем. Ул мәлдә театр опера һәм балет театры бинаһында урынлашҡан була, шуның подвалында йәшәргә рөхсәт итәләр яңы уҡырға килеүселәргә. "Йомшаҡ бәрхәт декорацияларҙы ябынып йоҡлайбыҙ, эй йылы, рәхәт. Тик кисен ял итеп булмай, йә балет, йә опера башлана, ирекһеҙҙән шуларҙы ҡарарға, тыңларға тура килә", - тип хәтерләр ине әсәй аҙаҡтан. Ана шулай бөтөн классик музыканы, спектаклдәрҙе күңеленә һеңдерә ул, уларҙы миңә лә һөйләй ине. Шулай массовкала йырлап, бейеп йөрөгәндә Ҡыйғы театры директоры килеп төшә Өфөгә. Ҡыйғыла төп ролдәрҙе генә уйнап йөрөйәсәкһегеҙ, тигән вәғәҙәләренә ышандыра әсәйемде һәм уның курсташтарын. Шулай Ҡыйғыға юл тота әсәйем ике әхирәте менән. Ысынлап та, героиняларҙы уйнай башлайҙар, тик роль бар, костюм тегергә аҡса юҡ. Шуға ҡарамаҫтан, был театрҙың актерҙары шул тиклем дәртле ине, ти торғайны әсәйем. Шунда атайҙың күҙе төшә лә инде әсәйгә. Әммә тиҙҙән театрҙы тараталар, баҙарҙа ике көн тороп театрҙың реквизиттарын, костюмдарын һатып, актерҙарға эш хаҡы түләйҙәр. Атайҙы Баймаҡ театрына күсерәләр, әсәй ауырлы булғас, тыуған яғы - Архангел районы Ҡыҙғы ауылына ҡайтып китә. Минә 4 ай булғас, Баймаҡта әсәйгә лә эш табыла. Мин 4 йәшемә тиклем өләсәйем, әсәйемдең 3 апаһы, 2 һеңлеһе тәрбиәһендә булғанмын. Сәмиғә апайымдың минә тәүҙә поезға, һуңынан Баймаҡҡа тиклем үткенсе ЗИС машинаһына ултыртып, атайымдарға алып килгәнен, унда тәүге тапҡыр һеңлемде күреүемде лә яҡшы хәтерләйем. Театрҙы Сибайға күсергәндәрен дә хәтерләйем.

Әҙәбиәт донъяһы менән әсәй таныштырҙы мине. Теге йәки был әҫәрҙе шундай мауыҡтырғыс итеп, төрлө ҡыҙыҡлы деталдәренә иғтибарҙы йәлеп итеп һөйләй торғайны. Шунан алып мин уҡырға яратам, әсәй күргәнде минең дә күргем килә торғайны. Ғөмүмән, улар икеһе лә театрға, сәнғәткә мөкиббән киткән кешеләр ине. Өфөнән ҡунаҡтар йыш килә ине, Нәжиб ағай Асанбаевтың беҙҙә булыуы иҫемдә. Рафаэль Мөхәмәт улы Әйүповтың режиссер булып эшләүен, Мольерҙың "Тартюф"ын ҡуйбыҙ тиеп йөрөүҙәре хәтергә уйылып ҡалған.

**▶ Тимәк, актерлыҡ һөнәренә китеүегеҙгә атай-әсәйегеҙ өлгөһө, көңөштәре, теләге сәбәпсе булғандыр инде?**

- Улай уҡ түгелдер. Атайым минең театр юлын һайлауыма ныҡ ҡыйынһынды. Башта мин Свердловскиға, хәрбисәйәси училищеға уҡырға барырға әҙерләндем. Тик Свердловскиға барырға теләк белдереүемдең сәбәбе икенселә - унда киностудия бар ине. Киностудия булғас, унда киноға төшөргә була, тип уйлайым үҙемдең бер ҡатлылығым менән. Имтихандар тапшырып, ҡулға аттестат алғас, Өфөлә сәнғәт институты асылыуы, унда халыҡ театрҙары режиссерҙарына уҡырға йыйыуҙары тураһында ишеттем дә, документтарҙы шунда ебәрҙем дә ҡуйҙым. Атайҙар был мәлдә Свердловскиҙа гастролдәрҙә йөрөп ята. Телефондан шылтыратҡайнылар, унда бармайым, тип әйттем. Ҡайтып төштөләр былар ун көндән ҡара көйөп. Шулай ҙа минең теләгемә ҡаршы килмәнеләр.

Һуңынан, ниңә шул тиклем ҡаршы төштөң, тип һораным атайҙан. "Беләһеңме, был һөнәрҙе һайлағас, ысын артист булырға кәрәк. Уртаса актер булып, күмәк сәхнәләрҙә йөрөһәң, күңелеңдә башҡаларға ҡарата көнсөллөк уяна, икенсенән, ғүмер буйы ролдәр көтөп йәшәүҙең ни мәғәнәһе, шул уҡ ваҡытта театрҙы ташлап китә лә алмаясаҡһың", - тип яуапланы ул миңә. Йәғни, актер яҙмышы уңышлы булмауы ла бар бит, тип хафаланыуын белдерҙе. Белеп әйткән, үҙе эшләгән театрҙың умыртҡа һөйәге булған, театрҙың һөйөклөһө булған кеше бит ул. Хатта аҙаҡҡараҡ уйнаған эпизодик ролдәрен дә иҫ киткес оҫта башҡара ине атай. Уның мине актер итергә теләмәүе мине күңел яраларынан да араларға теләүҙән булғандыр, тип уйлайым хәҙер.

**▶ Актер Олег Хановтың бөтөн геройҙарында - "Айгөл иле"ндәге Ричард Галинда ла, "Яҙмыштарҙан уҙмыш бар" спектаклендәге Кендектә лә, "Йәйәүле Мәхмүт"тәге Мәхмүттә һәм башҡаларҙа ла башҡорт ир-егеттәренең характерын күрәбеҙ. Хатта әле генә премьераһы үткән "Антигона" драмаһындағы һеҙ башҡарған Креонда ла башҡорт түрәһе һыҙаттары ярылып ята. Башҡорт театры, һис шикһеҙ, башҡорт характерын сағылдырырға тейеш, ә бына Мәскәүҙә, Ырымбурҙа уйнағанда һеҙгә ауыр булманымы ошо йәһәттән?**

- Мин үҙемдең менталитеттан бер нисек тә өҫтөн була алмайым. Башҡорт кешеһенә хас холоҡ-ҡылыҡ һәр ваҡыт минең менән бергә. "Сатирикон"ға эшкә килгәс, унда бөтөнләй икенсе донъя, икенсе мөхиткә эләктем. Рус телендә көнкүреш кимәлендә үҙ-ара һөйләшеп йөрөү - бер, әммә сәхнә теле бөтөнләй икенсе кимәл. Бигерәк тә Мәскәү мәктәбе айырылып тора. Быларҙың барыһына ла өйрәнергә тура килде. Ләкин шунда ла миңә, мәҫәлән, Шекспирҙың "Гамлет"ындағы Полоний, Айрис Мердоктың "Слуги и снег"та Ханс Джозеф ролдәрен, Б. Брехттың "Трехгрошовая опера", М. Кундераның "Жак и его господин" спектаклдәрендә, һинең уйнауыңды ҡарауы ҡыҙыҡ, тиҙәр ине. Сөнки үҙебеҙҙең сәхнәлә бөтөн күңелеңде һалып, йәнең-тәнең менән уйнарға, геройҙарымдың тормошо менән йәшәргә күнеккәйнем.

Әсәй гел минең премьераларға килә, хатта гастролдә булһа ла, килергә тырыша ине. Бер шулай Рафаэль Сафиндың "Кыр ҡаҙҙары" спектакленә килде, һуңынан гримерҡаға инде лә, мине арттан килеп ҡосаҡлап, үкһеп-үкһеп илай. Әсәйем спектаклгә тәьҫирләнеп илай икән, тип уйлайым. Ә ул: "Ниңә, балам, шул тиклем йөрәгеңде бөтөрөп уйнайһың, былай үҙеңде туҙҙыраһың бит, улай эшләргә ярамай..." - тине. "Ә мин башҡаса уйнай белмәйем, миңә шулай уйнауы ҡыҙыҡ", - тип яуаплағайным.

Мин 1973 йылда театрҙа эшләй башланым, Мостай Кәримдең "Оҙон-оҙаҡ бала саҡ" әҫәре буйынса "Яҙмыштарҙан уҙмыш бар" спектаклен 1977 йылдың октябрендә ҡуйҙыҡ. Был спектаклгә әсәй саҡ ҡына һуңғараҡ килде, ҡараны ла: "Бына, балам, хәҙер ысын артист булырыңа ышанам", - тине. 4 йыл буйына премьераларға килеп, бындай һүҙҙе әйткәне юҡ ине, тимәк, улы булған өсөн генә түгел, ә артист булараҡ та миңә үҙенең

✓ ***Ни өсөн беҙ бер туҡтауһыҙ еңел-елпе комедиялар ҡуйырға тейешбеҙ? Бәлки, тамашасы театрға күңел асырға ғына йөрөйҙөр, тик унда үҙеңдең күңелеңдә тәрбиәләргә лә килергә кәрәк.***

# ТОРМОШТА ЛА...

## була белмәйем

талаптары булған. Ысынлап та, бик легендар спектакль булды шул ул, унда бөтөн нәмә лә - автор ҙа, режиссер ҙа, инсценировка ла, рәссам да, Рим Хәсәновтың музыкаһы ла бер нөктәлә кисеште. Ә артистарҙың уйнауы ниндәй ине! Зәйтүнә апай Бикбулатова үҙе генә ни тора. Нурия Ирсаеваның Әскәте, Фидан Ғафаровтың Мәрәһиме, Таңсулпан Бабичеваның Аҡйондоҙо, ошо геройҙарҙың, малайҙарҙың сәхнәләре иҫ киткес булды. Минең дә иң яратҡан ролем - Кендек. Хәҙер үҙебеҙҙең дә егеттәр был әҫәрҙән өҙөк уйнап йөрөйҙәр, тик мин уны ҡарай алмайым. Сөнки теге спектаклдең һәр һүҙе, бөтөн интонацияһы күңелгә һеңгән, күҙ алдында бары тик ул ғына тора, аңым менән яңыһын ҡабул итә алмайым. Бөгөн дә уны яҡшы уйнайҙар, тик ул минеке түгел.

Бына мин ошолай уйнарға күнеккәйнем, ә "Сатирикон"-да спектакль репетиция ваҡытында "табыла", "ялтыратыла" ла, шул көйө уны уйнап тик йөрөйҙәр, йәғни, көндәлек спектаклдәр мәлендә тамашасы алдында әллә ни үҙҙәрен өҙгәләмәйҙәр, тиһәм дә дөрөҫ булыр. Мәскәүҙән һуң Ырымбурҙа үҙемде иреклерәк тойғанмындыр. Етмәһә, Рифҡәт Вәкил улы Исрафилов менән бер-беребеҙҙе ярты һүҙҙән аңлайбыҙ. Унда мин, киреһенсә, Мәскәү театр мәктәбе күҙлегенән артистарға һүҙҙәрҙең дөрөҫ әйтелеше буйынса кәңәштәр ҙә бирә инем.

**▸ Башҡорт менталитеты, иң тәүҙә, ул - ихласлыҡ, тинегеҙ. Бөгөнгө театрҙа ошо ихласлыҡты, йәнең-тәнең менән бирелеп уйнауҙы йәштәрҙә күрәһегеҙме, бындай талап бармы театрҙа?**

- Бар һәм башҡорт театры өсөн минең иң шатланғаным - ошо ихласлыҡ. Йәштәргә шул тиклем өмөтөм ҙур. Ҡайһыһын ғына алма, Руслан Хайсаров, Гөлнара Ҡаҙаҡбаева, Ирада Фазлаева, Артур Ҡунаҡбаев, Артур Кәбиров, Юнир Ҡоланбаев, Фәнис Рәхмәтов, Ринат Баймырҙин, яңы ғына килгән йәш быуын - Морат Рафиҡов, Айҙар Шәмсетдинов, өлкән быуындан Алмас Әмиров, Азамат Ғафаров, ғөмүмән, һәр береһендә Хоҙай Тәғәлә тарафынан һалынған һәләт тә, ихласлыҡ та һәм, иң мөһиме, актер һөнәренә тоғролоҡ та бар. Урал Әминев һымаҡ театрға мөкиббән киткән кешене мин күргәнем дә юҡ. Һанай башлаһаң, һәр актер тураһында тик яҡшы яҡтан ғына әйтергә була. Баязит Бикбайҙың әҫәре буйынса Хәмит Иргәлин инсценировка яҙған "Ҡаһым түрә" спектаклен ҡарағыҙ, күпме матур геройҙар тыуҙырылды сәхнәлә улар тарафынан. Яңы ғына режиссер Илсур Ҡаҙаҡбаевтың Айгиз Баймөхәмәтов әҫәре буйынса ҡуйған "Хыялға ҡаршы" спектакле Бүрәт Республикаһына "Алтан сэргэ" Халыҡ-ара милли театрҙар фестиваленә барып ҡайтты. Унда беҙҙең актерҙар "Актерҙар ансамбле" номинацияһында еңеү яуланы.

Элегерәк башҡорт театрында бер "йондоҙ" актер була торғайны, хәҙер уларҙың араһынан геройҙы айырып ҡарарға ла кәрәкмәй, сөнки һәр береһе һәләтле, эшһөйәр. Был күренеш беҙҙең театр өсөн ҙур уңыш, улар төрлө планлы актерҙар һәм һәр ролде лә башҡара алалар. Ә был үҙе универсаллекте күрһәтеп тора, улар йырлайҙар ҙа, ҡурайҙа ла уйнайҙар, бейейҙәр ҙә.

**▸ Тамашасы өсөн Олег Ханов, тәү сиратта, һәләтле актер, тамашасының яратҡан актеры. Режиссер булып, спектаклдәр ҡуйыуығыҙ һеҙҙе актер булараҡ баҫмаймы, сикләмәйме?**

- Режиссураға улай артыҡ ынтылыш юҡ та, шулай ҙа үҙеңдең ҡараштарыңды ниндәйҙер материалда тормошҡа ашырыу ҡыҙыҡ. Салауат башҡорт театрында эшләгәндә күберәк Туфан Миннуллиндың әҫәрҙәре ҡуйылды, рухи йәһәттән был автор минә яҡын. Башҡорт академия драма театрына килгәс, шулай уҡ бер нисә әҫәрҙә сәхнәләштерергә тура килде. Сөнки йәштәр менән сәхнәлә уйнап йөрөүе - бер, ә көндәлек репетицияларҙа улар менән яҡынданыраҡ аралашып, үҙеңдең күргәнеңде, белгәнеңде улар менән уртаҡлашыу бөтөнләй икенсе нәмә. Шуға ла мин ниндәйҙер спектакль тыуҙырам тип түгел, ә тәжрибә уртаҡлашам, тип ҡабул итәм режиссерлыҡты. Был һайлаған әҫәрҙәрҙә лә күренә. "Йософ һәм Зөләйха" аша йәш быуын актерҙары беҙҙең рухи байлығыбыҙ менән танышһын, ошондай юғары сәнғәт әҫәрҙәре аша күңелдәрен байытһын, уларҙы кәҙерләргә өйрәнһен, тип теләгәйнем. Йә булмаһа, Островскийҙың "Бирнәһеҙ ҡыҙ"ы, унда классик әҫәр аша артистарҙы тәрбиәләү маҡсаты ята. Ситтән ҡарап йөрөп, ҡуптар, мин дә спектакль ҡуя алам, спектаклдә уйнай алам, тип уйлайҙыр. Эйе, бының өсөн артыҡ хәйлә кәрәкмәй, ләкин эштең серҙәренә төшөнөп, шул серҙәрҙе үҙеңдеке итеү өсөн күп йылдар буйына тупланған тәжрибә кәрәк. Шундай һәләтле актерҙар бар, уларҙың сәхнәгә сығыуы ғына көс, хатта бер нәмә эшләмәһә лә, тамашасыны ышандыра ла ҡуя. Мәҫәлән, Савелий Крамаров йәки Леонид Куравлев, беҙҙең сәхнәлә иһә Фидан Ғафаровты шундайҙар рәтенә индерергә мөмкин. Ә күп актерҙарға ролдә йәшәү процесына өйрәнергә кәрәк. Сәхнәгә сыҡҡас, әһә, хәҙер шуны эшләйем, шунан тегеләйтәм, былайтам, тип булмай, был үҙенән-үҙе, тәбиғи килеп сығырға, тимәк, тимерсыбыҡ аша ток үткән кеүек, һинең аша үтергә тейеш. Геройыңдың донъяһын аңлап, уны тыуҙырып, тамашасыларҙы ышандыра белергә лә кәрәк. Режиссер ошо йәһәттән актерға ярҙам итә лә инде.

**▸ Ижад кешеһе барыбер ирекле ул. Ниндәй генә шарттарҙа ла, ниндәй генә талаптар алдында ла барыбер күберәк үҙебеҙҙең фекерҙә ҡалабыҙ, күңел менән дә, тыштан да азатыраҡбыҙ. Ошо иреклеккә, ижадилыҡҡа етәксе булыу ҡамасауламаймы?**

- Ҡамасаулай. Тик театрҙағы өлкән быуын артистарға ла, шул уҡ йәш быуын артистарына ла бөгөнгө ситуацияны, эш барышын, эштең айышын туранан-тура уларҙың телендә әйтә алам, тип йыуатам инде үҙемде. Икенсенән, ситтән килгән кемдер барыбер битараф буласаҡ, ә актерҙарҙы яҡлай белергә лә кәрәк, уларҙы мин яҡшыраҡ аңлайым. Ләкин ултырғысыма йәбешеп, миңә теймәһендәр, тигән уйым юҡ. Минең үҙемдең һөнәрем бар, әгәр ҙә миңә, етте Олег Закир улы, тиһәләр, рәхмәт әйтер ҙә, үҙемдең эшем менән булышыр инем. Етәксе булыу бит ул үҙеңдең шәхси принциптарыңа ла ҡаршы барлыуға этәрә ҡайһы саҡта. Шул уҡ "Антигона"лағы Креон роле шуның тураһында һөйләмәйме ни? Компромисҡа барырға тура килә, сөнки тормош шулай талап итә. Антигона шикелле, бер фекерҙә ҡалһаң, шартлап һынырға ла була. Иң мөһиме, үҙеңә тоғро булып ҡала белергә кәрәк. Һәр ваҡыт шулай тура киләме, быныһын әйтеүе ауыр.

**▸ Беҙҙең быуын яҡты киләсәккә, әкиәттәргә ышанып йәшәне. Ышаныстарығыҙҙан төңөлгән мәлдәрегеҙ булдымы?**

- Аптырап ҡалған мәлдәр булды. Илдә тотош ҡоролош алышынды. Минең ҡайным, Муллаян Хафиз улы Хафизов, Асҡын районында партбюро ағзаһы булды, милиция органы етәксеһе булып эшләне. Ул да, минең атай ҙа ҡыҙыл коммунистар рәтенән булдылар. Партия тарҡалғас, атайым: "Карале, ғүмер буйы алданып йөрөгәнмен икән", - тине. Ә Муллаян Хафиз улының, нимә өсөн эшләнек һуң, тип аптырағанда ҡуҙҙәренә йәш тулды. Мин үҙем дә парторг булдым, шуға ла алданған быуын тойоһо миндә лә булды, әлбиттә.

Тормошта барыһы ла була, төңөлгән мәлдәр ҙә, аҡты аҡ тип иҫбатлап булмаған саҡтар ҙа. Үткән быуаттың 90-сы йылдар аҙағында театрҙағы хәлдәрҙән һуң миңә лә 15 йыл ситтә йөрөргә тура килде. Тик тормоштоң кире яҡтарын уйлап, шулар хаҡында сурытып, ҡайғырып ултырыу дөрөҫ түгел, быларҙан да өҫтөнөрәк нәмәләр бар был донъяла. Ул да булһа, һинең балаларың, Аллаһы Тәғәлә биргән һөнәрең. Дин дә, сабыр бул, кенә ҡыума, үҙеңде эстән ашама, бынан үҙеңә зыян ғына, тип өйрәтә бит. Һәр осраҡта ла кеше булып ҡала белергә кәрәк.

**▸ Етәксе, режиссер, талантлы актер булараҡ, театрҙағы башҡорт мөхите, башҡорт теленең сафлығы, башҡорт милли театрының үҙенсәлектәрен, йолаларын һаҡлау буйынса актерҙар менән йыш һөйләшәһегеҙме?**

- Был турала күп әйткәнем бар инде: бөгөн мине иң һыҙландырғаны - телебеҙҙең ярлыланыуы. Заманы шулай, тип аҡланып торол булмай, шулай ҙа мәктәптәрҙә башҡорт теленең ҡыҫырыҡланыуы, интернеттың киң ҡулланылыш алыуы, башҡа сәбәптәр телебеҙҙе ярлыландыра, телмәребеҙҙә инглиз, рус һүҙҙәрен әүҙем алып инә. Мәҙәни революция кисерәбеҙ, тигән булдылар, бер ниндәй ҙә революция түгел, ә рухи ҡиммәттәрҙең емерелеүе булды был. Беҙҙең маҡсат - быларҙың береһенә лә ҡарамайынса, телебеҙҙе һаҡлау. Телдә халыҡтың рух көсө. Шуға ла туған тел өсөн көрәшергә кәрәк.

Миңә шул тиклем ҡыйын, әммә, план үтәйбеҙ, тип, балаларға әкиәттәрҙе рус телендә ҡуйырға мәжбүрбеҙ. Әле генә Сибай театрының юбилейында булып ҡайттым, ул театр Урал арьяғында башҡорт телен һаҡлаусы усаҡ, иң халыҡсан, тигән дандары бар, тик сибайҙар ҙа русса әкиәт уйнарға мәжбүр. Беҙ был спектаклдәрҙе ике телдә лә әҙерләйбеҙ, әлбиттә, әммә башҡорт телендәге спектаклде 2-3 ҡабат ҡына уйнайбыҙ, сөнки рус телле балаларҙың тәржемә менән әкиәт ҡарағыһы килмәй. Ә план тулмаһа, артистарға эш хаҡы түләү мәсьәләһе ҡалҡып сыға...

**▸ Башҡорт дәүләт академия драма театры сәхнәһендә әле генә сыҡҡан "Антигона" спектакле халыҡ араһында бер аҙ шау-шыу тыуҙырҙы. Театрҙың тамашасы теләгәнә генә эйәрергә теләмәүе сәбәпсеме быға?**

- Был спектаклдә ҡайҙалыр Грецияла Антигона ағаһының мәйетен күмә лә, шуның өсөн үлемгә хөкөм ителеүе тураһында ғына һүҙ бармай бит. Был бары тик әҫәрҙең сюжеты ғына. Ә Антигона образы аша, кеше үҙенең әйткән һүҙенә тоғро булырға тейеш, тигәнгә ишаралана. Сөнки беҙ бит кешелектең юғары аңы, юғары фекере кимәлендәге өлгөләр менән тәрбиәләнергә тейешбеҙ. Әйтәйек, шул уҡ Шекспирҙың "Гамлет"ы, йәки шул уҡ Чайковскийҙың музыкаһы. Ни өсөн минең халҡым ошондай бейеклектәрҙән мәхрүм ҡалырға тейеш? Ни өсөн беҙ бер туҡтауһыҙ еңел-елпе комедиялар ҡуйырға тейешбеҙ? Улары ла бар репертуарҙа, улары ла кәрәктер, кеше көлөп-шаярып алырға ла тейеш. Әммә тормош уйын-көлкөнән генә тормай. Бәлки, тамашасы театрға күңел асырға ғына йөрөйҙөр, тик унда үҙеңдең күңелеңдә тәрбиәләргә лә килергә кәрәк. Беҙҙең репертуарҙа күңелгә, аҡылға йүнәлтелгән әйберҙәр бар, "Антигона" - уларҙың береһе. Бөгөнгө замандағы күңелде ҡырыҙай әйберҙәргә, күренештәргә юғары сәнғәт кенә ҡаршы тора ала. Эш бында Антигонала ла түгел. Бер бәләкәй генә ҡыҙ үҙ илендәге тәртиптәргә протест белдерә һәм шуның өсөн һәлак була - был нимә инде ул? Ә бит хакимдар ҡанун сығарыр алдынан халыҡ тураһында уйларға тейеш. Шуға ла хаким Креондың хатаһы шунда - ул ҡанун сығара һәм үҙе үк уның тоткононa әүерелә, һөҙөмтәлә улы ла һәлак була, Антигонаны ла язалатырға мәжбүр була. Ошо бер дөрөҫ булмаған аҙым да ябай, тәртипле, ихлас телләктәге кешене мумияға әүерелдерә. Был спектаклдең үҙенең тамашасыһы барлыҡҡа килер, тип ышанам мин. Ә уны ҡарарға теләмәгәндәр өсөн репертуарҙа башҡа бынамын тигән әйберҙәр етерлек.

ШУЛАЙ ИТЕП...

**"65 йәште тултырып ҡына торған мәлегеҙҙә ниндәй тойғолар кисерәһегеҙ, тормошоғоҙҙан ҡәнәғәтһегеҙме?" - тип тә һорағайныҡ Олег Закир улынан. "Ҡәнәғәтлек тураһында уйлаған юҡ әле, әммә был донъяла йәшәү миңә бик тә оҡшай. Әлеге мәлдә иң ҙур ҡыуанысыбыҙ - ейәнсәребеҙ Алһыу, уға тиҙҙән ике йәш тула. Ейәнебеҙ ҙә ҡыуандырып тора - бына былар шатлыҡ түгелме ни? Ҡатыным сәләмәт, һәр саҡ минең менән, үҙем эшләп йөрөйөм, әле бына һеҙҙең менән осраштыҡ - былар ҙа шатлыҡ..." - тип яуаплағайны ул. Ысынлап та, әлеге лә баяғы бөйөк шағирыбыҙ Мостай һүҙҙәре менән әйткәндә, ниндәйҙер дәрәжәләр мәңгелек түгел был донъяла. Юғарылыҡты юғары күңел генә билдәләй. Килһе юбилейҙарығыҙҙы ла ошо юғарылыҡта ҡаршылағыҙ, тип кенә теләйбеҙ.**

*Ләйсән НАФИҠОВА*
*әңгәмә ҡорҙо.*

*✓ Шуныһы барыһын да шаңҡытты, теге айыу түшкәһе артынан ике балаһы эйәреп килә, кешенән өркөп-ҡасыу төшөнсәһенен оноҡҡан бәләкәстәр имсәк бәпестәй шыңшып илайҙар, күҙҙәренән субырҙап йәштәре аға.*



Үгәй әсәй бер ҡайҙа ла эшләмәй, көнө буйы өйҙә, атайым эшкә тип сығып китеүе була, әхирәттәрен йыйып ала ла, оҙон-оҙаҡ ғәйбәт һаталар, өҫтәлгә араҡы ҡуйып табын ҡоралар. Иҫереп алһалар, моңһоҙ итеп йырлап та ебәргеләйҙәр. Өйөбөҙҙән йылылыҡ, ҡот ҡасты. Атайым гелән төмһәреп йөрөй башланы, аҙ һүҙле булып китте, эсенә йомолдо, элеккеләй ихласлап һөйләшеп тә ултырмай, мәктәптәге уҡыуыбыҙ, өй эштәребеҙ менән дә ҡыҙыҡһынмай, элекке ыҫпайлығын ташлап, әрпеш итеп кейенә башланы, йөҙөн һаҡал-мыйыҡ баҫты. Ошоғаса эсеүҙең ни икәнен белмәгән атайым бер нисә тапҡыр хәмер эсе борхотоп, һуҡмыш ҡайтты. Өҫтәүенә, ерле юҡҡа көйәлсәкләнә, яндырайлана, сәбәпһеҙ-ниһеҙ ҡысҡырып, екереп ебәргеләй. Бер көн иртәнсәк ул икебеҙҙе эргәһенә саҡырып алды ла, сәстәребеҙҙән һыйпаны, йөҙө болоҡһоу ине. "Ҡыҙҙарым, мин күрше районға барып, эшләп ҡайтайым әҙерәк, өйҙә бол яғы наҡыҫланды. - Тапҡан-таянғанының ҡайҙа киткәнлеген әйтмәһә лә һиҙәлер. - Шуға, мине юғалтмағыҙ. Арыу ғына хаҡҡа мәҙәниәт һарайын биҙәргә яллandым. Тегенән икегеҙгә лә матур күлдәктәр, сандалиҙар, тәмлекәстәр алып ҡайтырмын. Ә һеҙ бында тәртипле генә тороғоҙ инде. - Үгәйгә өмөт итмәгәнгәләр, өй тирәһендәге йомоштарҙы апайыма ҡушты. - Гөлбикә, бөтә ышаныс һиндә. Мал-тыуарҙы теүәл тот, Йондоҙҙо һау, юғиһә, елене боҙолор, тауыҡ-ҡаҙҙарға ҡайта-ҡайта ем һип, ҡулға ғына ҡарап торалар бит, Һорланға ла ашарына һалырға онотма. Һеңлеңә лә күҙ-ҡолаҡ бул, өҫтөн ҡара, бысраҡ йөрөтмә, тамағын туйҙыр. Оҙаҡламам, тегендәге эш аҙна-ун көнлөк. Бөтөнләй көтмәгән сағығыҙҙа ғына һеҙҙе ҡыуандырып, ҡапыл ғына ҡайтыр ҙа төшөрмөн. Шунан өсәүләп әсәйеңдең янына барып әйләнербеҙ. Нишләптер, һуңғы арала төштәрем боларып тора. - Әллә алдан алып әҙерләп ҡуйған инде, апайыма китап, миңә төҫлө ҡәләмдәр йыйылмаһы һалынған тартманы тотторҙо. - Уҡырға яратаһың бит, Гөлбикә, һиңә әкиәттәр китабы. Ә Йәнбикәнең ҡулы рәсемгә килешә, шуға мине юғалтып, юҡһынып, күңелһеҙләнмәһен, күп итеп һүрәттәр төшөрһөн". Аҙаҡтан шул бүләкте ҡомартҡылай күреп оҙаҡ ҡына үҙем менән йөрөттөм. Урланылар. Төҫлө буяҡтарһыҙ ҡалғас, көндәрем төҫһөҙләнеп ҡалғайны шул саҡта.

* * *

Атай киткәс, өй эсе йәмһеҙләнде, үгәйҙең тупһабыҙға туҙан ҡундырмаған әхирәттәре өйөбөҙҙән бөтөнләй сыҡмаҫ булды. Беҙҙе ҡайғыртыусы юҡ, өҫтәлдә ҡалған ҡаты-ҡото менән туҡланып йән аҫырайбыҙ. Аҙна үткәс, үгәй таң менән йүгермәләй башланы. Күршелә йәшәгән ҡатын беҙҙе кейендерҙе лә үҙе менән эйәртеп алып ҡайтты, шунан яйын тап килтереп, атайымдың эш мәлендә аяғы тайып китеп, юғарынан осоп үлеп ҡалғанлығын әйтте. "Үкһеҙ ҡалғас, ҡайһылайтырһығыҙ инде, балаҡайҙарым, кемдең ҡулына ҡалырһығыҙ..." тип сеңләп тә алды. Ҡара ҡайғының аяуһыҙлығын, фажиғәнең тәрәнлеген, юғалтыуҙың кире ҡайтмаҫлығын татып өлгөрмәһәк тә шарылдап илап ебәрҙек.

Беҙҙән ике өй аша бер бабай йәшәне. Оҫта һунарсы ине ул, урмандан һис ҡасан ҡоро ҡул ҡайтмай, бил ҡайышына һәр саҡ ҡор, өйрәк, йә ҡуян аҫылған була. Бер мәл ауыл малын айыу йыға башланы. Шул тайыштабанды аулай алмай, оҙаҡ мәшәҡәтләнделәр. Аңдый торғас, һунарсы олатай әләктерҙе йыртҡысты. Шөкәтһеҙ ҙур, ҡурҡыныс урман януарын тәгәрмәсле трактор менән алып ҡайттылар. Шуныһы барыһын да шаңҡытты, теге айыу түшкәһе артынан ике балаһы эйәреп килә, кешенән өркөп-ҡасыу төшөнсәһенен оноҡҡан бәләкәстәр имсәк бәпестәй шыңшып илайҙар, күҙҙәренән субырҙап йәштәре аға. Тағылғанды ишек алдына индереп һалдылар. Айыу емтегенең тулышҡан имсәктәренән ҡанлы һөт һарҡа, ә көсөктәр илай-шыңшый шуны ялайҙар. Һуңынан ул етемәктәрҙе зоопаркҡа тапшырғандар шикелле. Ундайҙарҙың, бала саҡтан ата-әсә ҡурсыуынан мәхрүмдәрҙең асы яҙмышы алдан билдәле - тотҡонлоҡта үлгәндәрҙер, харап булғандарҙыр.

Атайымды ла беҙ апайым менән ауыл осона сығып ҡаршы алдыҡ. Йөк машинаһы беҙҙе күреү менән туҡтаны. Шофер янына ултырырға ла, кузовҡа һағырға ла теләмәй, сеңләй-сеңләй оло юлдан атланыҡ. Үгәй әсәй атайымдың кәүҙәһен өйгә керетеп мәшәҡәтләнмәне, тура зыяратҡа илттерҙе. Йылдар үтеү менән ҡанлы эҙҙе юллап килгән айыу балалары, оло юлдан туҙан йотоп атлаған апайым менән мин, ҡойроғон бот араһына ҡыҫып юрғалаған этебеҙ Һорлан йыш күҙ алдыма баҫа...

Атайҙы ерләгәндең икенсе көнөнә үк үгәй тартынмайынса әсәйемдең портретын урынынан ҡуптарып алып, кәрәкһеҙ әйберҙәй күреп, ишек төбөнә елгәрҙе. Ҡаршылашырға маташҡайныҡ, Гөлбикәнең толомонан матҡып мөйөшкә бырауҡтырҙы, минең битемә ялландырғансы сабып ебәрҙе. Башҡа саҡ булһа, бирешеп ҡалыр инек, йәлләтергә теләп, тызылдай башлар инек, был юлы үлемесле алышҡа күтәрелгәндәй, ҡоласыбыҙҙы йәйеп, әсәйебеҙҙең һүрәтен ҡаплап яттыҡ. "Ах, кәнтәй балалары, һеҙ шулаймы ни әле!" Аяҡтарыбыҙҙан эләктереп, бер яҡ ситкә һөйрәй башланы. Апайым өҫтәл тояғына йәбешкән, мин - комод мөйөшөнә, саялығыбыҙ сиктән ашҡан, бирешергә теләмәйбеҙ. Үгәй яйын тап килтереп, аҫтыбыҙҙағын һелкетә тартып алғайны, апайымдың башы өҫтәл мөйөшөнә бәрелде, уң яҡ ҡашы өҫтөнән ҡан бәрҙе. Башымдағы яулығымды сисеп, яраға баҫтым, апайым да маңлайын тотоп, бөгөлөп төштө, тештәрен ҡыҫҡан, шунда ла иламай. Ошо тотҡарланыуҙан файҙаланған үгәй туйтаңлап барып түрбашта ятҡан бысаҡты эләктерҙе лә, киндерҙе уңлы-һуллы ярып ебәрҙе. Шул мәлдә һүрәтте түгел, беҙҙең йәнебеҙҙе һуйҙымы ни! Өңөрәйгән рамды тотоп, башҡа яҡлар кешебеҙ булмағанлыҡтан, күршеләргә йүгерҙек.

Өй хужаһы яңы ғына ҡырҙан ҡайтып инеп, майлы эш кейемен алыштырып тора ине. Эшлектән сыҡҡан портретты күргәс, күтәрмә тупһаһына барып ултырып, тубығына терһәкләнде: "Иблис, ен алыштырған бисә... Уның йөрөмтәллеген, хәшәрәтлеген Хәйретдингә әйтмәнем түгел, әйттем, тыңламаны, ҡайһы яғы менән арбағандыр үҙенә. Инде килеп һеҙгә этләнергә ҡалды. Низнай, баш ҡатҡан... Ә быны, - портретҡа ымланы, - элекке хәленә ҡайтарыу мөмкин түгел. Апарып сүплеккә ырғытырға ла ҡул бармай, мин уны иртән әсәйегеҙ менән атайығыҙҙың ҡәберҙәре араһына апарып күмермен. Улар бит йәнәш яталар..." Минең артыма боҫоп баҫҡан апайымдың маңлайындағы ҡанлы яулығын әле генә абайланы шикелле, асырғанып ҡысҡырып ебәрҙе: "Тегенең эшеме был? Туҡманымы? Хәҙер мин ул йыбытҡыны һыу эскеһеҙ итәм!" Елтерәп, ҡапҡа яғына йүнәлгәйне, ҡатыны юлына арҡыры баҫып туҡтатты, һыуындырырға теләп, өгөтләргә кереште. Ғауғаны олоға ебәрергә теләмәгән апайым да алдашты: "Сығып килешләй үҙем ишек яңағына яңылыш төкөнөм..."

Берҙән-бер яҡын кешебеҙҙән яҙғас, йәшәүебеҙ ысын мәғәнәһендә тамуҡҡа әүерелде: үгәй әсәй беҙҙе әҙәмгә лә һанамай, тамағыбыҙҙы туйҙырһа - туйҙыра, туйҙырмаһа - юҡ. Өйөбөҙгә һуҡмыш ир-ат йыш килә башланы. Ул сағында инде йорттан бөтөнләй ҡыуып сығаралар, өшөп-туңып, йәйге аласыҡта, йә һарай башында төн уҙғарабыҙ. Һыуыҡтан һаҡланырға теләп, апайым әсәйемдең пальтоһын кейә, мин - атайымдың бушлатын. Хатта шул кейемдәрҙә лә яҡындарыбыҙҙың тән йылыһы һаҡланған кеүек.

Бер көн УАЗикта ниндәйҙер ят кешеләр килеп төштө, милиция формаһындағы ир һәм костюм-күлдәк кейгән ҡырыҫ йөҙлө ҡатын. Уларға эйәреп, мәктәп директоры, беҙҙең класс етәкселәре, барып йөрөгән күршеләребеҙ инде. Үгәй әсәйҙе өҫтәл артына ултыртып ҡуйып, ниндәйҙер ҡағыҙҙар тултыра башланылар. Теге ҡатын ҡаршыһындағы үгәйгә һынаулы ҡарап: "Һеҙҙе әсәлек хоҡуғынан яҙҙырабыҙ", - тине. Ул нишләп беҙгә әсәй булһын, уның беҙгә ғәзиз түгеллеген тотош ауыл белә, тип ҡысҡырырға уҡталғайным ғына, Гөлбикә апайым усымды ныҡ итеп ҡыҫты, был хәрәкәте, өндәшмә, файҙаһыҙ, тиеүе ине. Ауылдаштар теге ҡағыҙҙарға сиратлап ҡултамғаларын ҡуйҙылар. Үгәй: "Йорт закон нигеҙендә минеке икәнлеккә документтар йүнләп бөтөргәнмен, бынан бер кем ҡыуып сығара алмай!" - тип яр һалды. Милеккә талашыр йәштәбеҙме инде, тағы йортобоҙ үҙенән этәргән, биҙҙергән боҙ һарайына әүерелгәйне күптән.

Иртәгәһен машинаға ултыртып, беҙҙе ҡайҙалыр оҙаттылар. Ҙур ҡалалағы балалар йорто икән. Икебеҙҙе ике төркөмгә билдәләнеләр, кейем-һалым бирҙеләр. Шунда йәшәй башланыҡ. Көн тәртибе сәғәт-минутына саҡлы бүленгәнлектән, күрешеү-аралашыу ҙа һирәк эләгә. Ҡаҙна йортонда ла тормош еңелдән түгел, аҙым һайын ҡыйырһыталар, көслөнөкө, әрһеҙҙеке, оятһыҙҙыҡы - донья. Тәрбиәселәр ҙә тәрбиәләмәй, киреһенсә, үҙҙәрен ҡаты, мәрхәмәтһеҙ тоталар. Теге атайым биргән ҡәләм тартмаһын да ошонда юғалттым, сөнки ҡаҙна йортондағы алдашыу - эскерһеҙ шаяртыуға, ә урлашыу - алдын-артын байҡамаған асығауыҙ мәмәйҙе аҡылға ултыртыуға иҫәпләнә.

Бер көн тәрбиәсе килеп, дәрестә ултырған мине балалар йорто директорының кабинетына алып инде. Бында тағы минән башҡа дүрт ҡыҙ баланы килтергәндәр. Ишек ҡырлауына теҙеп баҫтырып ҡуйҙылар. Ҙур кәүҙәле, йыуан, йәмһеҙ директор апайыбыҙҙың эргәһендә һылыу ҡатын ултыра, ҡупшы итеп кейенгән, сағыу биҙәнгән. Бөтөнләй икенсе, ят донъянан килгәндәй, директорыбыҙға, инеп-сығып йөрөгән тәрбиәсебеҙгә юғарынан ҡарап һауалы тота үҙен. Ул беҙҙе теүәлләп күҙҙән үткәрҙе лә, эргәбеҙгә килеп, беләктәребеҙҙән тотҡолап, ауыҙыбыҙҙы астырып тештәребеҙҙе тикшереп, сәстәребеҙҙән тартҡылап ҡарап тикшерә башланы, шунан иғтибар менән алдындағы ҡатырға папкаларға йомолдо. Ишеткәнем бар ине, ҡайһы берәүҙәр бында тәрбиәгә бала алырға киләләр икән, тимәк, был шуларҙың береһе. Ҡағыҙҙарыбыҙҙы ҡайта-ҡайта уҡып, берәмтәләп ҡарап ентекләп тикшерә бит әле, аҫырауға бала түгел, сыҫҡан аулауға бесәй балаһы, йорт һаҡларға эт көсөгө һайлай, тиерһең. Бер аҙҙан ҡағыҙҙарҙан айырылып башын ҡалҡытты ла һуҡ бармағы менән миңә төрттө: "Данные этой девочки меня устраивают!" Һайландыҡтан ҡалғандарҙы сығарып ебәргәс, эргәмә килде, башымдан һыйпаны:

- Еще раз здравствуй, девочка, как тебя зовут, как фамилия? -

Белә-күрә ҡабатлап һорай, аралаша алыуымды һынап ҡараусылыр. Тулҡынланыуҙан телемде йотҡандай, ҡаҡҡан ҡаҙыҡтай шымып ҡалдым. Директорыбыҙ лупалар беркетелгән һөйәк тирәсле күҙлеген кейеп, танауы төбөнә батырҙы ла "Личное дело"мдағы мәғлүмәттәрҙе уҡып, минең өсөн яуап бирә башланы:

- Вы с ее данными ознакомились. У нее тут еще воспитывается родная сестра. Янбика тихая, необщительная, замкнутая, но со своими сверстниками ладит, находит общий язык. Очень чистоплотная, аккуратная, обязательная, любое поручение выполняет в срок.

- Подробной характеристикой вполне согласна, но чем связана её замкнутость?

- Они воспитывались у алкоголички.

Көтөлмәгән яуаптан ҡатындың күҙҙәре түңәрәкләнде:

- Алкоголичка их родная мать?

- Нет, мачеха.

Яуаптан ҡәнәғәт ҡалған ҡатын үҙе менән таныштырыуҙы кәрәк тапты:

- Меня зовут тетя Лиза. Я приехала издалека. Мы хотим с тобой жить. Ты не против?

Директор тағы ҡыҫыла һалды:

- Вы у нее еще и будете спрашивать! Будет жить!

- Ты с сегодняшнего дня не Янбика, а Яна. Яна, запомнила? И последнее. Девочка, спой-ка мне свою любимую песню. Хочу послушать.

Ошоғаса бер тапҡыр ҙа йырлап ҡарағаным булмағас, юғалдым да ҡалдым. Директор ауыр кәүҙәһен еңел ҡуҙғатып, эргәмә килде:

- Есть у нее музыкальный слух! Она поет, я знаю!

Һынағастай тик торам. Минән нисек тә ҡотолорға теләгән директор ҡуйырҙан ҡуймай бәйләнә бирә:

- Яңыраҡ ҡына бер йырҙы, һеҙгә, оңҡоттарға өйрәттеләр түгелме: "Чунга -Чанга весело живем, Чунга-чанга песенку поем..." Ҡабатла, маңҡа! Ну!

Лиза апай мине яҡлашырға теләгәндәй, ике араға төштө:

- Смелее. Если не знаешь песень, тоже не беда. Научим.

Яғымлы өндәшеү тәнемә көс биргәндәй итте. Тамағымды ҡырып алдым да берҙән-бер белгән йырымды һуҙып ебәрҙем:

Йоҡла балам, йом күҙеңде, әли бәлли бәү,

Мин һаман да һинең янда, әли бәлли бәү...

Шул мәлдә сәсемдән наҙлы һыйпаған әсәйемде күҙ алдына баҫтырып, буҫығып иланым да ебәрҙем...

Мине алып китергә йыйыныуҙарын ишеткән Гөлбикә апайым кискеһен күрше корпустан йүгерә һалып килеп етте. Бер һүҙ



ҙә әйтмәй, ҡосаҡлап алды: "Яҡыным булараҡ әле генә рөхсәт бирҙем теге ҡатынға. Бар һин унда, Йәнбикә. Кеше булырһың. Мине юҡһынма. Мәле етһә, ҡайҙалығымды белгертеп, үҙем хәбәр ебәрермен..." Һүҙендә торҙо, һуңынан эҙләп тапты, тик ваҡыт үтеү менән араларыбыҙ һыуынды. Туғандарҙы аралашып, ҡатнашып йәшәү генә яҡынайта, эҫендерә шул ул. Ә беҙ яйлап ҡына бүленгән икмәктең ике телеменә әүерелдек. Дөрөҫ, әле лә беҙ апайым менән һирәкләп хат аша булһа ла аралашабыҙ, тик унан ары түгел.

Шулай итеп, Лиза апай мине Ленинградҡа үҙенең бай ғаиләһенә алып ҡайтты. Өҫ-башымды ерәнес әйберҙәй күреп, пакетҡа тултырып сығарып ырғыттылар ҙа, ентекләп ваннала йыуындырғандан һуң, матур итеп кейендерҙеләр, йәшемә тап килтереп йыһазландырылған айырым бүлмә биреп ҡуйҙылар. Тылсымлы, мөғжизәле йәшәү әкиәттә генә түгел, һирәкләп булһа ла тормошта ла осрай икән. Ҡатын музыка буйынса уҡыта, ире балетмейстер. Бер юлы балет класына һәм музыка мәктәбенә яҙҙырып, шунда йөрөтә башланылар, төпкөлдән килгән ауыл балаһы булараҡ, яйы сыҡҡан һайын үҙенде башҡалар алдында, өҫтәл артында нисек тотоу, һөйләшеү ҡағиҙәләрен өйрәттеләр, төшөндөрҙеләр. Йортобоҙҙа тәрбиәле ағай-апайҙар йыш була, сәнғәт, мәҙәниәт хаҡында әңгәмә ҡоралар, этикет ҡанундарын боҙмай ғына бәхәсләшеп тә китәләр. Яттар барҙа ҡырағай кейектәй бүлмәмә инеп бикләнәм. Гел генә ҡасып-боҫоп булмай бит инде, бер көн дөйөм өҫтәл артына ултырттылар. Сәнске, бысаҡ менән эш итә белмәгәнемде күргән ҡунаҡтарҙың береһе әйтә ҡуйҙы: "Вы эту одичавшую девочку привезли из джунглей, и из нее собираетесь делать человека?" Григорий Вячеславович яҡлашты: "Она станет не только человеком, но и первой принцессой города, вот посмотрите! - Уңайһыҙ хәлдән сығарырға теләптер, миңә тәҡдим итте: - Яночка, не стесняйся, держись непринужденно, потом научу как умело пользоваться вилкой, ножом, а пока ешь руками. Руками всегда вкуснее". Әйткәндәренең дөрөҫлөгөн күрһәтеү, раҫлау маҡсатында бармаҡтарын имә-һура алдындағы аҙыҡты ҡулы менән тотоп ашарға кереште. Нескә күңелле, һиҙгер йәнле кеше ине ул.

Балалар йорто тамуҡ булһа, яңы ғаиләлә ожмахтағылай тойолдо башта. Тамағым туҡ, өҫтөм бөтөн, тик бында ата-әсә йылыһын һәм наҙын тойманым. "Сколько волка не корми, все равно в лес смотрит", тиҙәрме әле, бәлки, ятһырауым ата-әсәмде башҡа берәү менән алыштырырға теләмәүҙән дә килгәндер. Шулай итеп, исемем Янаға әүерелде, ә паспорт алғанда атайымдың урынына Григорьевна тип яҙҙырҙылар.

Мәктәпте ҡыҙыл дипломға тамамлау хөрмәтенә ҡала ресторанындарының береһендә ҙур мәжлес ойошторҙолар. Тантана барышында Григорий Вячеславович йәшел бәрхәт ҡумта бүләк итте лә, унда нимә ятҡанлығын шунда уҡ күрергә теләгәйнем, ҡолағыма бышылданы: "Ашыҡма. Был сюрприз. Өйгә ҡайтҡас, быны өсәүләп кенә ҡарарбыҙ, ҡыҙым, килештекме?.."

Ҡумтаның эсендә алтын муйынсаға тағылған тәре ине. Дин төшөнсәһе ул ваҡытта ике ятып бер төшөмә инеп сыҡмаһа ла, нишләптер, христиан билдәләренән ҡурҡа инем. Әле балалар йортонда тәрбиәләнгәндә беҙҙе ҡала буйлап экскурсияла йөрөткәндәрендә сиркәү эргәһенән ситкә ҡарап йүгерә-атлай үтеп киткәнем хәтерҙә. Был йән кимәлендә ҡабул итмәүме, шөбһәле эске тартыныуымы - белмәйем. Бер һүҙ менән әйткәндә, ҡиммәтле бүләкте тағып йөрөүҙән ҡырҡа баш тарттым. Мине аллаһыҙлыҡта битәрләгән Елизавета Петровна йөрәк дарыуы эсеп ятып китте, ә аҡыллы Григорий Вячеславович, һәр ваҡыттағыса, фәлсәфәүи һығымтаға килде: "Ниндәй биҙәүес таҡһаң да һин беҙҙең яратҡан ҡыҙыбыҙ. Иртәгә үк ювелир магазинына барып, тәрене ярым айға алыштырып алырға мөмкин..."

Елизавета Петровнаға, Григорий Вячеславовичҡа рәхмәтлемен, шаулы мегаполис шарттарында, миллионлаған халыҡ араһында мәҙәни йәшәргә өйрәтеп, ҡырыҫ тәрбиәләһәләр ҙә лайыҡлы тормош юлына сығарҙылар. Балалар йортонда ҡалһам, ары минән кем сығыр ине икән, белмәйем. Григорий Вячеславович бынан биш йыл элек көтмәгәндә ауырымай ғына үлеп китте... Өйҙәгеләр бәләкәйҙән теләгемде, ҡыҙыҡһыныуымды ҡабул итеп бөтмәһәләр ҙә һүрәт төшөрөргә яраттым, атайымдың һәләте миңә күскәндер, күрәһең. Мәктәпте тамамлағас, Ленинград институтының графика бүлегенә уҡырға индем, этюдтар төшөрөүҙе үҙ иттем, уңыштарым да булды. Институтта саҡта студенттар күргәҙмәһендә ҡатнашып, юғары урындар ҙа алдым. Шунан яҙмышымда Павел Сергеевич осраны. Бына ошондайыраҡ инде минең яҙмыш...

- Ә тыуған яғығыҙға ҡайтып әйләнмәнегеҙме?

- Ҡайҙа һәм кемгә? Гөлбикә апайымдарға барырға бер нисә тапҡыр йыйындым да, "Мине кем һағынып көтә әле, унда кәрәгем бармы?" тигән уйҙан кире һүрелдем. Ә шулай ҙа бала сағым, өҙөкйыртыҡ хәтеремә уйылған хәтирәләр йыш төшөмә инә. Үҙ телемдә асыҡ итеп һөйләшәм, йырлайым икән, тим. Ә йыр-көйҙәргә килгәндә, бер тапҡыр ҡурай моңон һәм "Таштуғай" йырын тыңлап, тетрәндем...

Көтмәгәндә бүлмәгә Елизавета Петровна килеп инде лә миңә шелтәләп ҡараны:

- Һеҙ бында онотолоп киткәнһегеҙ түгелме, итектәрегеҙҙәге ҡар иреп, иҙәнде бысратҡан!

Урынымдан ҡалҡтым:

- Ысынлап та оҙағыраҡ ултырып ташланым шул, берүк кисерегеҙ, Йәнбикә Хәйретдиновна...

- Нимә? - Елизавета Петровна ҡурҡыныс хәбәр ишеткәндәй ҡырҡа бүлдерҙе, ҡыҫылған йоҡа ирендәре дерелдәп китте хатта. - Ҡайҙан уйлап таптығыҙ ул исемде?

Яна апаһы менән килешкәндәй, һүҙгә ҡушылды:

- Нисек бар, шулай ҡалайым, Азамат, өйрәнгәнмен, күнгәнмен...

- Ее зовут Яна, а по отчеству Григорьевна! Она наша родная дочь, и об этом никогда не забудьте, молодой человек. Я ее делить с кем-то не собираюсь! - Сәгер күҙҙәр яһил янып киттеләр...

**Редакциянан: Повестан өҙөктө ошо урында тамамлайбыҙ. Тулы вариантын яҙыусының баҫыласаҡ китабында уҡырһығыҙ.**

АФАРИН!

# БАШҠОРТСА ТАПШЫРЫУҘАРҘЫ...

## был каналда ла көн дә ҡараясаҡбыҙ

**Бөгөн ҡайҙалыр нимәнеңдер ябылыуы йәки ҡыҫҡартыуҙар, бүлеүҙәр, сикләүҙәр ғәҙәти күренеш булып китте. Быларҙың барыһын да "оптималләштереү" һүҙенә бәйләйбеҙ һәм күп осраҡта, үҙебеҙгә ҡағылмаһа, артыҡ уйлап та бирмәйбеҙ. Сөнки уларҙың аңлатмаһы бар - кризис. Бына шундай күптәр "кризис" тип зарланған көндәрҙең береһендә, "Рәсәй-Башҡортостан" холдингының Милли тапшырыуҙар бүлеге һөйөнөслө яңылыҡ менән шылтыратты. Әүҙем үҫеш осорон кисереү генә түгел, тағы ла киңәйергә - тапшырыуҙар һанын арттырырға торалар. Федераль ДТРК-ның йөҙгә яҡын филиалдары араһында бары ике төбәктә генә милли тапшырыуҙар көн һайын эфирға сыҡһа, ошо көндәрҙә Башҡортостан шуларҙың өсөнсөһө булмаҡсы икән.**
**Милли тапшырыуҙар бүлеге етәксеһе Уйылдан ҒӘЛИН беҙгә бына нимәләр тураһында һөйләне:**




- Бүлекте утыҙға яҡын хеҙмәткәр берләштерә. Йыл ярым элек Мәскәү менән һөйләшеүҙәр алып барылып, рус телендәге тапшырыуҙар программаһына башҡортса яңылыҡтар программаһы ла индереү хәл ителде. Шунан алып аҙнаһына өс тапҡыр иртәнге туғыҙҙа башҡортса яңылыҡтар менән эфирға сыға килдек. Тик был ғына аҙ булып тойолдо. Күҙәтеүҙәрҙән күренеүенсә, башҡорт телендә сыҡҡан хәбәрҙәр, рейтингы буйынса, федераль хәбәрҙәрҙән бер ҙә кәм түгел. Ҡайһы саҡта өҫтөнлөк алып та китә хатта. Артабан барыһын да анализлап, сифатлы мәғлүмәт әҙерләрҙәй команда туплап алдыҡ. Был тәңгәлдә ҡайҙандыр журналистар эҙләп аптыранманыҡ, үҙебеҙҙең ресурстарҙы файҙаландыҡ. "Башҡортостан" радиоһында эшләүсе башҡорт телле хәбәрселәребеҙҙе йәлеп итеп, елле бер ижади төркөм ойоштороҡ. Ғәзиз Лоҡманов, Ғәлимйән Ибәтуллин, Рәмзит Әбүләев, Ғәлимйән Шәриповтар - улар журналистика өлкәһендә тәжрибәле кешеләр. Беҙҙә лә конвергент редакция, йәғни радио һәм телевидение синтезын берләштергән бүлек булдырылды.

Башҡорт телендәге иртәнге тапшырыуҙар - компанияның милли тапшырыуҙар бүлегенең төп йүнәлеше. Башта "Ауаз" тип исемләнгән тапшырыу хәҙер, "Хәйерле иртә, республика!" тип атала. Ул республиканың сәйәси, социаль, мәғариф, мәҙәниәт, иҡтисад, спорт, сәләмәтлек, ауыл хужалығы, сауҙа һ.б. өлкәләре мәғлүмәттәрен халыҡҡа еткереүҙе маҡсат итеп ҡуя. Бөгөнгө телевизор ҡараусыны сәғәткә һуҙылған бер үк тема менән әүрәтеп булмай. Күп кешенең ваҡыты тар. Улар бары мөһим булған программаны ғына ҡарарға тырыша. Һәм беҙҙең "Хәйерле иртә, республика!" тап шундай мөһим мәғлүмәттәрҙе генә биреүсе программа ла инде.

Шулай итеп, 7 ноябрҙән беҙҙең алып барыусылар көн һайын телевизор ҡараусыларға яҡшы кәйеф еткерә. Был яңылыҡ, бер яҡтан, ҡыуаныслы, шул уҡ ваҡытта ҙур яуаплылыҡ та йөкмәтә. Телевидение - үҙенә күрә бер фән бит ул. Тамашасы иғтибарын яулау өсөн алып барыусының мөләйемлеге лә, уның үҙен тотошо, телмәре, кейеме, ҡарашы ла мөһим. Мәғлүмәттәрҙең яңы, ҡыҙыҡлы, фәһемле, тәьҫирле, этик һәм башҡа нормалар сигендә булыуы, видеосюжеттың ҡыҫҡалығы һәм сифаты шулай уҡ мөһим. Башҡорт телендәге тапшырыуҙарҙы башҡа милләт вәкилдәре лә ҡарай һәм йыш ҡына тәржемәһен һорап мөрәжәғәт итәләр. Беҙ уларҙың талабын да ҡәнәғәтләндерәбеҙ, йәғни башҡортса тапшырыуҙар барышында экран аҫтында рус телендәге йүгерек юлдар үтеп тора.

Милли тапшырыуҙар эшләүсе төркөмдөң яуаплылығы икеләтә ҙур. Беҙҙең бүлек быны яҡшы аңлай һәм юғары кимәлде тотоу өсөн бар тырышлығын һала ла. Беҙҙең редакциянан өс кеше Мәскәүҙә белемен камиллаштыра. Әлбиттә, башҡорт теле белгестәре тарафынан тәнҡит һүҙҙәре лә ишеткеләйбеҙ. Шуға ла әҙәби башҡорт телен камиллаштырыу, башҡорт ғилеме буйынса белем алыу тураһында ла онотмайбыҙ. Тәнҡитләүселәр менән бер рәттән, беҙгә ошо йәһәттән ярҙам итергә ынтылыусылар ҙа юҡ түгел. Мәҫәлән, күптән түгел тел белгесе Миңһылыу Усманова шылтыратып, "Шундай-шундай тел етешһеҙлектәрен аңғарҙым", тине. Беҙ уға тапшырыуҙарыбыҙға анализ эшләп, бергәләп осрашып, фекерләшеп алырға тәҡдим иттек. Шулай иттек тә. Ғалимә менән бик фәһемле аралашыу булды. Ике-өс көн эсендә Миңһылыу Ғөбәй ҡыҙы күрһәткән хаталарҙы төҙәттек. Хаталарҙан ҡотолоуҙың иң һөҙөмтәле юлы ошо, беҙҙеңсә. Беҙ тәнҡитте ҡабул итәбеҙ һәм мотлаҡ хәл итеү юлдарын эҙләйбеҙ.

"Башҡорт телендәге тапшырыуҙарға реклама килмәй" тигән ҡарашты ла тамырынан емерҙек беҙ. Тапшырыуҙарыбыҙ рейтингы юғары булғас, реклама бирергә теләүселәр һаны ла бермә-бер арта һәм был киләсәктә уңышлы эшләүҙең бер юлы буласаҡ...

"Башҡортостан" ДТРК-һы директоры Азамат Сәлиховтың: "Рәсәй-Башҡортостан" каналында башҡорт телендәге тапшырыуҙарға иғтибар һәр саҡ лайыҡлы кимәлдә буласаҡ. Сөнки беҙ Башҡортостанда йәшәйбеҙ. Беҙҙең маҡсат - быуындан-быуынға ҡәҙерләп тапшырылған йолаларыбыҙҙы, туған телебеҙҙе һаҡлауға өлөш индереү", - тигән фекерен ишетеү ҙә күңелле булды.

Етәксе Милли тапшырыуҙар бүлегенең һуңғы уңышлы проекты - "Алтын бишек" телевизион акцияһы хаҡында ла хуплап телгә алды: "Яҙ иғлан ителгән бәйгегә йөҙҙән ашыу ауыл ҡатнашыу теләген белдереп мөрәжәғәт итте. Шуларҙың туғыҙы финалға сыҡты, өсәүһе - Баймаҡ районының Мерәҫ, Миәкә районының Сәфәр һәм Дәүләкән районының Иҫке Яппар ауылдары еңеүсе булды. Октябрҙа Ҡырғыҙ-Миәкә ауылында күркәм сара үткәрҙек. Ошондай ауыл мәҙәниәтен үҫтерерҙәй, рухты күтәрерҙәй телеакциялар буласаҡ әле..."

Азамат Рафаэль улы телекомпанияның "ТЭФИ-Регион" Бөтә Рәсәй телевизион конкурсына әҙерлек эштәре менән мәшғүл булыуын да һөйләне. Был бәйгегә бөтә ил төбәк телекомпаниялары 11 номинацияға 300-ләп эш тапшырған. Конкурстың һуңғы этабы 22 -25 ноябрь көндәре Өфө ҡалаһында үтәсәк.

Бына ошондай һөйөнөслө, оптимистик рухтағы яңылыҡтары бар беҙҙең коллегалар -"Рәсәй-Башҡортостан" телекомпанияһы хеҙмәткәрҙәренең. Уларҙың фекеренсә, кризис донъяла түгел, ә - башта. Әйе, бында уйланырға урын бар. Заман талаптарына һуҡырҙарса яраҡлашып түгел, ә дөрөҫ ҡабул итеп һәм уларҙы файҙаланып эшләй белә торған кешеләрҙең фекерелер был.

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА.**

ИНТЕРНЕТТАН



## ҠОЯШТА...
### йышыраҡ булығыҙ

■ Күпселек ғалимдар витаминдар организмға аҙыҡ аша инергә тейеш, тип иҫәпләй. Өҫтәмә рәүештә дарыухананан витаминдар һатып алырға кәрәкмәй, ти улар. Әммә иң ҡыҙығы шунда, мәҫәлән, С витаминының тәүлек нормаһын тултырыу өсөн бөгөнгө заман кешеһе 2 килограмм ярым алма ашарға тейеш. Ҡышҡы осорҙа был алмаларҙа шул уҡ С витаминының дозаһы яртылаш кәмей. Тимәк, беҙ был һанды икегә ҡабатларға тейеш буласаҡбыҙ. Алманы татлы борос менән алыштырырға ла була, беҙгә кәрәкле көндәлек аскорбин кислотаһы 4 килограмм бороста буласаҡ. Йәки ике стакан әле генә һығылған лимон һутында. Тик С витаминынан башҡа, В төркөмө витаминдары ла мөһим. Улар етешмәһә, иң тәүҙә нервы системаһы зыян күрә. В1 витаминының тәүлек нормаһы кило ярым иттән алырға була. Был витамин көрпәле икмәктә лә бар, бик бындай икмәкте магазин кәштәләрендә табыуы ла еңел түгел. В2 витамины менән организмды тәьмин итәм тиһәң, 2 литр һөт эсергә йәки ярты килограмм сыр ашарға кәрәк. В6 витаминының тәүлек нормаһы бер бәйләм бананда, В8 витамины ярты килограмм йәшел тәмләткестәрҙә була. А витаминының тәүлек нормаһын тултырам тиһәң, 150 грамм аҡ май, йәки 100 грамм ҡыҙыл ыуылдырыҡ, йәки 400 грамм кишер ашарға кәрәк. Ярты килограмм сәтләүектә Е витамининың тәүлек нормаһы.

■ Көн яҡтыһының ҡыҫҡарыуы кешеләргә кире йоғонто яһай - депрессия үҫешенең бер сәбәбе булып тап ошо фактор тора, тип иҫәпләй неврологтар. Сөнки болотло көндә, төшлектең ҡараңғы мәлендә мелатонин гормоны күберәк бүленә. Шуға ла көҙ көнө үҙегеҙгә күберәк ваҡыт бүлегеҙ. Йәйҙә хәтерләтеүсе еҫтәр ярҙамында кәйефте күтәрергә була. Бигерәк тә лаванда эфир майы тынысландыра. Һөйәкле емештәр майы, кирелһенсә, дәрт уята. Шулай уҡ өйҙә майшәм яндырыу ҙа файҙалы икән. Әйткәндәй, б.э тиклем II быуатта уҡ Рим табиптары ҡояш нурҙарының ыңғай йоғонтоһо барлығын белгән. Улар үҙҙәренең пациенттарына ҡояшта күберәк йөрөргә кәңәш иткән һәм был һәр ваҡыт ярҙам иткән.

■ Даими рәүештә тауыҡ йомортҡаһы ашау һөт биҙе яман шеше хәүефен ике тапҡырға кәметә, тип белдерә Америка ғалимдары. 13 йыл дауамында барған тикшеренеүҙәрҙең һөҙөмтәләре күрһәтеүенсә, аҙна дауамында 6 йомортҡа ашау был яман сирҙе иҫкәртә икән. Ғалимдар билдәләүенсә, йомортҡаның составында Омега-6, бер нисә микроэлементтар, В4 витамины бар. Шулай ҙа йомортҡаны күпләп ашарға ярамай, ул ҡанда насар холестерины күбәйтә, шуға ла йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы сирҙәренә килтерә.

■ Хроник ҡурҡыу кисереп йәшәгән иргеттәр онкологик сирҙәрҙән ике тапҡыр йышыраҡ үлә, ти Кембридж ғалимдары. Ҡатын-ҡыҙҙарҙың хәүеф кисереп йәшәүе был сиргә килтермәй икән. Бөгөнгө көндә планетала йәшәүсе өлкән кешеләрҙең 5 проценты даими хәүеф тойғоһо менән йәшәй. Әлегә ғалимдар яман шеш менән невроз араһында бәйләнештең сәбәбен тапмаған, әммә улар гел ҡурҡып йәшәүҙең организмдың иммун системаһын ҡаҡшатыуына ышана. Шуға ла табиптар пациенттарына иғтибарлыраҡ булырға тейеш, ти улар.

ҠОРҘАР, ЙЫЙЫНДАР...

# ҠАРАҢҒЫЛЫҠТЫ ӘРЛӘГӘНСЕ...
## үҙең бәләкәй генә булһа ла бер шәм тоҡандыр!



**"Ауылдар бөтә, йәштәр ауыл ерендә ҡалмай, тип төшөнкөлөккә бирелгән кешеләрҙең фекере менән килешмәйем. Ауылдарҙың киләсәге ауыл халкының үҙенә бәйле, һәр эштең башында ошонда йәшәгән халыҡ үҙе торорға тейеш, тип иҫәпләйем. Тәрбиә мәсьәләһен генә алайыҡ. Оло быуын кешеләре белә, элек балаларҙы һәм йәштәрҙе бөтә ауыл менән тәрбиәләй торғайнылар. Урамдың ыңғай тәрбиәһе ине ул. Беҙ был тәрбиәне норма итеп ҡабул итә, оолорҙан ояла торғайныҡ. Шуға беҙҙең быуын тәрбиәле, тәртипле булып үҫте. Шуға мин ауылдарыбыҙҙағы ағинәйҙәр, аҡһаҡалдар йәштәрҙе тәрбиәләү буйынса эш алып барырға тейеш, тип иҫәпләйем",- тигәйне Баймаҡ районында булған бер осрашыуҙа Ҡолсора ауылы биләмәһе башлығы Фәйрүзә Арғынбаева.**

Берҙән, биләмә башлығының оптимизмы, икенсенән, урындағы етәкселәрҙең урындағы йәмәғәт ойошмаларына таянырға тейешлеге турағында әйткән ҡәтғи фекере һоҡландырғайны шунда. Ысынлап та, һуңғы ваҡытта был фекерҙең аңлы, зыялы етәкселәрҙең башына ла, күңеленә лә, теленә лә инә башлауы ҡыуандыра. Ошо күренештең һөҙөмтәһе булды ла инде күптән түгел Баймаҡта үткән тағы бер сара. Район хакимиәте башлығы урынбаҫары Гөлшат Сирғәлина райондағы бөтөн йәмәғәт ойошмалары вәкилдәрен һәм ауыл биләмәләре башлыҡтарын, төрлө ойошма етәкселәрен бер ҡорға йыйҙы һәм эскелеккә, наркоманлыҡҡа, суицидҡа, тормошоҙҙа рухи көрсөк тыуҙырған башҡа кире күренештәргә ҡаршы бергәләп көрәшеү турағында һөйләшергә, фекер алышырға, план ҡорорға, саралар билдәләргә саҡырҙы.

Ысынында, республика, ҡала, районлар кимәлендәге власть органдары, улар ҡарамағындағы төрлө идаралыҡтар, ойошмалар, комиссиялар шөғөлләнә тормошоҙҙағы төрлө кире күренештәрҙе, хоҡуҡ һәм тәртип боҙоуҙарҙы, социаль етемлекте иҫкәртеү менән. Ләкин эш бик үк һөҙөмтәле түгел икәне лә билдәле, юғиһә, был кире күренештәр статистикаһы "былтырғыға ҡарағанда күберәк" тигән яҙыуҙар менән сыбарланыр инеме ни? Бәлки, улар ойошторған саралар бик үк йоғонтоло түгелдер? Бәлки, беҙ бөтөн ошо күренештәрҙең төп сәбәбен әллә ни күҙ алдына килтерә алмайбыҙҙыр? Ошо һорауҙарға яуап булып йыйыны был ҡорҙа ҡатнашыусы танылған яҙыусы Мәрйәм Бураҡаеваның, "Киске Өфө" гәзитенең баш мөхәррире, "Ағинәй" республика йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе Гөлфиә Янбаеваның, БДУ-ның Сибай институты юридик факультеты деканы Әхтәр Боҫҡоновтың һөйләгәндәре.

- Меңәр йылдар буйы быуындан-быуынға күсә килгән халыҡ педагогикаһының төп асҡысы - ул милли йәшәү рәүешебеҙ, - тине Мәрйәм апай Бураҡаева. - Ә милли йәшәү рәүешебеҙ туған тел, туған моң менән тығыҙ үрелеп бара, улар айырым йәшәй алмай. Был ҡағиҙә, әлбиттә, бөтә халыҡтарға ла ҡағыла. Һәр халыҡтың үҙ тәрбиә мәктәбе бар, маҡсаты һәйбәт киләсәк тәрбиәләүгә нигеҙләнһә лә, уны атҡарыу ысул-алымдары айырыла. Беҙҙең ысулыбыҙ - милли сифат, милли үҙлек, милли йәшәү рәүеше тәрбиәләү. Ошоно иҫәпкә алып, бынан 25 йыл элек республиканың башҡорт мәктәптәренә "Тормош һабаҡтары" предметы индерелә башлағайны. Тик мәғариф өлкәһендәге туктауныҙ үҙгәртеүҙәр, буталыштар арҡаһында ҡайһы бер директорҙар фәҡәт бөгөнгө көн күҙлегенән генә ҡарап эш итә һәм уҡыусыла туған теленә, халҡына һөйөү уятырлыҡ бик күп сараларҙы әсенә алған был предметҡа битарафлыҡ күрһәтә. Ә бит бөгөнгө көндә Мәскәү ғалимдары социалләштереү (тормошҡа, йәмғиткә яҡынайтыу тәрбиәһе) турағында һүҙ ҡуйырта, "Тормош һабаҡтары" предметы иһә күптән инде ошо йүнәлештә тәрбиәүи эш алып бара, быны күрәгарау булмаған етәкселәр аңларға тейеш. Туған телебеҙҙең киләсәгенә хәүеф янауы, уны һаҡлау саралары күреү хәстәре ЮНЕСКО кимәленә күтәрелгән икән, үҙен башҡортмон тип һанаған һәр башҡорт һәм Башҡортостандың (тимәк, республикаға исем биреүсе төп халыҡтың) киләсәге өсөн борсолған һәр патриот кеше уйланырға тейештер. Тарихтан билдәле булыуынса, донъяла бик күп милләттәр юҡҡа сыҡҡан. Был юғалыу телде, моңдо, мәҙәниәтте, сәнғәтте юғалтыуҙан, милләт йәшәйеше өсөн яуаплы булған вазифалы әһелдәрҙең киләсәккә ҡарата битарафлығынан башланған. Туған тел - ул милләт ҡото, туған тел моңо - ағас олонондағы һут кеүек. Олон һуты кипһә, ағас ҡорой. Уны ҡоротмау хәстәрлеге йөрәгендә халҡы булған һәр кешенең - атаәсәнең, уҡытыусыларҙың, етәкселәрҙең, шулай уҡ йәмәғәт ойошмалары ағзаларының да изге бурысы...

- Теге замандарҙа балаларҙа, йәштәрҙә патриотлыҡ тәрбиәләү турағында күп һөйләнек, күп саралар үткәрҙек, - тип дауам итте һүҙҙе Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы. - Ул сараларҙың барыһы ла уйлап сығарылған ҡиммәттәргә, сценарийҙарға, яңы алым-ысулдарға ҡоролғайны. Патриотлыҡтың тамыры халҡыбыҙҙың быуындан-быуынға күсә килгән йола-традицияларында, халыҡ педагогикаһында, туған телдә, туған моңдарҙа, тарихи хәтерҙә, үҙебеҙсә йәшәү рәүешендә икәне онотторола яҙҙы. Әгәр үҙебеҙҙең йәшәү рәүешендә күсәгилешлек булһа, беҙ бөгөн эскелек, суицид, ата-әсәһе тере булып та етемлеккә дусар ителгән балалар хаҡында һүҙ күтәрер инекме? Шуның өсөн, урындағы етәкселәрҙең дә, йәмәғәт ойошмаларының да халыҡ араһындағы тәрбиә эштәре башҡортса йәшәү рәүешенә ҡайтыуҙы хәстәрләү, иллау юҫығында ойошторолорға тейеш. Башҡортса йәшәү рәүеше - ул традицион һәм дини йолалар, традицион шөғөл һәм һөнәрҙәр, традицион тукланыу һәм кейенеү. Ул - туған телдә һөйләшеү һәм уҡыу. Ул - тыуған еребеҙҙе, тәбиғәтебеҙҙе ҡәҙерләү һәм һаҡлау. Ул - айыҡлыҡ һәм иман. Бынан биш йыл элек тап Баймаҡ ерендә ойошторолған ҡорҙан башланып, тамырланып, үҫеш алып киткән ағинәйҙәр хәрәкәте ағзалары алдына ошо бурыс ҡуйылған да инде. Ағинәй - ул аҡыллы, ғилемле, милләте өсөн йәне һыҙлаған ҡатын-ҡыҙ. Ағинәйлек, йәш үҙенсәлегенә ҡарамай, беҙҙең бөтөн башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының йәшәү рәүешенә әүерелергә тейеш...

Шунан Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы урындағы биләмә башлыҡтарына өндәште:

- Әгәр ҙә беҙҙең ағинәйҙәребеҙ һеҙҙең ҡушҡанды көтмәй, үҙҙәре ниндәйҙер эштәр башҡара йә һеҙгә кәңәш, эшегеҙгә йүнәлеш бирергә ҡыйыулыҡ итә икән, зинһар, үпкәләмәгеҙ, уларҙы конкурент итеп күрмәгеҙ, уларҙы хуплағыҙ һәм таянысығыҙ, кәңәшсегеҙ итеп ҡабул итегеҙ. Түрәләр янында кәңәшселәр күп була, ағинәйҙәр, аҡһаҡалдар кеүек аҡыллы кәңәшселәргә таянһағыҙ, эшегеҙ ыраясаҡ ҡына...

Был кәңәшмәгә төрлө йәмәғәт ойошмалары вәкилдәренән тыш, Баймаҡ, Әбйәлил, Белорет, Йылайыр районлары имам-хатиптары ла килгәйне. Дини тәрбиә - шулай уҡ халҡыбыҙҙың йәшәү рәүеше. Шуның өсөн дин әһелдәренең мәсеттәрҙә генә түгел, ә ошондай ҡорҙарҙа ла ҡатнашыуы, сығыш яһауы, башҡа йәмәғәт ойошмалары менән бергә саралар үткәреүе бик әһәмиәтле, тип билдәләне үҙенең сығышында БДУ-ның Сибай институты юридик факультеты деканы Әхтәр Боҫҡонов.

- Беҙгә бер сиктән икенсе сиккә һуғылмай ғына, ата-бабаларыбыҙ ҡалдырған юлды ҡыуырға кәрәк, - тине ул. - Ул юлда беҙҙең милли йолаларыбыҙға ла, дини йолаларыбыҙға ла нигеҙләнгән йәшәү рәүешебеҙ, үҙебеҙҙең бөйөк шәхестәребеҙ өлгөләре бар. Ул шәхестәребеҙ, мәҫәлән, Зәйнулла Рәсүлев, Шәйехзада Бабич, Әхмәтзәки Вәлиди һәм башҡа күптәр дини тәрбиә лә алған, ләкин береһе лә, Ислам дәүләте төҙәйөк, тип йөрөмәгән. Диндә улар рухыбыҙҙы яңыртыусы булараҡ баһалаған. Ата-бабаларыбыҙ һайлап алған диндә, дини йолаларҙы бөгөн дә инҡар итергә ярамай, улар беҙҙең башҡа милли йолаларыбыҙ менән йәнәш йәшәргә хаҡлы. Шуның өсөн беҙгә дини ғилем алырға ла ынтылырға кәрәк. Әле бына Сибай институтының юридик факультетында теология нигеҙҙәре буйынса курстар

**✓ Ысынлап та, ошо ойошманың энтузиазмын аңламаусы етәкселәр ҙә бар. Ә был энтузиазм "Ҡараңғылыҡты әрләгәнсе, үҙең бәләкәй генә булһа ла бер шәм тоҡандыр!" тигән хәҡиҡәткә нигеҙләнгән.**

асып, ошо Урал арьяғы төбәгендәге имам-хатиптарҙың белемен камиллаштырыу менән дә шөғөлләнә башланыҡ. Ошо курстарҙа шөғөлләнергә теләүселәр бик күп...

Өс сәғәт самаһы дауам иткән был ҡорҙан һуң матур ғына резолюция ҡабул ителде. Унда аҡҡа ҡара менән "Райондың башҡарма власть органдары, төрлө ойошмалар, учреждениелар һәм йәмәғәт ойошмалары тырышлығын, көсөн тормошобоҙҙоң кире күренештәренә ҡаршы көрәшкә берләштерергә", тип теркәп ҡуйылды, айырым-айырым бурыстар, саралар билдәләнде. Баймаҡтарҙың тәжрибәһе, моғайын, башҡа райондарҙа ла тормошҡа ашырылалыр, ашырылмаһа, ошо мәҡәләләге фекерҙәр кемдәрҙер иғтибар үҙәгенә эләгеп, кемдеңдер теленә идея булып инһә лә насар булмаҫ. Ә идея насар түгел: халыҡ тауышына ҡолаҡ һалыу, уларҙың энтузиазмын хуплау, йәмәғәт ойошмалары менән бергә эшләүҙе һәр етәксенең эш алымы итеп ҡабул итеүенә өлгәшеү.

### Теманы дауам итеп...

Йәмәғәт ойошмалары бик күп, уларҙың һәр береһе ниндәйҙер бер төркөмдөң, бер һөнәрҙәге кешеләрҙең, ситләтелгән һәм ҡыйырһытылғандарҙың, бер партияның мәнфәғәтен алға һөрә һәм яҡлай, тейешле кешеләргә, власть әһелдәренә уларҙың тауышын, зарын еткерә. Йәмәғәт ойошмаларының зарланмай-нитмәй, инициативаны үҙ ҡулына алып, үҙе ниндәйҙер эшкә тотонғандары ла бар. Республика "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы тап бына шундайҙарҙан. Гөлфиә Гәрәй ҡыҙының ауыл биләмәһе башлыҡтарына: "Ағинәйҙәрҙе конкурент итеп күрмәгеҙ, уларҙы хуплағыҙ һәм таянысығыҙ, кәңәшсегеҙ итеп ҡабул итегеҙ", - тип өндәшеүе юҡҡа түгел. Ысынлап та, ошо ойошманың энтузиазмын аңламаусы етәкселәр ҙә бар. Ә был энтузиазм "Ҡараңғылыҡты әрләгәнсе, үҙең бәләкәй генә булһа ла бер шәм тоҡандыр!" тигән хәҡиҡәткә нигеҙләнгән. Йәгни, йөрәгендә рухы, ғәме, сәме булған кеше ауыл урамында ниҙәр булып ятҡанын йорто тәҙрәһенән генә күҙәтеп ултыра алмай, ул урамға сыға, Ҡолсора ауылы биләмәһе башлығы Фәйрүзә Арғынбаева әйтмешләй, ауылды һаҡлап ҡалыу, килеһе быуындарҙы тәрбиәләү өсөн урам тәрбиәһен тергеҙә. Урам тәрбиәһен генә түгел, халыҡ тәрбиәһен тергеҙә. Баяғы ҡорҙа Баймаҡ районы имам-мөхтәсибе Хәмзә хәҙрәт Хафизовтың "Ағинәйҙәр мәсеткә йөрөмәй, әлегә йырлап-бейеү менән генә булалар", тигән тәнҡитенә лә яуабы бар уларҙың. Халҡыбыҙҙың йыр-бейеүҙәре - үҙҙәре тәрбиә мәктәбенең төп дәреслеге бит. Ә мәсеттәргә йөрөргә кем өйрәтергә тейеш? Имам-хатиптар, имам-мөхтәсибтәр үҙҙәре түгелме ни? Әлегә бит был тәңгәлдә уларҙың әүҙемлеге һиҙелмәй. Ҡыҫҡаһы, бер ниндәй тәнҡиткә лә, кемдер килеп ҡушҡанға ла ҡарамай, республика ағинәйҙәре ниндәйҙер эш атҡара, афарин!

Ошо һүҙебеҙгә раҫ итеп, әлеге ҡорҙан һуң Өфө ҡунаҡтарының тәүҙә Баймаҡ районының Сыңғыҙ ауылына, икенсе көндө Әбйәлил районына юлланыуы тураһында ла бер нисә һүҙ. Сыңғыҙ ауылында Беренсе Этҡол, Буранбай, Таулыҡай, Ярат, Ниғәмәт ауылдары ағинәйҙәре, мәктәп уҡыусылары, уҡытыусылар, ауыл халҡы йыйылғайны. Ауылдың ағинәйҙәре матур бер йола сәхнәләштерҙе, йыр-бейеүҙәре, шиғри һүҙҙәре менән сығыш яһаны. Уларҙы ололар ғына түгел, балалар ҙа тамаша ҡылды. Аҙаҡтан түңәрәк ҡорҙа һөйләшеү дауам итте: ағинәйҙәр башҡарған эштәрен барланы, киләсәккә пландарын асып һалды. Һәр береһе ауыҙынан алтын-гәүһәргә тиң халыҡ аҡылы сәселде. Уларҙың дәрте, уларҙың һөйләше, уларҙың үҙ-үҙен тотошо, уларҙың ғилеме - ошо бит инде бар ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙға күсерер ағинәйлек, башҡорт ҡатын-ҡыҙының йәшәү рәүеше!

Ошондай уҡ ағинәйлек өлгөләренә һоҡланыу икенсе көндө Әбйәлил районында дауам итте. Яңауыл ауылында ла (ауылдың төп ағинәйе Сәғиҙә Йәнбирҙина) күрше-тирә ауылдарҙан ағинәйҙәр йыйылғайны. Улар бергәләп яңауылдарҙың "Орсоҡ өмәһе" йолаһын тамаша ҡылды. Олоһо ла, йәше лә, бала-сағаһы ла йыйылғайны мәҙәниәт йортона. Ағинәйҙәрҙең был тамашаһынан ысын мәғәнәһендәге өмә лә килеп сыҡты, сөнки йөн тетелде, орсоҡҡа еп булып уралды, бәйләмдәр бәйләнде. Өләсәләренә, әсәйҙәренә ярҙам иткән балалар ҙа үҙләштерҙе булды был һөнәрҙе....

Хәлил ауылы ағинәйҙәре ҡунаҡтарҙы - Мәрйәм Бураҡаева, Гөлфиә Янбаева һәм Әбйәлил районы "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе Роза Таһированы балалар баҡсаһында ҡаршыланы. Был ауыл ағинәйҙәре, тәрбиәне балалар баҡсаһынан башларға кәрәк, тигән ҡағиҙәне нығ тота. Ул кескәй нәнәйҙәр ағинәйҙәр аҡылын аңлар хәлдәме, тигән һорау тыуамы? Ә һеҙ был аҡылдың нисегерәк һеңдерелеүен күрһәгеҙ икән! Мәҫәлән, ағинәйҙәр был юлы яңы тыуған сабыйға исем ҡушыу йолаһын атҡарҙы. Ошо баҡсала эшләүсе Маһинур һәм Әхмәтхан Хәйбуллиндар ҡурсаҡ бәпес күтәреп килеп инеп, ағинәйҙәр уратып алған өҫтәлгә һалды. Ауылдың имам-хатибы Зәкир Ниғмәтуллин иһә доғалар уҡып, "бәпескә" Салауат исеме бирҙе. Шулай итеп, ике ҡыҙ, ике ул тәрбиәләгән йәш ғаиләгә бишенсегә Салауат тигән ул тыуыуы юралды. Йоланы күҙәткән 4-5 йәштәрҙәге балаларҙың күҙҙәре янды былай. Етмәһә, ағинәйҙәр йоланы урынеренә еткереп, уларға күстәнәстәр ҙә өләште...

Аҫҡар ауылы китапханаһында ауылдың ағинәйҙәре (етәксеһе Зәлифә Шакирова), китапханасылар, башҡорт теле уҡытыусылары менән осрашып һөйләшкәндән һуң, Өфө ҡунаҡтары Ишкилде ауылына юл тотто. Бында иһә ағинәйҙәр һөйләшеүҙе атай абруйы темаһына арнаны. Бер нисә атай үҙ ғаиләһендә бала тәрбиәләү мәсьәләһенең ҡуйылышы, үҙ һөнәре тураһында һөйләне, эштәре менән ғәмәлдә таныштырҙы. Мансур Усманов - һандыҡтар яһау оҫтаһы икән: "Тирә-яҡ ауылдарҙағы ҡыҙҙар минең һандыҡ менән кейәүгә сыға һәм уларҙың береһе лә әле ғаиләһен тарҡатҡаны юҡ, тимәк, һандыҡтарым ҡотло..." - тине ул. Ауылда мәсет төҙөп ултыртҡан эшҡыуар Хөрмәт Хәсәнов: "Ир балаларҙы эшләтеп үҫтерергә кәрәк. 3 улымды ла һәр ергә бергә алып йөрөйөм, бар эштәрҙе бергәләп атҡарабыҙ..." - тип, хеҙмәт тәрбиәһенә өҫтөнлөк биреүен билдәләне. Ауылдың талантлы атайҙары - "Байыҡ" бейеү конкурсында ҡатнашҡан Ринат Зарипов, ҡурайсы, гармунсы Зөфәр Дәүләтшин, башҡорт балаһы бейей ҙә, йырлай ҙа, ҡурайҙа ла уйнай белергә тейеш, тип иҫәпләүе, шуға ла үҙҙәренең генә түгел, мәктәптә уҡыусы башҡа балаларҙы ла ошо һөнәрҙәргә өйрәтеүгә ихлас тотоноуҙары тураһында белдерҙе...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Ҡараңғылыҡты әрләгәнсе..." тигәнде тағы бер тапҡыр ҡабатлап, ағинәйҙәрҙең бәләкәй генә булһа ла бер ғәмәл атҡарыуын, үҙҙәре йәшәгән төбәктә "шәм нуры" менән булһа ла яҡтыртырға тырышыуын билдәләмәй булмай. Ағинәйҙәр менән ауылдар йәмле, ағинәйҙәр менән милләттә ҡот яңыра. Ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙға ағинәйлек йоҡһон, тип теләйек. Сөнки донъя терәге булыр ир-егеттәр ҙә тап ошондай әсәнән тыуа, тап ошондай әсәләр тарафынан тәрбиәләнә бит.**

**Зөлфиә СИБӘҒӘТУЛЛИНА.**



*Хәлил ауылының балалар баҡсаһында.*

*УҢЫШ ҠАҘАН*

# ҮҘ-ҮҘЕҢӘ ЫШАНЫУҘЫҢ ТӨП СЕРҘӘРЕ

### Икенсе аҙым - бәйләнеш булдырығыҙ һәм тыңлағыҙ

Бары тик интуицияғыҙҙы тыңлағыҙ, ҡабул итегеҙ һәм уның ҡушҡанын үтәгеҙ. Әгәр нимәнелер ҡалдырырға кәрәк икән - ҡалдырығыҙ, үҙгәртергә кәрәк булһа - үҙгәртегеҙ. Элек эшләгән ғәмәлдәрҙе икенсе төрлө башҡармай тороп, тормошоғоҙҙо үҙгәртә алмаясаҡһығыҙ. Иҫегеҙҙә тотоғоҙ: әлегә тиклем нимә эшләгәнһегеҙ, шуны һис үҙгәрешһеҙ артабан да дауам итһәгеҙ, быға тиклем нимәгә эйә булғанһығыҙ, шуға ғына эйә буласаҡһығыҙ. Һеҙҙе шул ҡәнәғәтләндерәме? Юҡ икән, эске тауышығыҙҙы тыңлағыҙ һәм тормошоғоҙҙо үҙгәртеүҙән ҡурҡмағыҙ!

### Өсөнсө аҙым - күҙаллағыҙ һәм яҙығыҙ

Бер нисә минутығыҙҙы бүлеп, нимә эшләргә, нимәгә эйә булырға йәки был тормошта кем булырға теләйһегеҙ - шуны күҙ алдына килтереп, яҙығыҙ. Ышаныслы һәм ныҡлы итеп ҡабат-ҡабат ҡабатланған (күҙаллау менән нығытылып ҡуйылған) һүҙҙәр ысынбарлыҡҡа аша.

Уйығыҙҙа ғына алдығыҙҙа экран эшләгеҙ. Тормошоғоҙҙо теләгән ғәмәлдәрегеҙҙе башҡарып һәм аңығыҙҙағы образдарҙы үҙгәртеп кенә үҙгәртә алаһығыҙ. Бөтөн сер шунда: нимә тураһында хыялланаһығыҙ, шуны үҙегеҙҙеке итеп күҙаллағыҙ. Сәләмәтлек тураһында хыялланһағыҙ, үҙегеҙҙе һау-сәләмәт итеп күҙ алдына баҫтырығыҙ. Аҡса тураһында хыялланһағыҙ, нисек итеп әйбер һатып алыуығыҙ һәм аҡса туҙҙырыуҙан ҡәнәғәтлек алыуығыҙҙы күҙаллағыҙ. Бизнесығыҙҙы киңәйтеү тураһында хыялланһағыҙ, һатып алыусылар йәки клиенттарҙың ағымы килеүен күҙ алдына килтерегеҙ. Ниндәй генә хәл-торош булмаһын, үҙегеҙҙе бәхетле һәм йылмайыусан итеп күрегеҙ.

Хыялдарығыҙҙы асыҡ һәм аныҡ итеп күҙаллағыҙ. Күреп кенә ҡалмағыҙ, уларҙы тойорға тырышығыҙ. Әгәр хыялдарҙы визуаллаштерә алһағыҙ, улар ысынбарлыҡҡа әйләнәсәк. Профессор Джеймстың һүҙҙәрен иҫләйһегеҙме? Кешелектең бөйөк асышы шунда: кеше фекерләүенең эске аспекттарын үҙгәртеп, тормошоноң тышҡа аспекттарын үҙгәртә ала!

Образдарҙы ыңғай раҫлауҙар менән нығытығыҙ. Визуаллаштереү процесында уларҙы үҙаллы ҡабатлағыҙ. Һүҙҙәрҙең иждаи көскә эйә икәнлеген онотмағыҙ.

Ниһайәт, уйығыҙҙа ғына булған нәмәләр өсөн рәхмәт әйтегеҙ. Был теләктәребеҙҙең юлда булыуына ишара һәм көтөү тойғоһон барлыҡҡа килтерәсәк. Хыялдарҙы тормошҡа ашырыу өсөн был бик мөһим. Күҙҙәрегеҙҙе асығыҙ һәм хыялығыҙҙың йәки теләгегеҙҙең тормошҡа ашырылына ышаныстан ҡәнәғәтлек алып, кирелегеҙ.

Ни тиклем күберәк медитация үтһәгеҙ, был процесс шул тиклем нығыраҡ оҡшай барасаҡ. Ни тиклем быға ваҡытығыҙҙы әҙерәк бүлһәгеҙ, шул тиклем уны бушҡа ваҡыт үткәреү тип ҡараясаҡһығыҙ. Медитация күберәк булған һайын уның наградаһы әһәмиәтлерәк һәм яҡшыраҡ.

### Тормошоғоҙ ваҡыты

Мәшғүл кешеләр һәр ваҡыт: "Ваҡыт ҡайҙа китә?" - тип һорай. Әлбиттә, ваҡыт бер ҡайҙа ла китмәй, һәүетемсә аға бирә, әммә беҙ теләктәребеҙҙең барыһын да тормошҡа ашырырға өлгөрмәйбеҙ.

Барлыҡ спорт ярыштарында судья-хронометрист була. Тормошта иһә нимәнелер ҡабаттан ҡарау өсөн "ваҡытты туҡтатыу" мөмкинлегенән мәхрүмбеҙ. Һәм, бер нәмәгә ваҡыт етмәй, тип ҡәнәғәтһеҙлек белдерәбеҙ икән, уйланырға урын бар: күпселек осраҡта эшләгән эштәребеҙ ваҡыттың үтеүен аҡларлыҡ әһәмиәткә эйә булмай сыға.

**Роберт ЭНТОНИ.**

**(Дауамы бар).**



## 14 НОЯБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 03.05 "Модный приговор".
12.00 Новости.
12.15 "Про любовь" (16+).
13.20, 14.15, 15.15, 01.10 "Время покажет" (16+).
14.00 Новости.
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Мажор". 1-я и 2-я серии. Криминальный сериал (16+).
23.25 "Вечерний Ургант" (16+).
23.55, 02.00 "Познер" (16+).
00.55 Ночные новости.
03.00 Новости.
04.05 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном" (12+).
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
11.55, 01.00 "Сваты". Комедийный сериал (12+).
14.00 "Вести".
14.40 "Вести-Башкортостан".
14.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.20 "Вести-Башкортостан".
17.40 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
18.50 "60 минут". Ток-шоу (12+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Черная кошка". 1-я и 2-я серии. Криминальный сериал (12+).
23.00 "Специальный корреспондент" (12+).
24.00 "Расследование Эдуарда Петрова" (16+).
03.05 "Дар". Сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Неповторимый Эдди". Сериал (16+).**
**11.00 Новости недели.**
**11.45 "Специальный репортаж".**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00, 02.30 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Үткән ғүмер" (12+).**
**14.30, 18.30, 23.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45, 19.00 "Интервью" (12+).**
**15.00 "Наука 102" (6+).**
**15.30 "Книга сказок".**
**15.45 "Байтус" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Перекличка" (6+).**
**16.30, 17.30, 20.15 Новости.**
**17.15 "Полезные новости" (12+).**
**17.45 "Красная кнопка" (16+).**
**19.15 "Бай бакса" (12+).**
**19.45 "Сәңгелдәк".**
**20.00 "Полезные новости".**
**20.50 Хоккей. КХЛ. "Торпедо" (Нижний Новгород) - "Салават Юлаев" (Уфа).**
**24.00 "Золото апачей". Худ. фильм (16+).**
**01.30 Новости (на башк. яз.).**
**03.30 М.Гафури. "Красная звезда" (12+).**

## 15 НОЯБРЯ ВТОРНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 03.25 "Модный приговор".
12.00 Новости.
12.15 "Про любовь" (12+).
13.20, 14.15, 15.15, 01.30 "Время покажет" (16+).
14.00 Новости.
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.55 "Мажор". 3-4-я серии (16+).
21.00 "Время".
21.30 Футбол. Товарищеский матч. Сборная России - сборная Румынии.
23.35 "Вечерний Ургант" (16+).
00.10 Ночные новости.
00.25 "Команда навсегда" (12+).
02.20, 03.05 "Наедине со всеми" (16+).
03.00 Новости.
04.25 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном" (12+).
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Сваты". Комедийный сериал (12+).
14.00 "Вести".
14.40 "Вести-Башкортостан".
14.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.20 "Вести-Башкортостан".
17.40 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
18.50 "60 минут". Ток-шоу (12+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Черная кошка". 3-4-я серии. Сериал (12+).
23.00 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
23.55 "Команда" с Рамзаном Кадыровым" (12+).
01.00 "Сваты". Комедийный сериал (16+).
03.05 "Дар". Сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Неповторимый Эдди". Сериал (16+).**
**11.00 "Следопыт" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Малый бизнес" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Күңелем моңдары" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30, 01.15 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45, 19.00 "Интервью" (12+).**
**15.00 "Дорога к храму" (12+).**
**15.30 "Йырлы кәрәҙ".**
**15.45 "Бауырһаҡ".**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Семәр".**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**17.45 "Дознание" (16+).**
**18.15 "Полезные новости" (12+).**
**19.15 "Үткән ғүмер" (12+).**
**19.45 "Сәңгелдәк".**
**20.00 "Путь невидимых чудес". Док. фильм.**
**20.45 "Полезные новости" (12+).**
**21.00 "Интервью".**
**22.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.00 "Кровью и потом: анаболики". Худ. фильм (12+).**
**01.45"Бәхетнамә" (6+).**
**02.45 Н.Асанбаев. "Райса+Файзи" (12+).**

## 16 НОЯБРЯ СРЕДА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости.
12.15 "Про любовь" (16+).
13.20, 14.15, 15.15 "Время покажет" (16+).
14.00 Новости.
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Мажор". 5-6-я серии. Сериал (16+).
23.35 "Вечерний Ургант" (16+).
00.10 Ночные новости.
00.25 "Александр Блок. "Я медленно сходил с ума" (16+).
01.30 "Время покажет" (16+).
02.25, 03.05 "Наедине со всеми" (16+).
03.00 Новости.
03.25 "Модный приговор".
04.25 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
11.55, 01.05 "Сваты". Комедийный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.40 "Вести-Башкортостан".
14.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.20 "Вести-Башкортостан".
17.40 "Прямой эфир" (16+).
18.50 "60 минут" (12+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Черная кошка". 5-я и 6-я серии (12+).
23.00 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
03.15 "Дар". Сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Неповторимый Эдди". Сериал (16+).**
**11.00 "Наука 102" (6+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Криминальный спектр" (16+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Тәмле" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45, 19.00 "Интервью" (12+).**
**15.00 "Следопыт" (12+).**
**15.30 "Городок АЮЯ".**
**15.45 "Ал да гөл" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Физра" (6+).**
**17.15, 18.15, 20.45 "Полезные новости" (12+).**
**17.45 "Это мы!" (12+).**
**19.15 "Автограф" (12+).**
**19.45 "Сәңгелдәк".**
**20.00 "Телецентр".**
**21.00 "Власть отвечает".**
**22.00 "Историческая среда" (12+).**
**23.00 "Сюрприз". Худ. фильм (16+).**
**01.15 Новости (на башк. яз.).**
**01.45 "Бәхетнамә" (6+).**
**02.45 М.Бурангулов. "Шауракай" (12+).**

## 17 НОЯБРЯ ЧЕТВЕРГ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 03.25 "Модный приговор".
12.00 Новости.
12.15 "Про любовь" (16+).
13.20, 14.15, 15.15, 01.30 "Время покажет" (16+).
14.00 Новости.
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00, 02.20, 03.05 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Мажор". 7-я и 8-я серии. Сериал (16+).
23.35 "Вечерний Ургант". Развлекательное шоу (16+).
00.10 Ночные новости.
00.25 "Семь морей Ильи Лагутенко" (12+).
03.00 Новости.
04.25 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном". Ток-шоу.
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
11.55, 01.00 "Сваты". Комедийный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.40 "Вести-Башкортостан".
14.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.20 "Вести-Башкортостан".
17.40 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
18.50 "60 минут". Ток-шоу (12+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Черная кошка". 7-8-я серии. Сериал (12+).
23.00 "Поединок" (12+).
03.10 "Дар". Сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Неповторимый Эдди". Сериал (16+).**
**11.00 "Моя планета Башкортостан"**
**11.30, 16.30, 17.30 Новости.**
**11.45 "Современник" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Бай" (12+).**
**14.30, 18.30, 23.30, 01.45 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45, 19.00 "Интервью" (12+).**
**15.00 "Малый бизнес" (12+).**
**15.15 "ДОСААФ: испытано на себе" (12+).**
**15.30 "Борсаҡ".**
**15.45 "Фанташ" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Йырлы кәрәҙ".**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**17.45 "Клио" (12+).**
**19.15 "Башҡорттар" (6+).**
**19.45 "Сәңгелдәк".**
**20.00 "Полезные новости".**
**20.15 "Интервью".**
**20.45 Новости (12+).**
**21.20**
**18.45 Хоккей. КХЛ. "Спартак" (Москва) - "Салават Юлаев" (Уфа).**
**24.00 "Глубокое синее море". Худ. фильм (16+).**
**02.15 "Бәхетнамә" (6+).**
**03.15 И.Дильмухаметов. "Ҡаһым түрә" (12+).**

## 18 НОЯБРЯ ПЯТНИЦА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости.
12.15 "Про любовь" (16+).
13.20, 14.15, 15.15 "Время покажет"
14.00 Новости.
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00, 05.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Жди меня" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым.
19.50 "Поле чудес" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Голос". Новый сезон. Музыкальный конкурс (12+).
23.40 "Вечерний Ургант" (16+).
00.25 "Марлен Дитрих и Грета Гарбо. Ангел и божество". Фильм (12+).
01.30 "Короли улиц-2: город моторов". Худ. фильм (18+).
03.15 "Дневник слабака: дни собаки". Худ. фильм (12+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном". Ток-шоу.
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
11.55, 01.25 "Сваты". Комедийный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.40 "Вести-Башкортостан".
14.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.20 "Вести-ПФО".
17.40 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
18.50 "60 минут". Ток-шоу (12+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Юморина" (12+).
23.15 "Райские кущи". Драма (12+).
03.35 "Дар". Сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Неповторимый Эдди". Сериал (16+).**
**11.00 "Это мы!" (6+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Криминальный спектр" (16+).**
**12.00 "Здоровое решение" (12+).**
**12.30 "Узаман". Марат Хафизов (12+).**
**13.15 "Күңелем моңдары" (12+).**
**14.00 "Хазина" (6+).**
**14.30, 18.30, 22.30, 01.15 Новости (на башк. яз.).**
**14.45 "Бала-сага" (6+).**
**15.30 "Сулпылар".**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Зеркальце".**
**16.45 "Власть отвечает" (12+).**
**17.15, 20.45 "Полезные новости" (12+).**
**17.45 "Специальный репортаж" (12+).**
**18.00 "Йома".**
**19.00 "Алтын тирмә".**
**19.45 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.00 "Вопрос+Ответ=Портрет" (6+).**
**21.00 "Интервью" (12+).**
**22.00 "Наука 102" (6+).**
**23.00 "Башҡорт йыры" (12+).**
**23.30 "Как снег на голову". Худ. фильм (12+).**
**01.45 В.Дельмар. "Дальше - тишина" (12+).**

## 19 НОЯБРЯ СУББОТА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости.
06.10 "Солдат Иван Бровкин". Худ. фильм.
08.00 "Играй, гармонь любимая!"
08.45 "Смешарики. Новые приключения".
09.00 "Умницы и умники" (12+).
09.45 "Слово пастыря".
10.00 Новости.
10.15 "Маргарита Терехова. Одна в Зазеркалье". Док. фильм (12+).
11.20 "Смак" (12+).
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Идеальный ремонт".
13.15 "На 10 лет моложе" (16+).
14.10 "Голос". Специальный выпуск (12+).
16.50 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым" (12+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 "Ледниковый период". Новый сезон.
21.00 "Время".
21.20 "Сегодня вечером" (16+).
22.40 "МаксимМаксим" (16+).
23.55 "Потомки". Мелодрама (16+).
02.05 "Приятная поездка" (16+).
04.15 "Модный приговор".
05.05 "Мужское/Женское" (16+).

### РОССИЯ 1

05.00 "Малахольная". Худ. фильм
07.05 "Диалоги о животных".
08.00 "Вести-Башкортостан".
08.20 "Говорит и показывает Уфа"
09.20 "Сто к одному". Телеигра.
10.20 "Семейный альбом" (12+).
11.00 "Вести".
11.20 "Вести-Башкортостан".
11.40 "Юмор! Юмор! Юмор!" (16+).
14.00 "Вести".
14.20 "Нелюбимый". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
18.00 "Субботний вечер".
20.00 "Вести в субботу".
21.00 "Валькины несчастья". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
00.55 "Любовь на два полюса". Мелодрама (12+).
03.00 "Марш Турецкого-3". Сериал

### БСТ

**07.00, 12.30, 18.30 Новости (на башк. яз.).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.00 "Леонардо-3".**
**09.30 "Абдулла-алпамыш". Док. фильм**
**10.00 "Здоровое решение" (12+).**
**10.30 "Большой чемодан" (6+).**
**11.15 "Клио" (6+).**
**12.00 "Следопыт" (12+).**
**13.00 "Бай" (12+).**
**13.30 "Автограф" (12+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**16.00 "Байыҡ-2016" (12+).**
**17.00 Ф.Буляков. "Москва - Васютки"**
**18.50Хоккей. КХЛ. ХК "Сочи" (Сочи) - "Салават Юлаев" (Уфа).**
**21.30 Новости.**
**22.00 "Мистический Башкортостан"**
**22.30 Новости недели (на башк. яз.).**
**23.00 "Башҡорт йыры-2016" (12+).**
**23.45 "Нокаут". Худ. фильм (16+).**
**01.30 Новости недели (на башк. яз.).**
**02.00 М.Карим. "В ночь лунного затмения" (12+).**

## 20 НОЯБРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости.
06.10 "Иван Бровкин на Целине". Худ. фильм.
08.10 "Смешарики. ПИН-код".
08.20 "Часовой" (12+).
08.55 "Здоровье" (16+).
10.00 Новости.
10.15 "Непутевые заметки".
10.35 "Пока все дома".
11.25 "Фазенда".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Мы все равны перед Богом".
13.25 "Теория заговора" (16+).
14.20 "Я хочу, чтоб это был сон..." Концерт Елены Ваенги (12+).
16.10"Точь-в-точь". Новый" (16+).
19.20 "Лучше всех".
21.00 "Воскресное "Время".
22.30 "Подмосковные вечера" (16+).
23.30 "Владимир Скулачев. Повелитель старости". Док. фильм (12+).
00.30 "Не угаснет надежда". Приключения (12+).
02.25 "Зажигай, ребята!" Худ. фильм (16+).
04.15 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.05 "Версия полковника Зорина". Худ. фильм.
07.00 "Мультутро "Маша и Медведь".
07.30 "Сам себе режиссер".
08.20 "Смехопанорама" Евгения Петросяна.
08.50 "Утренняя почта".
09.30 "Сто к одному". Телеигра.
10.20 "Вести-Башкортостан. События недели".
11.00 "Вести".
11.20 "Смеяться разрешается".
14.00 "Вести".
14.20 "Сломанные судьбы". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
18.00 "Синяя птица". Всероссийский открытый конкурс юных талантов.
20.00 "Вести недели".
22.00 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
23.50 "Патриарх". Фильм Саиды Медведевой (12+).
01.30 "Без следа". Детективный сериал (12+).
03.45 "Смехопанорама".

### БСТ

**07.00 Новости (на башк. яз.).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.00 "Приключения Папируса".**
**08.30 "Мечты" (6+).**
**09.00 "Йома".**
**09.30 "Бай бакса" (12+).**
**10.00 "Физра" (6+).**
**10.15 "Перекличка" (6+).**
**10.30 "Гора новостей" (6+).**
**10.45 "Ал да гөл" (6+).**
**11.00 "Сулпылар" (0+).**
**11.15 "Фанташ".**
**11.30 "Байтус" (6+).**
**11.45 "Алтын тирмә".**
**12.30 Новости недели (на башк. яз.)**
**13.00 "Тәмле" (12+).**
**13.30 "Башҡорттар" (6+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**15.30 "Автограф" (12+).**
**16.00 "Дорога к храму".**
**16.30 "Историческая среда" (12+).**
**17.00 "Путь невидимых чудес" (12+).**
**18.00 "Ах, Сапатера!" (12+).**
**19.30 "Это мы!" (6+).**
**20.00 "Байыҡ-2016" (12+).**
**21.00 "Дознание" (16+).**
**21.30 Новости недели.**
**22.15 "Специальный репортаж" (12+).**
**22.30 "Красная кнопка" (16+).**
**23.15 "Вечер.com" (12+).**
**24.00 "Свидание с джазом" (12+).**
**01.00 "Основной инстинкт: жажда риска". Худ. фильм (18+).**
**03.00 "Трамвай "Желание" (12+).**

✓ *Шулай ҙа был уйында Игорь Захаркин командаһы көслөрәк булып сыҡты - өсөнсө осорҙа "Лада"ға тағы ла ике шайба "бүләк" итеп, юлаевсылар уйынды 4:2 иҫәбе менән тамамланы.*



*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# ҠЫРПАҒАЙҘА ТЫУҒАНДАР




**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА** төҙөнө.

**42-се һандағы сканворд яуаптары. Горизонталь буйынса:** Кәримов. Ҡыйратыр. Йүкә. Ҡарарлы. Байкал. Хәсәнова. Йыла. Автограф. Телеүҙәк. Ашағанда. Ламанча. Сермяга. Грим. Гудаута. Өлөшөнә. Үтес. Әбәк. Редкблеман. Лоҡманов. Текә. Локк. Заман. Йәғни. Алла. Нөктә. Йома. Өмөтбаева. Тәмле. Йола.

**Вертикаль буйынса:** Наил. Әлмөхәмәтов. Мөгәҙә. Көй. Алоха. Шөкөрә. Чума. Ҡойҡа. Хәмиҙуллин. Альфа. Өйөрмә. Карикатура. Еҫкәт. Әттәһе. Лайка. Ынйы. Нуғай. Атай. Хата. Лазым. Әрәсә. Сигәләү. Алма. Таяҡ. Димсе. Нәүем. Саванна. Яҡупов. Илико. Аккра. Ауыл. Ваза.

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*



## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**12 ноябрь "Бәхет хаҡы"** (Х. Мөҙәрисова), музыкаль мелодрама 16+

**13 ноябрь "Ул бит кисә ине"** (А. Әхмәтғәлиева), лирик комедия 12+

**17 ноябрь "Аҡ пароход"** (С. Айытматов), драма 12+

**18 ноябрь "Мин һинең ҡәйнәң булам"** (С. Белов), комедия 12+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**12 ноябрь "Нух кәмәһе"** (У. Хуб), ғаилә өсөн тамаша. Башлана 12.00 0+

**13 ноябрь "Ханума"** (А. Цигарели), музыкаль комедия. Башлана 18.00 12+

**15 ноябрь "Диләфрүҙгә дүрт кейәү"** (Т. Миңнуллин), музыкаль комедия 12+

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**14 ноябрь Марсель Ҡотоев** "Башҡортомдоң үлмәҫ моңо" тип аталған концерт программаһын тәҡдим итә. Концертта Азамат Тимеров, Рөстәм Шаһыбалов, Тимур Рамаҙанов, Дамир Тайыпов, Эльвира Хәйретдинова ҡатнаша. 6+

**Кем алыҡ?**

**1.** 2016 йылда Марсель Ҡотоев ниндәй халыҡ-ара йыр бәйгеһендә ҡатнашып еңеүсе була?

**2.** Йырсы беренсе тапҡыр сәхнәгә ниндәй йыр менән сыға?

**Еңеүсене концертҡа ике кешелек саҡырыу билеты көтә. Телефон: 8-917-770-17-19**

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**12 ноябрь "Китмәҫкә килгән ҡошом"** (Э. Йәһүҙин), комедия 12+

**13 ноябрь "Веселая карусель"**, филармония артистары концерты. Башлана 12.00 0+

**16 ноябрь "Ҡурайҙан - операға"** З. Исмәғилевтың тыуыуына 100 йыллыҡҡа арналған концерт 6+

*ИҒЛАН*

Диплом на имя Каримовой Регине Марселевне, серии ВСГ №4419293, выданный в 2009 году Уфимским государственным авиационным техническим университетом, считать недействительным.

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1438 һижри йыл.*

| Ноябрь (Сәфәр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалка | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 14 (14) дүшәмбе | 7:17 | 8:47 | 13:30 | 15:43 | 17:13 | 18:43 |
| 15 (15) шишәмбе | 7:19 | 8:49 | 13:30 | 15:41 | 17:11 | 18:41 |
| 16 (16) шаршамбы | 7:21 | 8:51 | 13:30 | 15:39 | 17:09 | 18:39 |
| 17 (17) кесе йома | 7:23 | 8:53 | 13:30 | 15:38 | 17:08 | 18:38 |
| 18 (18) йома | 7:25 | 8:55 | 13:30 | 15:36 | 17:06 | 18:36 |
| 19 (19) шәмбе | 7:27 | 8:57 | 13:30 | 15:35 | 17:05 | 18:35 |
| 20 (20) йәкшәмбе | 7:29 | 8:59 | 13:30 | 15:33 | 17:03 | 18:33 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*ХОККЕЙ*

# ЮЛАЕВСЫЛАР ӨСӨН...

## ай уңышлы башланды

**Был аҙнала "Салауат Юлаев" Тольяттиның "Лада"һы һәм Түбәнге Камандың "Нефтехимик" командаһы менән осрашып, икеүһен дә еңеүгә өлгәште. Шулай итеп, ноябрь юлаевсылар өсөн уңышлы башланды.**

Тәүге уйында иҫәп тик икенсе осорҙа ғына асылды. Өфө командаһы хоккейсыһы Энвер Лисиндың еңел ҡулы юлаевсыларға осрашыуҙағы тәүге мәрәйҙе килтерҙе. Ә күп тә үтмәй Степан Хрипунов иҫәпте тағы ла арттырҙы. Ҡунаҡтар ҙа бирешмәне һәм таблолағы күрһәткесте тигеҙләүгә өлгәште. Шулай ҙа был уйында Игорь Захаркин командаһы көслөрәк булып сыҡты - өсөнсө осорҙа "Лада"ға тағы ла ике шайба "бүләк" итеп, юлаевсылар уйынды 4:2 иҫәбе менән тамамланы.

Күрше республика егеттәрен иһә "Йәшел машина" бөтөнләй тар-мар итте. Еңеү яулауға "Салауат Юлаев" хоккейсыларының ныҡышмалығы, ҡапҡасы Никлас Сведбергтың ышаныслы уйыны һәм ҡунаҡтарҙың йыш ҡына штрафсылар эскәмйәһенә эләгеүе булышлыҡ итте. Беренсе осорҙағы тәүге мәрәйҙең авторы - Теему Хартикайнен. Икенсе һәм өсөнсө осорҙа юлаевсылар, ярашлы рәүештә, тағы ла ике һәм бер гол индерҙа, ә "Нефтехимик"ҡа был осрашыуҙа тик бер гол менән генә хушһынырға тура килде. Шулай итеп, уйын һөҙөмтәһе - 4:1.

Артабанғы осрашыуҙарҙа ла ошондай уйын ҡомарын һүндермәйенсә, тик еңеүҙәргә генә өлгәшеп, көйәрмәндәребеҙҙе һөйөндөрөргә яҙһын, "Салауат Юлаев"!

**Гөлназ МАНАПОВА.**

ИҒТИБАР: АКЦИЯ!

# ҺӘР КЕМ УҠЫРҒА ТЕЙЕШЛЕ...

## йөҙ башҡорт китабы




**"Киске Өфө" гәзитенең "Бәйләнештә" социаль селтәрендәге "Башстатус" төркөмө менән берлектә иғлан иткән "Башҡорт китабы топ-100+" акцияһына ҡушылған уҡыусыларыбыҙҙың тәҡдимдәрен һәр һанда күрһәтә киләбеҙ. Бөтәһе лә уҡырға тейешле китаптар исемлеге яйлап үҫә бара. Бөрйән районынан гәзит уҡыусыбыҙ Һәҙиә Баймырҙина "Башҡорт китабы топ-100+" акцияһы исемлегендә Ғәли Ибраһимовтың "Кинйә" романы ла булырға тейеш, тип яҙа.**

"Ҡасан ғына, ниндәй генә ваҡыттарҙа, кем араһында ғына һуғыш булмаһын, уның касафаты барыбер ҙә Рәсәйгә килеп теймәйенсә ҡалмаған. Ә Рәсәй эсендә йәшәүсе башҡорт тигән яугир халыҡ, әлбиттә, былдай ил-ара, донъяуи һуғыштарҙа иң алғы рәттәрҙә булған. Был яҙылмаған хәҡиҡәт, тулыһынса тоғро үтәлеп, һуңынан әҙәби-тарихи китаптарҙа ғына яҙылыр булды. Бына "Кинйә" романында ла, шулай уҡ Икенсе донъя һуғышын үтеп, күпте күргән башҡорт яҙыусыһы Ғәли Ибраһимов, Беренсе донъя һуғышынан алда булған Крәҫтиән һуғышы осорон һүрәтләй. Роман башҡорт хәрби етәксеһе Кинйә абыҙ Арыҫлановҡа арналған. Китапта Кинйәнең үҫмер сағы һүрәтләнеп, нисек итеп уның яугир булып китеүе, ни өсөн ихтилалға күтәрелеүҙәрен һүрәтләү менән бер юлы милләттең ҡатмарлы тормош юлдары ла сағылдырыла. Бөгөнгө көндәргә лә ауаздаш булған актуаль тема: Башҡортостанда йәшәгән башҡа милләттәрҙең бер-береһенә булған мөнәсәбәттәре көүҙәләндерелә. Әҫәр тарихи даталар менән рәсмиерәк төҫ алһа, уның әҙәби образдар менән байытылыуы ябай кеше уҡырлыҡ, халыҡсанлыҡ өҫтәй. Романдың тарихҡа һәм халҡыбыҙ яҙмышына төплө бер ҡараш булдырыуын иҫәпкә алғанда, уны һәр башҡорт уҡып белергә тейеш. Шуға ла Ғәли Ибраһимовтың "Кинйә" романын "Башҡорт китабы топ-100+" исемлегенә индерергә тәҡдим итәм".

СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ

## БӘЙГЕ!

**Рәсәйҙә башҡорт телендәге сценарийҙар конкурсы башланды. Сараның кураторы Фатима Янбаева хәбәр итеүенсә, "Осҡон" башҡорт видеоһы конкурсын ойоштороусылар ҡыҫҡа һәм тулы метражлы уйын форматындағы фильмдар өсөн башҡорт телендәге сценарийҙарҙы һайлап алыу тураһында иғлан итте.**

Һайлап алыу туры Башҡортостандың Заманса драматургия һәм режиссура үҙәге ярҙамында атҡарыла. Эштәрҙе компетентлы жюри баһалай. Иң яҡшы проект авторҙары бүләкләнәсәк һәм үҙ сценарийҙарын тормошҡа ашырыуҙа ярҙам аласаҡ. Ғаризалар ноябрь аҙағына тиклем ҡабул ителә. Конкурсҡа йомғаҡ 2017 йылдың ғинуар аҙағында Силәбелә "Осҡон" башҡорт видеоһы фестивалендә яһала. "Осҡон" шулай уҡ "Ҡыҫҡа метражлы уйын фильмы", "Документаль фильм", "Анимациялы видеоролик", "Социаль видеоролик" һәм "Микрокино" номинацияларында башҡорт телендәге видеолар ҡабул итә. Бөтә номинацияларҙа ла эштәргә ҡарата талаптар бар. Бәйгенең положениеһы менән конкурстың рәсми сайтында танышырға мөмкин. Яңылыҡтарҙы сайтта йәки #Oskon билдәһе буйынса һәм "Бәйләнештә" социаль селтәрендәге төркөмдә күҙәтеп барырға була. Конкурсты ойоштороусылар - Силәбе өлкәһенең Башҡорт йәштәре союзы, Мәскәү һәм Санкт-Петербургтағы Башҡортостан студенттары, аспиранттары ассоциацияһы. Фестиваль икенсе тапҡыр үткәрелә, уҙған йылда бәйгегә Башҡортостандың һәм күрше төбәктәрҙең төрлө районларынан 60-ҡа яҡын эш килгән.

## ТАҒЫ БЕР ЕҢЕҮ



**"Тамыр" балалар телеканалы проекты "ТЭФИ-төбәк" Рәсәй конкурсының финалына сыҡты. "Юл" тапшырыуы селфи аша халыҡтың йолалары, кәсептәре, мәҙәниәте менән таныштыра. Проекттың тәүге сығарылышы "Ҡымыҙ юлы" тип атала.**

"Минең таяғым - селфи яңы тапшырыуҙар төшөрөргә саҡыра!" - тигән һүҙҙәр менән башлай программаны 12 йәшлек алып барыусы Рөстәм Төхбәтов. Рөстәм ҡымыҙҙың тәме нимәгә бәйле булыуы, бейәләрҙең ниндәй тоҡомо һәйбәт һөт биреүе хаҡында һөйләй, Башҡортостанда дауаланған Толстой һәм Чехов эҙҙәре буйлап үтә, ҡымыҙ эшләй, һабантуйҙа йөрөй һәм, әлбиттә, фотоға төшөрә. Ҡымыҙ тураһында тапшырыу Өфө, Әлшәй, Дәүләкән, Ҡырмыҫҡалы райондарында төшөрөлгән.

"Был - беҙҙең өсөн бик ҡыуанысле яңылыҡ, - тип һөйләй "Тамыр" телеканалы директоры Гөлназ Ҡолһарина. - Быйыл "ТЭФИ-төбәк" конкурсының бүләкләү тантанаһы Өфөлә уҙа. Шуға күрә финалға сығыу икеләтә мөһим ине. Бөтә илдән килгән ҡунаҡтарҙы буш ҡул менән ҡаршы алыу - халҡыбыҙға хас эш түгел. Беҙ "Бөтә Өфө" ("Уфимский городовой") һәм "Рәсәй. Мәҙәниәт. Башҡортостан" ("Культурный сезон") каналдарында эшләгән хеҙмәттәштәребеҙҙе лә абруйлы премияның финалына сығыуҙары менән ихлас ҡотлайбыҙ"

## ОПЕРАНЫҢ ЯҢЫ ПРЕМЬЕРАҺЫ



**Заһир Исмәғилевтың "Салауат Юлаев" операһы башҡорт сәхнәһенә ҡайта. 16 һәм 17 декабрҙә Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры сәхнәһендә операның яңы ҡуйылыштағы премьераһы була.**

Төп партияла Башҡортостандың һәм Татарстандың атҡаҙанған артисы, "Алтын битлек" милли театр премияһы һәм Ш.Бабич исемендәге республика дәүләт йәштәр премияһы лауреаты Илһам Вәлиев сығыш яһай. "Был Өфө сәнғәт институтында уҡыуымды тамамлағандан һуң иң беренсе ҙур ролем булды. 2004 йылда Мәғәфүр Хисмәтуллинды тыңлай-тыңлай Салауат образын эшләнем. Уның улы Марат ошо тамашаның режиссеры һәм операға әҙерләнеү буйынса уҡытыусым ине, һәм мин ныҡлы күҙәтеү аҫтында булдым. Беҙ Салауаттың лирик яҡтарын асырға тырыштыҡ - ул шағир, һәм операла уны лирик герой булараҡ асыуға ҙур иғтибар бүленә. Әлбиттә, уның һоҡланғыс яугир һәм командир икәнлеген дә беләбеҙ. "Салауат Юлаев" операһы - бөйөк композиторҙың бөйөк әҫәре, тип уйлайым", - тип һөйләне Илһам Вәлиев.

2016 йылғы тамашаны спектаклдең музыкаль етәксеһе һәм ҡуйыусы дирижеры Артём Макаров, режиссеры Иркен Ғәбитов, рәссамы Рифҡәт Арыҫланов, хормейстеры Александр Алексеев тәҡдим итә. Төп партияларҙы Салауат Асҡаров һәм Раил Кучуков (Юлай), Светлана Арғынбаева һәм Катерина Лейше (Көнбикә), Эльвира Фәтихова һәм Гөлнара Вәлиева (Әминә), Владимир Копытов һәм Ян Лейше (Пугачёв), Фәнәүи Сәлихов һәм Әлим Ҡәйүмов (Бохайыр) башҡара.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

## ЯҠШЫ ҺҮҘ...

### ярты ырыҫ

Утыҙҙа ир - ил күрке.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Минә ун дүрт йәш булғанда атайымды шундай иҫәр тип уйлай инем. Минә егерме бер йәш тулғанда шуға аптыраным, был ете йыл эсендә атайым шундай аҡылланғайны!

**(Марк Твен).**

Беренсе тапҡыр яҡшы китап уҡығында яңы дуҫ тапҡандай булаһың. Уҡылған китапты яңынан уҡыу, тимәк, күптәнге яҡшы дуҫыңды осратыу.

**(Вольтер).**

Бөтәһе лә пландар ҡора, әммә бөгөн кискә тиклем йәшәй аламы, юҡмы икәнен белмәй.

**(Лев Толстой).**

Иң үкенеслеһе - беҙ бөтөн нәмәнең ҡәҙерен һуңлап ҡына аңлайбыҙ. Үткәндәрҙе һағынабыҙ, киләсәктән хәүефләнәбеҙ. Әммә бөгөнгө көндә йәшәргә генә онотабыҙ.

**(Эрих Мария Ремарк).**

Бурандар мәлендә бирелгән вәғәҙәләр тыныс көндә тиҙ онотола.

**(Уильям Шекспир).**

Иң ҙур фәҡирлек - йөрәгеңдең ярлы булыуы.

**(Тереза Әсә).**

Бер йылы һүҙ кешене һалҡын ҡыштың өс айы буйына йылыта ала.

**(Антон Чехов).**

Бер нигә ҡарамайынса өйлән: яҡшы ҡатын эләкһә - берҙән-бер булырһың, насар ҡатын эләкһә - философҡа әйләнерһең.

**(Сократ).**

**Шулай итеп тағы бер аҡыл: Монастырь урынлашҡан бер провинцияла төнө буйы туҡтамайынса ҡар яуған. Иртән дәрескә уҡыусылар билдән ҡар кисеп килергә мәжбүр булған. Уҡытыусы уҡыусыларҙан: "Хәҙер беҙ нимә эшләргә тейеш?" - тип һораған. Бер уҡыусы: "Көн йылыһын да, ҡарҙы иретһен, тип доға ҡылайыҡ", - тигән. Икенсеһе: "Тышҡа сыҡмай торайыҡ, ҡар яуһын әйҙә", - тип тәҡдим итә. Өсөнсөһө: "Был донъяның хәҡиҡәтенә төшөнгән кеше өсөн ҡарҙың булыуы ла, булмауы ла мөһим түгел", - тигән. "Ә хәҙер мине тыңлағыҙ", - тигән уҡытыусы. Уҡыусылар остаздарының күҙенә бағып, уның алтын һүҙен тыңлау өсөн иркенләберәк ултырған. Уҡытыусылары уларға ҡарап баш сайҡаған да: "Ҡулдарығыҙға көрәк алығыҙ ҙа, алға!" тигән. Бер нәмәне онотторға ярамай был донъяла йәшәгәндә: хәрәкәт кенә тормошто алға этәрә.**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир: **Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:** Ләйсән НАФИҠОВА, Зәйтүнә ӘЙЛЕ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Гөлназ МАНАПОВА, Илгиз ИШБУЛАТОВ, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@mail.ru**

«ПечатниК» яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте типографияһында баҫылды (450059, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Комсомол урамы, 27/1).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 11 ноябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4900
Заказ - 2080/11